ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
14-20 март (буранай) 2020
№ 11 (897)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" өс айға 338 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡайҙа һеҙ, малайҙар?**
йәки Ир-егеттең әскелек ҡорбаны булғаны тураһында

6

**Өс тағанға таян:**
тарихи дөрөҫлөк, художестволы зауыҡ һәм сама белеү

8-9

**Күҙгә күренмәгән һалдат...**
һаман беҙҙең арала

11

**Эташамаҫ атлы айғыр**

12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Атай ҡаһарманлығы" йәмәғәт наградаһы булдырыу ғаилә ныҡлығын, балалар тәрбиәләүҙә атай абруйын арттырыуға булышлыҡ итерме?



*Гөлшат ИҪӘНДӘУЛӘТОВА, Баймаҡ районы Ишбирҙе ауыл биләмәһе башлығы:* Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы тарафынан булдырылған "Атай ҡаһарманлығы" йәмәғәт наградаһы бик ваҡытлы һәм бик кәрәкле сара тип уйлайым. Йәмғиәтебеҙҙең бөтә вәкилдәре лә дәүләт тарафынан төрлө яҡлап ҡурсалана, дәртләндерелә. Айырыуса әсәйҙәр беҙҙә иғтибарға лайыҡ, улар борон-борондан изгеләштерелгән образ дәрәжәһенә күтәрелеп, икеләтә хөрмәт һәм һөйөү хистәре менән солғап алынған. Дәүләт тарафынан да әсәйҙәр һәр саҡ почетта һәм уның балалар тәрбиәләп үҫтереүгә һалған фиҙаҡәрлеге матди һәм мораль дәртләндереү саралары менән билдәләнә, орден, миҙалдар менән наградлана. Был тәбиғи һәм шулай булырға тейеш тә. Тик, икеһе лә бер үк изге маҡсат - балалары хаҡына йәшәп, уларҙы ысын кешеләр итеп тәрбиәләү бурысын башҡарһалар ҙа, атайҙар ошоға тиклем, нисектер, иғтибарҙан ситтә ҡалып киләләр кеүек. Әлбиттә, уларға ла ихтирам һәм һөйөү хистәре әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур һәм изге, тик был башлыса ғаилә кимәлендә сағылыш таба. Был турала йыш ҡына халыҡ араһында ла һүҙ сығып тора, ләкин эш шунан ары киткәне юҡ ине әле.

Интернет селтәрҙәрендә "атай" һүҙенең аңлатмаһына күҙ һалһаҡ:" Атай - изге, ихтирамға лайыҡ кеше, ул - һине бар итеүсе, белем-тәрбиә биреүсе. Башҡорт халҡында атай кеше айырыуса мөһим роль уйнай, сөнки ғаиләлә элек-электән ир кеше баш булған, уның әйткән һүҙе - хаҡ, башҡарған эше маҡтауға лайыҡ һаналған. Атай абруйы төшөнсәһе бөгөн дә һаҡланған. Атай - ғаилә башлығы булараҡ, яҡындарын яҡлаусы һәм һаҡлаусы, ҡурсалаусы ла. Аталы бала - арҡалы, тип юҡҡа ғына әйтмәй халыҡ. Атай тәрбиәһе алып үҫкән бала, ысынлап та, үҙен терәк-таяныслы, ышаныслы тота. Тулы ғаиләлә тәрбиәләнгән баланың бәхете лә тулы була, тип иҫәпләнгән. Атай кеше балаларының тыныс һәм матур тормошон тәьмин итергә, бәхетле бала саҡ бүләк итергә бурыслы. Улар атай өлгөһөндә тәрбиәләнә, атай - үрнәк, шуға күрә ул һәр ҡылған ҡылығы өсөн ҙур яуаплылыҡ тоя", - тип әйтелә. Бына тап ошондай атайҙар лайыҡ та инде "Атай ҡаһарманлығы "наградаһына. Һәр ауылда, ҡалала башҡаларға өлгө итеп ҡуйырлыҡ матур ғаилә башлыҡтары булған кеүек, Ишбирҙе ауыл биләмәһенең дүрт ауылында ла ундай атайҙар бихисап. Улар араһында күп бала тәрбиәләүселәр ҙә, уллыҡҡа алып, үҙенеке кеүек күреп балалар үҫтереүселәр ҙә бар. Өлгөлө, абруйлы атайҙарыбыҙ матур ғаилә башлыҡтары булыу менән бергә, ауылдаштары алдында абруй яулап, ауыл тормошо менән дә янып йәшәйҙәр, үҙ еребеҙҙең ысын илһөйәрҙәре лә улар. Бындай фиҙаҡәрлек, һис шикһеҙ, йәмәғәтселек кимәлендә танылыуға һәм ниндәйҙер дәртләндереү сараһына лайыҡ, тип иҫәпләйем.

(Дауамы 2-се биттә).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТ УҠЫМАҒАНДЫ ЙӘЛЛӘЙЕМ...

**Баймаҡ районы халҡы быйыл "Киске Өфө" гәзитен былтырғыға ҡарағанда, моғайын, күберәк алдыралыр, тип бик ышанғы килә. Ни өсөн тигәндә, ошо редакция хәбәрселәре беҙҙең яҡтарҙа йыш була һәм халыҡ менән осрашып, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса гәзит уҡыусылар менән күҙмә-күҙ һөйләшеп, фекер алышып, күңелдәребеҙҙе күтәреп, рухыбыҙҙы байытып китә. Ғөмүмән, "Киске Өфө" хәбәрселәре даими рәүештә халыҡ араһында эшләй, республикабыҙҙың башҡа райондарында ла йыш була. Был баҫма биттәрендә шуға ла урындарҙан яҙыусы авторҙар мәҡәләләренә лә киң урын бирелә.**

(Дауамы 2-се биттә).


*Журналдарыбыҙҙың баш мөхәррирҙәре лә "Киске Өфө"нө уҡый.*

12+

✓ *Шул атайҙарыбыҙ образында булған халыҡ батырҙарына, һуғыш ҡаһармандарына, кешеләрҙе бандит-хулигандарҙан яҡлаған көслө кино геройҙарына оҡшарға тырыштыҡ.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТ УҠЫМАҒАНДЫ ЙӘЛЛӘЙЕМ...

(Башы 1-се биттә).



Ә инде яҙам тиғән кешегә рәхәтләнеп яҙырға мөмкин, сөнки гәзитебеҙ рубрикаларға бик бай һәм улар төрлө-төрлө. "Киске Өфө"нө даими алдырып уҡып барыусыларға был рубрикалар яҡшы мәғлүм, шуға ла уларҙы исемләп һанап тороуҙың кәрәген күрмәйем, ә инде гәзитте алдырмаған кешеләрҙән кемдер минең был яҙмамды уҡый ҡалһа, уларға шулай тип әйтер инем: халҡыбыҙ тарихы, уның әле беҙгә асылып бөтмәгән, быуаттар төпкөлөндә ятҡан ҡайһы бер билдәһеҙ биттәре тураһында, шулай уҡ туған телебеҙ, мәҙәниәтебеҙгә ҡағылышлы көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында хәбәрҙәр булып барырға теләһәгеҙ, "Киске Өфө" гәзитенә яҙылығыҙ, яҡташтарым! Һәр кем сәләмәтлекте һаҡлау буйынса үҙенә файҙалы кәңәш алырлыҡ "Шифа" сығарылышын иһә айырым төпләмә-китапсыҡ итеп туплап барырға мөмкин, сөнки ундай мәғлүмәттәрҙе башҡа сығанаҡтан таба алмаясаҡһығыҙ.

Гәзиттә шулай уҡ республика ауылдарында киң хәрәкәт алған ағинәйҙәр йәмғиәттәре, уларҙың халыҡ хәтерен тергеҙеү, йолаларыбыҙҙы, ауыҙ-тел хазиналарын һаҡлап ҡалыу өсөн, шулай уҡ сәләмәт тормош, ғаилә ныҡлығы мәнфәғәтендә башҡарған эштәре хаҡында ла мәҡәләләр даими баҫылып тора. Әгәр ҡайһылыр берәй ауылда ындай йәмғиәт әле ойошторолмаған булып та, улар был эште нисек башларға белмәй торһа, "Киске Өфө" гәзите был йәһәттән уларға ҡиммәтле әсбап булып хеҙмәт итәсәк. Мәҫәлән, гәзиттә баҫылған йолалар сценарийҙарын улар башҡа бер баҫманан дә таба алмаясаҡ.

Яратҡан гәзитемдә һуңғы ваҡыттарҙа уҡыған һәм үҙемә бик тә оҡшаған материалдар хаҡында ла әйтеп китеү кәрәктер тип уйлайым. Миләүшә Ҡаһармановаһың хөрмәтле уҙамандарыбыҙҙың береһе, киң ҡарашлы, тәрән белемле тарихсы Йәҙгәр Бәширов менән боронғо мәшһүр шәхесебеҙ, шағир Ҡол Ғәлиҙең исемен халҡыбыҙ хәтеренә кире ҡайтарыу тураһындағы әңгәмәһе булды. Мин уны бөхетле кисерештәр менән ҡыуанып уҡыным. Йәҙгәр Бәширов - ул беҙҙең ғорурлығыбыҙ, халҡыбыҙҙың бөйөк улы. Ә ниндәй энциклопедик белемгә эйә ул! Миләүшә Ҡаһармановaның "Ут хәтере" повесын да йотлоғоп уҡып сыҡтым, әҫәрҙең дауамы баҫылған һәр һанды ҡунаҡ һымаҡ көтөп алдым. Тәжрибәле журналист Вәлиәхмәт Бәҙретдинов әҙерләп баҫтырған башҡорт ырыуҙары хаҡындағы мәҡәләләр циклы, ғөмүмән, айырым китап итеп сығарырлыҡ ҡиммәтле тарихи материал, тип әйтер инем. Гәзит алдырмағанлыҡтан, уны уҡый алмаған кешеләр минә шул тиклем йәл: ниндәй ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙән мәхрүм бит улар! Яҡташ ғалимыбыҙ Эрнст Ишбирҙин хаҡында ла (авторы Камилә Ғәлиева) уҡып ҡыуандыҡ. Ҡоштар, кейекйәнуарҙар хаҡында биолог, ауыл хужалығы фәндәре докторы Әғләм Шәриповтың яҙмалары ифрат мауыҡтырғыс, редакция ошо йүнәлештә мәҡәләләр биреүҙе киләсәктә лә дауам итһә ине, тип теләйем, сөнки уларҙы балалар ҙа уҡып кинәнә.

Мөхәрририәт коллективына киләсәктә лә эштәрендә уңыштар, ижад илһамы теләйем. Гәзит уҡыусыларға ла шундай теләгем бар: гәзитебеҙҙе ижад итеүҙә беҙ ҙә ҡатнашайыҡ, йәшәгән урындарыбыҙҙан төрлө темаларға ҡыҙыҡлы мәҡәләләр яҙып ебәрәйек. Был гәзит тематикаһын артабан да төрләндерергә булышлыҡ итер.

**Хазина ИСҠУЖИНА.**
**Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Атай ҡаһарманлығы" йәмәғәт наградаһы булдырыу ғаилә ныҡлығын, балалар тәрбиәләүҙә атай абруйын арттырыуға булышлыҡ итерме?

(Башы 1-се биттә).

***Нәзир хәҙрәт САБИТОВ, Әбйәлил районы Таштимер мәсетенең имам-хатибы:*** Әсәйҙәребеҙҙең тормош юлдашы, тәрәге булған атайҙарыбыҙ был донъяла күләгә һымаҡ ҡына күренеп ҡалдылар. Бик иртә торорҙар ине лә ҡараңғы төн ҡайтырҙар ине. Көнө-төнө ғаиләһен ашатам һәм кейендерәм тип ялһыҙ эшләрҙәр ине. Ә беҙ, балалар, атай ҡайтып, ял итергә ятһа, арҡаһын семтеп-төртөп, бәләкәй йөҙрөктәр менән ышҡып, ахырҙа, икәүләп-өсәүләп арҡаһына менеп китеп, аяҡтарыбыҙ менән бил-яурынбашын тапап, тәнен яҙа инек. Ат итеп ҡүмәкләп арҡаһына тейәлешә торғайныҡ...

Атай кеше балаға әсәй менән типә-тиң, иңгә-иң терәк булған иң ҡәҙерле, иң кәрәк кеше ул. Һәм дә атай - нәҫел башы, улы - уны дауам итеүсе, улар быуындар сылбырын дауам итәләр. Нәҫеле бар - нығыр, тигән боронғолар. Тимәк, атай кеше ысын мәғәнәһендә атай булып тәрбиә эшендә ҡатнашырға тейеш. Ул атай кешенең бала тормошонда туранантура ҡатнашыуын, балаларын яратыуын, иғтибарлы булыуын, сабыр ғына аңлатыуын, кәрәк ваҡытында шелтә биреүен, айырым уңыштары өсөн дәртләндереүҙе, килеп сыҡҡан мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеүҙе күҙ уңында тота. Бына шундай яуаплы эш ул - атай булыу.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм: "Атайҙың балаға ҡалдырған иң ҙур мираҫы - яҡшы тәрбиә", - тине. Атаның мөхәббәте әсәнекенә ҡарағанда ла баланың изге йәнле булыуына ныҡыраҡ тәьҫир итә икән. Ир бала атаһына оҡшап үҫергә ынтыла, ҡыҙ бала атаһына оҡшаған егеткә кейәүгә сығырға тырыша. Ысынлап та, бер ниндәй байлыҡ та баланың холҡон кире ҡайтара алмайҙыр. Шуға күрә киләсәктә үҫегеҙ үҫтергән емештәрҙең иң татлыһын ашағығыҙ килһә, балаларығыҙға дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышығыҙ, тип әйтелә бит хәҙистә лә.

Әлбиттә, атай кеше донъяуи эштәр менән мәшғүл, ирҙәргә ғаиләне мәтди яҡтан тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән. Шуға ла баланы тәрбиәләүҙә күп мәшәҡәттәр әсәйҙәр иңенә төшә. Ләкин бала тәрбиәһендә атайҙар мөһим роль уйнарға тейеш. Ата наҙына малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа бер үк дәрәжәлә мохтаж. Атай мөхәббәтен татып үҫкән балалар бәхетле һәм үҙ маҡсатына ирешеүсән була, тиҙәр. Атай кеше баланың үҙ баһаһын формалаштырырға ла ярҙам итә. "Күпме мәктәптәр, институттар, университеттар булыуға ҡарамаҫтан, яҡшы атайҙан башҡа яҡшы тәрбиәле балалар ҙа була алмай", - тип яҙған яҙыусы Н.Карамзин. Әлбиттә, заманында илебеҙҙең тарихы, батырҙарыбыҙҙың ғәйрәтлеге, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың иплелеге беҙҙең тәрбиәлә ҙур роль уйнаны. Шул атайҙарыбыҙ образында булған халыҡ батырҙарына, һуғыш ҡаһармандарына, кешеләрҙе бандит-хулигандарҙан яҡлаған көслө кино геройҙарына оҡшарға тырыштыҡ. Шуның кеүек, бала күңелендә атай образы дәү һәм батыр, ҡурҡмаҫ һәм еңелмәҫ, теләһә ниндәй хәлдәрҙән дә сығыу юлын белгән ҡаһарман булып ҡала. Тап шунда күренә түгелме ни атай ҡаһарманлығы? Балаһы күңелендә шундай образ тыуҙырған атай, тимәк, ысынлап та, ҡаһарман исеменә лайыҡ. Шундай награда булдырып, ниһайәт, бик дөрөҫ эшләгәндәр, афарин! Күптән кәрәк ине, уға лайыҡ атайҙар күп бит беҙҙә.

***Сания СӨЛӘЙМӘНОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Ғаиләлә, бала тәрбиәһендә атай абруйы хаҡында ошоға тиклем дә мәсьәлә ҡуҙғатыла килде; уйлай торғас, хатта календарҙа Атай көнө лә (24 июнь) пәйҙә булды, тик эш шунан ары китмәне. Ниһайәт, БР Йәмәғәтселек палатаһы атайҙар абруйын күтәреүсе махсус награда булдырырға ҡарар итте: "Атай ҡаһарманлығы" ("Отцовская доблесть") тип атала ул. Атайҙар хеҙмәтен баһалауға бер ниндәй иғтибар билдәһе булмауға ҡарағанда был һәйбәт саралыр ҙа, тик бына дәүләт наградаһы статусы уның мөһимлеген, абруйын тағы ла арттыра төшөр ине. Дәүләт наградаһы булған хәлдә күпмелер күләмдә аҡсалата премия йә ниндәйҙер ташлама ла ҡаралыуы ихтимал ине. Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта, тиҙәрме? Дөрөҫ, эш аҡсала ла түгел, ләкин ул награданың баһаһын, мәртәбәһен генә күтәрәсәк. Әбит наградаға кандидатура һайлауға талаптар ярайһы ҡаты ғына. Был турала положениела әйтелеүенсә, теге йәки был атай кешене бүләкләүгә уны эшләгән хеҙмәт коллективы йә булмаһа йәшәгән урыны буйынса ауыл биләмәһе хакимиәте тәҡдим итә. Икенсенән, наградаға дәғүә итеүсегә ҡылыҡһырлама - уның шәхси сифаттарынан тыш, ғаилә хәлен, йәмәғәтселек әүҙемлеген бәйнә-бәйнә һүрәтләгән ентекле характеристика ла талап ителә. Йәнә лә әлегә был хаҡта "награда" тигән һүҙ генә ҡулланыла, ә ул ни рәүешле буласаҡ - миҙалмы, иҫтәлекле билдәме, әллә диплом йә маҡтау ҡағыҙымы - әлегә билдәһеҙ. Нисек кенә булмаһын, урындарҙан өлгөлө балалар тәрбиәләгән, эшендә - алдыңғы, йәмәғәтселектә әүҙемлек күрһәткән, сәләмәт тормош рәүеше алып барған ҙур һәм татыу ғаилә башлығы - һәйбәт, хәстәрлекле атайҙар хаҡында махсус комиссия 15 майға тиклем килеп еткән тәҡдимдәрҙе ҡарап, иң лайыҡлы тип табылған кандидатуралар Йәмәғәтселек палатаһы советында раҫлангандан һуң наградалар Атай көнө - 24 июнь тапшырыласаҡ.

Был награда киләсәктә атай абруйын арттырыуға булышлыҡ итерме - әйтә алмайым. Бер яҡтан, атай абруйы ниндәйҙер айырыу билдәмәһе эйә булыуға ҡараймы икән? Улай тиһәң, атайын Рәсәй Геройы булһа, мәҫәлән? Ә минеңсә, барыбер ҙә атай абруйы ғаилә мөхитендә, балалар менән көн дә бергә булып, аралашып, улар мәнфәғәте менән йәшәгән шарттарҙа тыуалыр, тип уйлайым. Ә награда - улар хеҙмәтенә баһа, дәртләндереү, улар исемен йәмәғәтселек кимәлендә танытыу сараһы. Кемдәргәләр быныһы ла, бәлки, мөһимдер.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың республика Башлығының гранттарын алыу мөмкинлеге бар. 18 мартҡа тиклем Башҡортостандың Граждандарлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды һайлап алыуҙа ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итә. Һүҙ, атап әйткәндә, граждандарлыҡ йәмғиәте институттарын үҫтереүҙә ҡатнашҡан һәм социаль әһәмиәтле проекттарҙы ғәмәлгә ашырған коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға субсидиялар бүлеү хаҡында бара.

✓Рәсәй Федерацияһының Ауыл хужалығы министрлығы валюта курсының күтәрелеүе сәбәпле Рәсәйҙә аҙыҡ-түлектең төп төрҙәренә хаҡтар артыуын көтмәй. Климатҡа бәйле илдә етештерелмәгән продукцияға ғына хаҡ артыуы мөмкин. "Илебеҙ продукцияһында импорттың өләшә күп түгел. Аграрийҙар миҙгеллә баҫыу эштәренә алдан әҙерләнгән, яҙғы кампанияны үткәреү өсөн тауарҙарҙың төп импорт категориялары һатып алынған", - тиелә Ауыл хужалығы министрлығы белдереүендә.

✓Өфө районадары хакимиәттәре башлыҡтары ихаталарҙы ҡарҙан таҙартыу эшенең сифатһыҙ башҡарылыуы тураһында мэрияға аңлатма яҙырға тейеш. Уларҙың бөтәһе лә дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырыла. Был турала шаршамбы мэриялағы оператив кәңәшмәлә Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хәсәйенов белдерҙе. Өфө районадары хакимиәттәре башлыҡтарына "барлыҡ ихата биләмәләрендә тәртип урынлаштырыу" бурысы йөкмәтелде.

✓Башҡортостанда муниципалитет биләмәләренең санитар-эпидемиологик торошон яҡшыртыу өсөн Таҙалыҡ көндәре ойошторола. Республика етәксеһе Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Республикала тәүге таҙалыҡ көндәре 18 марттан 20-һенә тиклем үтә. Зауыҡлы биләмәләр йыллы барышында бөтәһе өс дөйөм республика өмәһен (18 апрелдә, 4 июлдә һәм 3 октябрҙә), шулай уҡ 16 Таҙалыҡ көнөн, ике "Йәшел Башҡортостан" дөйөм республика акцияһын үткәреү планлаштырыла.

✓Рәсәй коронавирус пандемияһы арҡаһында Европаның бер нисә иленә - Францияға, Испанияға, Германияға, Италияға һәм кире рейстарға авиабәйләнеште сикләй. Шул уҡ ваҡытта ошо илдәрҙең баш ҡалаларына, шулай уҡ Мюнхенға, Майндағы Франкфуртҡа һәм Барселонаға Шереметьево аша авиарейстар һаҡлана. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, 114 илдә 118 мең кеше яңы коронавирус йоҡторған, 4,3 мең самаһы кеше вафат булған.

✓ *Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фани донъяла хаҡлыҡ гелән генә тантана итмәй. Кемдең ҡулында көс, власть, байлыҡ - һәр осраҡта ла тап шулар хаҡлы булып ҡала. Кешелек тарихының башынан уҡ ерҙә хаҡлыҡ өсөн көрәш тынмай бара.*



*ИШАРА*

# ХАҠЛЫҠ КӨҪӘП ЙӘШӘЙБЕҘ

**Телебеҙҙә барыбыҙ өсөн дә кәрәкле, әһәмиәтле вә ҡиммәтле бер төшөнсә бар - ул хаҡ һүҙе менән атала. Лингвистар ошо һүҙҙе төрки донъяһына ғәрәп теленән ингән, тип иҫәпләй.**



Шулайҙыр ҙа ул, әммә төркиҙәрҙең боронғо тарихы һун империяһы замандарына барып тоташа, мәҫәлән, Византияла VI быуатта уҡ боронғо төркиҙәрҙәге батша титулы - хаҡан билдәле була. Тамырҙары бер иш, мәғәнә яғынан да яҡынлығы бар: юлбашсы, ил башы ошо юғары вазифаға хаҡлы кеше, эше лә, һүҙе лә, сығарған хөкөмө лә хаҡтыр, барса халҡы өсөн хакимдыр ул. Әйткәндәй, ҡарағалпаҡ телендә төркиҙәрҙә төҫтө белдергән аҡ һүҙе урынына хаҡ һүҙе ҡулланыла икән. Был осраҡта ҡарағалпаҡтар ҙа хаҡлылыр, тим: беҙ үҙебеҙ ҙә йыш ҡына күркәм затлы кешегә ҡарата аҡ уйлы, аҡ күңелле, тиһәк, ҡарағалпаҡса хаҡ уйлы, хаҡ күңелле була - миненсә, уғата образлы килеп сыға. Ысынлап та, аҡлыҡ паклыҡҡа, сафлыҡҡа тура килеп торғас, аҡтың хаҡҡа әүерелеүе лә һис ғәжәп түгелдер. Ә Ислам дине һәм уға бәйле ғәрәп һүҙ-терминдары төрки донъяһына байтаҡҡа һуңғараҡ осорҙа инә башлай.

Хаҡ һүҙе әле лә киң мәғәнәгә эйә, ул дөрөҫлөктө, хәҡиҡәтте ярашлыҡты, хоҡуҡты нарыҡлау менән бергә кешегә, уның эшмәкәрлегенә йәиһә һүҙенә бирелгән баһаны ла белдерә. Хаҡ Тәғәлә, күрше хаҡы, хаҡлы ял, эш хаҡы, хаҡ әйтеү, хаҡы бар, хаҡ артыу, хаҡһыҙ ҡыланыу һәм башҡа шундай һүҙбәйләнештәр телебеҙҙә йыш ҡулланыла. Ғөмүмән, хаҡ төшөнсәһе халҡыбыҙ аңында иң юғары баһаланған ҡиммәттәрҙең береһен аңлата.

Һәр кемебеҙ үҙенсә хаҡлы, тигән фекер ҙә бар. Бындай һығымта ниндәйҙер бер көсөргәнешле, ҡатмарлы ситуацияларҙа кеше атҡарған ғәмәлдәргә аныҡ ҡына баһа бирә алмаған саҡта эшләнә. Әммә хаҡлыҡтың төп күрһәткесе - әҙәм балаһы һөйләгән һүҙҙәрҙең, ул башҡарған ғәмәлдәрҙең әхлаҡ нормаларына, йәмғиәт талаптарына тап килеүе, илдә ҡабул ителгән ҡанундарға ҡаршы килмәүе. Ябай ғына итеп әйткәндә, хаҡлыҡ төбөндә яҡшылыҡ вә изгелек яталыр. Яман тип һаналған, усал ниәт менән башҡарылған эштәрҙән хаҡлыҡ эҙләп маташыуҙы бер нисек тә аҡлап булмай. Мине суд процестарында ҡайһы бер билдәле адвокаттарҙың иҫ китмәле яуызлыҡтар ҡылған әҙәм ишараттарының ниндәйҙер яҡшы сифаттарын табырға тырышыуы нык аптырата. Башҡа кешенең йәшәүгә хоҡуғын бар тип тә белмәүсе енәйәтсе иң элгәре үҙенең кешелек хоҡуҡтарын юҡҡа сығара, тап шуның өсөн йәмғиәт уны ситкә тибергә, ә дәүләт тейешле яза бирергә хаҡлы. Шулар хаҡында уйланғанда урыҫтарҙың боронғонан ҡалған бер хоҡуҡи нормаһы иҫкә төшә: "тешкә - теш, күҙгә - күҙ". Йәғни, кеше тешен һуғып һындырғандың үҙенең тешен һындыралар, башҡаның күҙен сығарған үҙе лә күҙенән яҙаҫаҡ. Үтә лә ҡаты ҡанун, әммә заманына күрә был хаҡлыҡ принциптарына тура килгән. Хәҙер илебеҙҙә яуыз ниәт менән, йыртҡыстарса кеше үлтереүселәрҙең дә үлем язаһынан азат ителеүе, шундай әҙәм аҡтыҡтарының (төрмәлә булған хәлдә лә) йәмғиәт иҫәбенә йәшәтелеүе бик күптәрҙә ризаһыҙлыҡ уята. Әйткәндәй, ямманаты сыҡҡан Кущевка бандаһы ағзаһы Циповяздың колонияла тәмле-татлы ризыҡтар менән туҡланыуы, уға ҡарата төрмә режимының ҡулланылмауы тураһындағы мәғлүмәт интернет селтәрендә таралып, мәғлүмәти ғауға сығарғайны. Күрәһең, хаҡлы яза алған яуыз енәйәтсегә, колония хеҙмәткәрҙәрен һатып алып, типтереп йәшәргә мөмкинлек бирелә икән. Бындай осраҡта хаҡлыҡ һәм хоҡуҡ принциптары тамам юҡҡа сығарыла бит.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фани донъяла хаҡлыҡ тиғәнең гелән генә тантана итмәй. Быға тарих үҙе шаһит. Кемдең ҡулында көс, власть, байлыҡ - һәр осраҡта ла тап шулар хаҡлы булып ҡала. Дөрөҫөн әйткәндә, кешелек тарихының башынан уҡ ерҙә хаҡлыҡ өсөн көрәш тынмай бара. Хаҡлыҡ - кешеләрҙең тиң хоҡуҡлы була алыуы менән бермә-бер бәйле. Кешелектең ҡол биләүселек эпохаһынан хәҙерге заман империализмы осоронса тиклем айырым социаль төркөмдәр араһында ғына түгел, тотош дәүләттәр араһында хаҡлыҡ хаҡына ҡанлы көрәш тынманы, кәмһетелгәндәр һәм иҙелгәндәр ирекле йәшәү хоҡуғын дауланы. Рим империяһы ҡоло Спартак та, Европа дәүләттәрендә "Ирек, тиң хоҡуҡлылыҡ һәм ҡәрҙәшлек" байрағы аҫтында башланған буржуаз революциялар ҙа, Рәсәй империяһындағы крәҫтиән һуғыштары, башҡорт ихтилалдары, XX быуат башындағы революциялар, күп ҡорбанлы Икенсе бөтә донъя һуғышы - былар барыһы ла кеше һәм милләттәр хоҡуғын яҡлау һәм нығытыу хаҡына барған көрәш күренештәре ул.

Шулай итеп, кешеләр тормошон бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ аҡҡан дала йылғаһы менән сағыштырып булмай: ул, киреһенсә, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тора. Тыуыуы булғас, үлеме лә бар, изгелеккә яуызлыҡ ҡаршылыр, дуҫтарына ылығырһың, дошманына юлығырһың, хаҡ баһанан нурланырһың, нахаҡ һүҙҙән хурланырһың... Шулай ҙа үҙмеребеҙ буйына хаҡлыҡ көҫәп йәшәйбеҙ, нахағынан арынырға тырышабыҙ. Кеше йәшәйеше ошо хәҡиҡәттәргә нигеҙләнеп ҡоролған да инде. Шулай түгелме ни?..

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҺӨЙӘҺЕҢ ИКӘН - ҺӨЙ!

**Рәсәйҙә яңы төр һалым мәсьәләһе буйынса бәхәс бара. Кемдәргә тип уйлайһығыҙ? Эт аҫраусыларға! Күптән кәрәк ине, бик яҡшы буласаҡ был. Үҙемдең эт тә, бесәй ҙә булмағандан йә улар ҙы яратмағандан түгел, ә эт һуғарып йөрөгән моңһоҙҙарҙың ҡылығына зарланғандан шулай әйтәм.**

Ҡыш көнө, ярай, уларҙың "бысраҡ эштәрен" ҡар күмеп, әҙәм күҙенә күренмәҫлек итеп тора. Тик бына бөгөн тышта яҙ. Ҡар иреү менән бөтә бысраҡ аяҡ аҫтында: баҫыр таҙа урын юҡ. Бигерәк тә ҡала урамдарында. Эттәрен кеше йөрөгән юлдан йөрөтөп, ҡайҙа етте, шунда "билдә һалып" китеүенә ҡәнәғәт ҡалып ҡарап тора хужалары. Былай ярамағанлығын, яратҡан хайуандарының артынан сит илдәрҙәге һымаҡ шыптыр моҡсай менән кескәй һоҫҡо тотоп йөрөргә кәрәклеген әйтә башлаһаң, мотлаҡ талаш, ҡара-ҡаршы биттән алыш китә инде...

Ни хәл итәһең: аң кимәле беҙҙә шулай, Рәсәй менталитеты. Әлеге яңылыҡҡа әйләнеп ҡайтҡанда, уның ғәмәлгә иненә ышаныс юҡ барыбер, ни өсөн тигәндә, эттәргә һалым Рәсәй кимәлендә түгел, ә Якутск ҡалаһы мэрияһы менән ошо төбәктең Дәүләт Йыйылышында ҡарала. Дөрөҫ, йорт хайуандарына һалым мәсьәләһе Рәсәй кимәлендә лә ҡуҙғатыла бирер ҡуйғайны, үкенескә, уның күңелһеҙ эҙемтәләргә килтереү ихтималлығын сәбәп итеп, депутаттар тарафынан мәсьәлә бына әле генә, ошо көндәрҙә кире ҡағылды. Юғиһә, тип аңлатма бирелә был хаҡта, һалым түләүҙән ҡасып, хужалары үҙҙәренең йорт хайуандарынан ҡотолорға тырышасаҡ һәм урам берәҙәк эт һәм бесәй менән туласаҡ. Тәүҙәрәк был сара иң беренсе сиратта йорт хайуандары хужаларының хайуандар тотоуҙа, шулай уҡ башҡа граждандар алдында яуаплылыҡтарын арттырасаҡ тип ҡарала ине. Шул саҡ кешеләр эт һәм бесәйҙәрҙе "уйынсыҡ өсөн" алыуҙан туҡтап, йорт хайуандарын ысынлап та яратҡан өсөн аҫраясаҡ һәм улар быныӊ өсөн һалым түләргә аҡсаларын да йәлләмәйәсәк. Рәсәй депутаттары тарафынан был закон проекты кире ҡағылып ҡына ҡалманы, ә эш ҙурғараҡ китте: Якутск ҡалаһы мэры Сардана Авксентьеваның ҡалала ошо уҡ законды ғәмәлгә индереүгә ниәтләнеүе Дәүләт Думаһының Экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау комитеты рәйесе, "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзаһы В.Бурматов тарафынан әҙәпһеҙ рәүештә "идиоттарса башланғыс" тип аталды. Шул уҡ ваҡытта Бурматов әфәндегә был "идиотлыҡ"тың бер ниндәй ҙә Якутск тарафынан килгән яңылыҡ түгел, ә яҡшы ғына онотолған иҫке башланғыс - үткән быуаттың 90-сы йылдарынан уҡ эйәрел килгән идея икәне мәғлүм түгел ине, күрәһең. Шул замандарҙа ғәмәлдә булған "Һалым системаһы нигеҙҙәре тураһында" РФ законында уҡ әле эткә һалым индереү ихтималлығы ҡаралғайны. Йә, ярай, был идея алйотлоҡ булып сыҡты һәм күптәргә оҡшаманы ла, ти. Шуның менән генә проблема хәл ителмәй бит. "Зоология һөйөүселәр" шуны ла аңларға тейеш: ҡала, ауыл урамдарында өйөрө менән йөрөгән берәҙәк эттәр күпме баланы талап, ғүмерҙәрен ҡарап итте. Һәм, ғөмүмән, улар хәүеф һәм сир сығанағы, тик уларҙы аулау һәм махсус приютта тотоу өсөн аҡса кәрәк. Эттәргә һалым тап бына ошо мәсьәләне хәл итергә мөмкинлек бирер ине. Әгәр һин хайуан ятатаһың икән, өйөңдәген генә яратма, ә ана шул берәҙәктәрҙе лә ярат һәм уларҙы ла яҡлау һәм хәстәрләү сараһын күрергә тырыш. Юғиһә, баяғы "идиотлыҡ" термины үҙенең ысын адресатын фашлаясаҡ ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанға коронавирусты билдәләү өсөн тест-системалар ҡайтарылды. Уларҙы Новосибирскиҙың "Вектор" институты ғалимдары уйлап тапҡан. Башҡортостан Республикаһы Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенең баш табибы Анна Казак хәбәр итеүенсә, тикшереүҙәр полимераза-сылбыр реакцияһы алымы менән үткәрелә. Һөҙөмтә һигеҙ сәғәттән үк әҙер була. Белгестәр 400-гә яҡын материалды тикшергән дә инде, улар араһында коронавирус асыҡланмаған.

✓Ҡытай граждандарына Рәсәйгә инеү ваҡытлыса тыйылды. Был сара хеҙмәт эшмәкәрлеген тормошҡа ашырыу, шәхси, уҡыу һәм туристик маҡсат менән юлланған Ҡытай граждандарына ҡағыла. Ошо турала Рәсәй биләмәһенә яңы коронавирус инфекцияһын индереүҙе һәм таратыуҙы иҫкәртеү буйынса оператив штаб ултырышы йомғаҡтары буйынса иғлан ителде.

✓Республиканың 75 мәктәбенә Советтар Союзы Геройҙарының исемдәре бирелә. Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, саралар "Ғорурланабыҙ! Хәтерләйбеҙ! Хөрмәт итәбеҙ!" йәштәр-илһөйәрлек акцияһы барышында уҙғарыла.

✓2019 йылда Башҡортостан банктарында 281 ялған аҡса асыҡланған - 2018 йылға ҡарағанда 63-кә күберәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһының Милли банкынан. Ялған аҡсаларҙың 80 проценты - 5 мең һумлыҡ. Аҡсаның ялған булыуына шик тыуған осраҡта уны банктың ҡулаҡса менән эшләгән бүлегенә экспертизаға тапшырырға кәрәк.

✓IX "Мисс Башҡортостан-2020" республика матурлыҡ конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башланды. Еңеүсегә республика исеменән Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара сибәрлек конкурстарында ҡатнашыу мөмкинлеге бирелә. Ғаризалар "Мисс Башкортостан" билдәһе менән missbashkortostan@mail.ru почтаһына ҡабул ителә.

✓Матбуғат йортонда күп функциялы медиаүҙәк асыу планлаштырыла, тип хәбәр итте Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов коллегия ултырышында. Уның һүҙҙәренсә, унда заманса матбуғат үҙәге, ньюс-рум, журналистар өсөн китапхана булырға тейеш. Үҙәктә республиканың барлыҡ киң мәғлүмәт саралары урынлашыр тип күҙ уңында тотола.

**✓ Хәҙер ҡаланың һәр автобусында, троллейбусында йәки трамвайында, хатта электричкала "Алға" менән иҫәпләшеү мөмкинлеге бар. Шәхси ташыусыларҙың барыһы ла беҙҙе ишетмәне. 1 июлдән уларға ҡарата санкциялар индерелә.**



ҠЫҪҠАСА

# СИТТӘГЕЛӘР ҘӘ ӨЙРӘНҺЕН

✓ Башҡортостанда балалар өсөн башҡорт телен, башҡорттарҙың тарихын, мәҙәниәтен һәм йолаларын өйрәнеү буйынса профилле сменалар ойоштоpола. Был хаҡтағы бойороҡҡа Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Ошондай профилле сменалар ойоштороу тәҡдиме менән V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы сығыш яһағайны. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығына Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендәге һәм яҡындағы сит илдәрҙәге балаларға башҡорт телен, башҡорттарҙың тарихын, мәҙәниәтен һәм йолаларын өйрәнеү буйынса профилле смена ойоштороу һәм үткәреү бурысы йөкмәтелде. Башҡортостан Республикаһының Финанс министрлығына Мәғариф һәм фән министрлығы менән берлектә бойороҡто ғәмәлгә ашырыуға бәйле сығымдарҙы финанслау күләмен һәм сығанаҡтарын билдәләргә ҡушылды.

✓ Тотош республикала "Алға" картаһы менән түләнгән юл йөрөүҙәр һаны (150 мендән ашыу) ҡулаҡса менән түләгәнгә ҡарағанда күберәк. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. "Хәтерегеҙгә төшөрәм, төп маҡсаттарыбыҙҙың береһе ифрат ҙур әйләнештәрҙә күләгәнән сығарыу ине, күреүегеҙсә, был мәсьәлә планлы рәүештә хәл ителә. Хәҙер ҡаланың һәр автобусында, троллейбусында йәки трамвайында, хатта электричкала "Алға" менән түләү мөмкинлеге бар. Әйтергә кәрәк, шәхси ташыусыларҙың барыһы ла беҙҙе ишетмәне. Ундайҙар менән юлдарыбыҙ айырыла. 1 июлдән, законға ярашлы, уларға ҡарата санкциялар индерелә: штрафтар, лицензияларын тартып алыу янай", - тип билдәләне республика Башлығы. Бынан алда Башҡортостан социаль карталар регистрына һылтанма менән Башҡортостанда пассажирҙарҙың 25 проценты юл өсөн "Алға" картаһы менән иҫәпләшеүе тураһында хәбәр ителгәйне.

✓ Өфөлә бала табыу йортонан сыҡҡанда тыуыу тураһында таныҡлыҡ тапшырыу тәжрибәһен индерҙеләр. "Әлегә был тәжрибә ике пилот учреждениеһына ғына: Өфөнөң 3-сө бала табыу йортона һәм Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының бала табыу йортона ғына индерелде", - тип белдерҙе республика хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Ленара Иванова. Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында әйтеүҙәренсә, процедура түбәндәге схема буйынса башҡарыла: кәрәкле документтар йыйыла, улар Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы белгестәре аша ЗАГС бүлектәренә ебәрелә һәм дауахананан сыҡҡан көндә документтар кире килтерелә. Киләсәктә был тәжрибәне республиканың барлыҡ бала табыу йорттарына таратыу күҙаллана.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӨҘӘТМӘЛӘР...

**Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Конституцияға президент сроктарын бөтөрөргә мөмкинлек биргән төҙәтмәгә үҙ фекерен белдерҙе. Дәүләт Думаһы депутаттары төҙәтмәне хупланы: 380-е - "ыңғай", 44-е "ҡаршы" тауыш бирҙе.**

10 мартта Путин, Дәүләт Думаһы ултырышында сығыш яһап, Конституцияға президент сроктарын бөтөрөү тураһында төҙәтмә индереүҙе хупланы һәм бының Конституция суды әлеге хәлдә хуплаған осраҡта ғына булыу ихтималлығын белдерҙе. "Ошо варианттың (президент сроктарын бөтөрөү тураһында) булыуы мөмкин, ләкин төп шарт: Конституция суды бындай төҙәтмә Конституцияға ҡаршы килмәй тигән рәсми һығымта бирергә тейеш. Беҙ бит яңы Конституция ҡабул итмәйбеҙ, ә уға мөһим төҙәтмәләр индерәбеҙ", - тине Путин.

Шул уҡ ваҡытта ул Конституциянан президент сроктары һаны буйынса сикләүҙәрҙе алыуға ҡаршы икәнен әйтте. Шулай уҡ ул Дәүләт Думаһына һайлауҙы ваҡытынан алда үткәреүҙе кәрәк тип тапмауын белдерҙе. Бынан алда "Берҙәм Рәсәй"ҙән депутат Валентина Терешкованың Конституцияға үҙгәрештәр тураһында закон проектына президент сроктарын бөтөрөү хаҡында төҙәтмә индерергә тәҡдим итеүе хәбәр ителгәйне. Билдәле булыуынса, Дәүләт Думаһы депутаттары яңы Конституция ҡабул иткәндән һуң Конституцияға президент сроктарын бөтөрөү тураһында төҙәтмәне хупланы. 380 кеше - "ыңғай", 44-е "ҡаршы" тауыш бирҙе, тип хәбәр итте .

Шулай итеп, Дәүләт Думаһында Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына төҙәтмәләр тураһында закон хупланды. Унда яҙылған тәҡдимдәр конституция ҡоролошо нигеҙҙәрен, кеше һәм граждан хоҡуҡтарын һәм иректәрен нығытыуға йүнәлтелгән, тиелә законда. Закон проекты тағы бер яңы процедураны - дөйөм Рәсәй тауыш биреүен индерә. Конституцияға төҙәтмәләр буйынса тауыш биреү шаршамбы, 22 апрелдә була. Документты ҡабул итеү өсөн 383 депутат тауыш бирҙе, "ҡаршы"лар булманы, 43 депутат тауыш бирмәне.

# АУЫЛДАҒЫЛАРҒА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 3 процентҡа тиклем процент ставкаһы менән льготалы ипотека программаһының башланыуы хаҡында иғлан итте. Был хаҡта ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙҙы.**

"Ауыл ерендә торлаҡ һатып алырға теләгәндәр өсөн ипотека буйынса ставканы субсидиялау башлана. Ҡағиҙәләрҙә 3 процентҡаса ставка менән ауылда йорт һатып алыу, уның өсөн 25 йыл дауамында түләү мөмкинлеге ҡаралған. Бындай ипотеканы бөтәһе лә алырға мөмкин - ҡалала йәки ауыл ерендә йәшәүселәрме, мөһим түгел. Ипотека кредитының суммаһы (түгге взнос 10 процент булған осраҡта) - 3 миллион һумға тиклем. Был аҡсаға теләһә ниндәй районда һәйбәт йорт һатып алырға була. Ысынында иһә был - оҙаҡ йылдар буйына бүлеп түләү. Белеүебеҙсә, күп кенә илдәрҙә ошондай мөмкинлек бар, кешеләр үҙҙәре йәшәгән торлаҡ өсөн банктар менән минималь ставка буйынса унар йылдар буйына иҫәпләшә. Хәҙер Башҡортостанда йәшәүселәр ҙә шундай мөмкинлеккә эйә", - тип яҙҙы республика етәксеһе. "Россельхозбанк" ғаризалар ҡабул итә башлаған да инде. Артабан банктар исемлеге киңәйтелә. Радий Хәбиров билдәләүенсә, 0,1 процент ставка буйынса суперлыготалы ипотекаға фермерҙар һәм ауыл хужалығы предприятиелаpында эшләгән йәки эшләргә йыйынғандар ҙа иҫәп тота ала.

# ЕРМЕ, АҠСАМЫ?

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары аҙаҡҡы уҡыуҙа бер тауыштан "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" Башҡортостан Республикаһы закон проектын ҡабул итте.**

Ошо закон проектына ярашлы, бушлай ер участкаһы алыу өсөн сиратта торған өс һәм унан күберәк балиғ булмаған балалы ғаиләләрҙең, шулай уҡ балиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән граждандарҙың һайлау хоҡуғы бар. Йәғни уларҙың ризалығы менән ер участкаһын 250 мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләүгә алмаштырырға мөмкин. Билдәләнеүенсә, бындай сара айырыуса ҡалала йәшәүселәр өсөн көнүҙәк. Ҡала янында, ҡағиҙә булараҡ, буш ерҙәр юҡ. Закон проекты ошо мәсьәләлә көсөргәнешлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Кем теләй - ер участкаһын, кем теләй- компенсацияны һайлай.Башҡортостан Республикаһының ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Дмитрий Суслин Өфөлә алты меңдән ашыу кешенең ер участкаларына сиратта тороуын әйтте. "Хәл ҡала биләмәһенең бер нисек тә артмауы менән ҡатмарлаша. Хәҙер бының өсөн яңы биләмәләр юҡ. Башҡа районҙар һәм ҡалалар менән һөйләшеп килешергә тура килә. Улар - Ҡырмыҫҡалы районы, Благовещен. Әлеге сиратҡа ер участкалары бүлеү өсөн хәҙерге ваҡытта Өфө биләмәһендә ресурстар юҡ", - тип белдерҙе ул.

# ТӨНДӘ ЙӨРӨМӘҺЕНДӘР

**Йәйге осорҙа балалар өсөн комендант сәғәте бер сәғәткә оҙайтыла. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары парламенттың пленар ултырышында "Республикала бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында" Башҡортостан Законының 1-се статьяһына үҙгәрештәр ҡабул итергә йыйына.**

Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, 17 йәшкә тиклемге балаларға 1 майҙан 30 сентябргә хәтлем төнгө сәғәт 12-нән таңғы 6-ға тиклем йәмәғәт урындарында атай-әсәйһеҙ йөрөргә ярамай. Депутаттар был осорҙо бер сәғәткә - киске 11-ҙән таңғы 6-ға ҡәҙәр оҙайтырға тәҡдим итә. Башҡа осорҙа "комендант сәғәте" үҙгәрешһеҙ ҡала - киске сәғәт 10-дан таңғы 6-ға тиклем. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, федераль ҡануниәттә "комендант сәғәте" йыл дауамында киске сәғәт 10-дан таңғы 6-ға ҡәҙәр билдәләнгән. Төбәктәр, миҙгел һәм климат шарттарын иҫәпкә алып, ваҡытты үҙҙәре билдәләргә хоҡуҡлы. Башҡортостанда был хоҡуҡ йәйге осорҙа комендант сәғәтен ике сәғәткә ҡыҫҡартыу юлы менән тормошҡа ашырылды. "Ләкин бер нисә йыл элек йәйге ваҡыттан баш тарттыҡ. Йәй көнө иртә ҡараңғы төшә башланы. Шуға бәйле "комендант сәғәте"н төнгө 12-лә түгел, ә 11-ҙә башлау маҡсатҡа ярашлы, - тип иҫәпләй Константин Толкачев. - Бынан тыш, уҡытыусыларҙан, атай-әсәйҙәр берләшмәһенән, хоҡуҡ һаҡлаусыларҙан уны оҙайтыу тураһында үтенестәр килде". Константин Толкачев фекеренсә, был ҡарар үҙенең һөҙөмтәле булыуын раҫланы. Балиғ булмағандар араһында енәйәтселек кәмей. Республика биләмәһендә урынлашҡан ике балалар колонияһының береһе ябылды, икенсеһен ябыу тураһында мәсьәлә ҡарала.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Хәҙерге ваҡытта республиканың ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәтендә 59 станция һәм бүлексәләр бар. Был хеҙмәт табиптарының уртаса эш хаҡы 2019 йылда артты, тип хәбәр итте Максим Забелин республика хөкүмәтендәге "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә. "Ашығыс ярҙам"да эшләгән урта медицина персоналының хеҙмәт хаҡы уҙған йылдың ғинуар-декабрендә уртаса 43,1 мең һум тәшкил итте. Кесе медицина персоналы иһә 33,9 мең һум самаһы алды.

✓Башҡортостанда уҙған йылда муниципалитеттар көсө менән 2 918 рөхсәтһеҙ сүплектең 414-е генә юҡ ителгән. Рөхсәтһеҙ сүплектәрҙе юҡ итеүҙең төп ысулы - уларҙы эрелатеү. Йәғни бөләкәй сүплектәрҙәге ҡалдыҡтар ҙурыраҡтарына күсерелә. Шулай уҡ республикала "Таҙа ил" төбәк проектын бойомға ашырыу барышында ҡала эсендә урынлашҡан бөтә сүплектәр юҡ ителергә тейеш.

✓Башҡортостандың 16 ҡала-районы - Стәрлетамаҡ (19), Нефтекама (6), Әлшәй (6), Архангел (3), Баҡалы (7), Бәләбәй (6), Белорет (11), Бишбүләк (8), Бүздәк (3), Дәүләкән (4), Иглин (11), Кушнаренко (6), Миәкә (7), Стәрлетамаҡ (1), Федоровка (9), Шаран (8) райондары юлдарында тиҙлек режимын боҙоуҙы теркәгән камералар барлыҡҡа килде. 1 майға тиклем бөтәһе 62 муниципалитетта 609 камера ҡуйыла. Шуларҙың 150-һе яңы йылға хәтлем үк урынлаштырылды.

✓Өфө туристарының күпселеге Антальяға барған. Төркиә курортында 433 мең кеше ял иткән. Әзербайжандың баш ҡалаһына 26,5 мең кеше барып ҡайтҡан. Истанбулға осҡан рейстарҙа хеҙмәтләндерелгән пассажирҙарҙың һаны 20 процентҡа артҡан - 35,2 мең турист. 2019 йылдың октябренән 40 меңдән ашыу турист Ҡытайҙың иҫтәлекле урындары менән танышҡан. Өфө-Вена тура рейсы туристарҙа ла, бизнес вәкилдәрендә лә популярлыҡ яулай бара. Популяр сит ил йүнәлештәре иҫәбендә - Даламан, Дубай, Камрань, Ларнака һәм Пхукет.

✓Башҡортостан ЗАГС-тары быйыл ғинуар айында 50 игеҙ баланы теркәгән. Республика Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 31 ғинуарҙа Әлиә һәм Артур Садиҡовтар үҙҙәренең түгге документын алған. Сабыйҙар 23 ғинуарҙа Белоретта Фәниә менән Русландың ғаиләһендә донъяға килгән.

✔ *Проблеманың төбөнә төшөп, ныҡлап анализламай ғына ла хакимиәт башлыҡтарының шундай уҡ башҡарма власть вәкилдәре икәнлеген иҫәпкә алыу ҙа етә. Йәғни, улар мөмкин булғандың артығын эшләй алмай.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҺАРЫҠТЫ КЕМ АШАҒАН?

**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә ҡапыл ошо мәҫәлде хәтергә төшөрҙө. Хәйер, ул бик йыш, теге йәки был мәсьәлә буйынса ғәйепләне эҙләй башлағас, "ҡылт" итеп иҫкә төшөүсән. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә ихаталарҙа ҡар өйөлөп ятҡан өсөн район хакимиәттәре башлыҡтарынан аңлатма талап итеүҙәре һәм уларға административ яуаплылыҡ менән янауҙары ошо ғәйепләләрҙе эҙләү кеүек күренде.**

Проблеманың төбөнә төшөп, ныҡлап анализламай ғына ла хакимиәт башлыҡтарының шундай уҡ башҡарма власть вәкилдәре икәнлеген иҫәпкә алыу ҙа етә. Йәғни, улар мөмкин булғандың артығын эшләй алмай, нимәнелер еренә еткереп эшләр өсөн кеше, техник һәм иҡтисади ресурстар талап ителә. Аныҡлап әйткәндә, элек баш ҡалала әлегенән күпкә күберәк урам һепереүсе эшләгән. Шул уҡ ваҡытта бөгөн бәләкәй габаритлы техника күберәк һымаҡ, әммә улар ҙа бойороҡ буйынса ғына эшләмәй - яғыулығы ла, уның менән идара итеүсеһе лә, запас частары ла - барыһы ла кәрәк. Ә инде миҙгел өсөн бюджетҡа һалынған билдәле сумманы нисек кенә тартып-һуҙһаң да, ул барыбер артмаясаҡ, әгәр артыҡ сығымдар тотонолһа, уның өсөн тағы ла баштан һыйпамаясаҡтар, тағы ла ғәйепләне эҙләү башланасаҡ. Әлбиттә, юғарыраҡ ултырғандар ғәйепле булмаясаҡ, таяҡтың ауыр башы бәләкәйерәк етәкселәргә төшәсәк. Тик быңдай алымдар ғына мәсьәләне хәл итер, проблеманы юҡҡа сығарырмы икән? Икеле...

Ошо мәлгә артыҡ туҡталмағанда, һуңғы ике кәңәшмә баш ҡала халҡының йылытыу миҙгелендә квитанцияларға ҙур суммалар яҙылып килеүе сәбәпле тыуған ҡәнәғәтһеҙлегенә арналды, йәғни яуаплы хеҙмәттәр түләүҙәр буйынса асыҡлыҡ индерҙе. Үткән аҙнала был хаҡта "Өфө инженер селтәрҙәре" МУП-ы башҡарма директоры Максим Петров бәйән итһә, был юлы түләүҙәргә төҙәтеүҙәр индереү буйынса "Өфө ҡалаһының берҙәм иҫәп-касса үҙәге" МУП-ының генераль директоры Айгөл Винникова сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, былтыр баш ҡалала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр 11 миллиард 145 миллион һум тәшкил итһә, шул сумманың 10 миллиард 961 миллион һумы, йәғни 98 проценты йыйылған. Был - Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән 4 процентҡа күберәк. Йыл һуңында, түләүҙәрҙе көйләү һөҙөмтәһендә, "БашРТС" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт 510 миллион һумды кире ҡайтарған һәм улар идара итеү компанияларының иҫәп-хисап документтарында сағылыш тапҡан.

Йыл башына халыҡтың энергия менән тәьмин итеүсе ойошмаларға 2 миллиард 385 миллион һум бурысы булған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 10 процентҡа күберәк. Бурыс артыуҙың сәбәптәре булып өҫтәмә хаҡҡа һалым күләменең 18 проценттан 20 процентҡа тиклем, йыл һайын тарифтарҙың 1 июлдән уртаса 3,6 процентҡа артыуы, яңы йылдан ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары өсөн түләү индерелеүе тора. Уларҙың төп өлөшө "һаҡаллыға" әйләнгән, йәғни өс йылдан ашыу түләнмәгән. Был категория граждандар менән айырым аңлатыу эштәре алып барыла, административ һәм хоҡуҡи яза ҡулланыла.

Шулай уҡ оператив кәңәшмәлә "БашРТС"-тың "Теплосбыт" филиалы директоры Ирина Попова сығыш яһаны. Ул тағы бер тапҡыр күп фатирлы иҫәп алыу приборы ҡуйылған йорттарҙа йылылыҡ өсөн түләү иҫәп буйынса башҡарылыуын, ә прибор ҡуйылмаған йорттарҙа норматив буйынса билдәләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Былтырғы иҫәпләүҙәрҙе ҡайтанан ҡарауҙан һуң 5303 күп фатирлы йорттарға 1 миллиард һум кире ҡайтарылған, 494 йортҡа, киреһенсә, өҫтәмә рәүештә 70 миллион һум өҫтәлгән. Төҙәтеүҙәр индерелгән квитанцияларҙы граждандар быйыл ғинуарҙа алған. Хаҡтарҙың ҡапыл артыуы халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырғас, 2019 йыл өсөн йылылыҡ менән тәьмин итеү буйынса ҡабаттан тикшереү үткәрелгән, етешһеҙлектәр асыҡланған, йәғни дөйөм йортҡа ҡуйылған иҫәп приборҙары ватыҡ булыуы асыҡланған идара итеү ойошмалары иҫкәртелгән. Бөгөн Өфөлә милекселәре "БашРТС" менән тура хеҙмәтләндереү килешеүе төҙөгән 825 күп фатирлы йортта йылылыҡ иҫәбен алып барыусы дөйөм прибор юҡ, уларҙың 202-һендә был ҡорамалды ҡуйыу өсөн техник мөмкинлектәр юҡ, 623-өндә - ҡулланыуға рөхсәт юҡ, шуға күрә идара итеү ойошмалары иҫәп приборҙарының күрһәткестәрен бирмәй.

Әйткәндәй, төҙәтеүҙәр индергәндән һуң да квитанцияларҙа 2019 йыл өсөн йылылыҡ буйынса түләү суммаһы айлыҡ түләүҙәр күләменән артып китә икән, БР Хөкүмәте халыҡҡа торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙе түләүгә субсидия йәки ай һайын аҡсалата компенсация бирә. Бынан тыш, Хөкүмәт торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙә айырым категория граждандарға социаль ярҙам мөмкинлеген дә ҡарай.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# УРАМДА ҺАТЫУ ИТМӘ!

**Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин апрель башына урамда рөхсәтһеҙ сауҙа итеүҙе бөтөрөү бурысын ҡуйҙы. Башҡортостандың баш ҡалаһында быңдай хоҡуҡ боҙоуҙар, башлыса йәйәүлеләр күп йөрөгән урындарҙа күҙәтелә, мәҫәлән, "Өфө" универмагы" туҡталышындағы ер аҫты үткәүелендә һатыу итеүгә бәйле дәғүәләр күп.**

Өфөлә граждандар өсөн 20 сауҙа майҙансығы эшләй, йыл аҙағына уларҙың һанын тағы ла 8-гә арттырыу күҙаллана. Шулай уҡ сауҙа комплекстары биләмәһендә махсус бүленгән урындар бар, ләкин уларҙың 43 проценты ғына тулы. Был тәү сиратта һатыу итеүселәрҙең үҙ тауарын халыҡ күп йыйылған урындарҙа һатыу теләге менән бәйле. Былтыр Өфө урамдарында законһыҙ сауҙа өсөн 5,6 миллион һумға 7,3 мең штраф һалынған, был 2018 йылға ҡарағанда 580 меңгә күберәк. Ләкин уларҙы түләү суммаһы үҙгәрешһеҙ ҡалған - 3,5 миллион һум кимәлендә. Штрафтың уртаса күләме - 750 һум, ә административ комиссиялар граждандарға 1,5 мең һумға еткән штраф һалмай тиерлек.

Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Николай Фадеев хәлде үҙгәртеү өсөн ҡала властарының Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетына сауҙа ҡағиҙәләрен ҡабаттан боҙған өсөн штрафтарҙы арттырыу тураһында закон сығарыу башланғысы менән сығырға кәрәк тигән тәҡдим индереүҙәрен әйтте. Хәҙер рөхсәтһеҙ һатыу иткән өсөн 500 һумдан алып 1500 һумғаса штраф һалыныуы мөмкин. Был сумманы - 1-3 мең һумға, ә ҡабаттан боҙған осраҡта 3-5 мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә.

*АФАРИН!*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛ... Башҡортостанда тыуғаныңа

**Быйыл республикабыҙ Рәсәй исеменән бик әһәмиәтле сараларҙың береһе - Бөтә донъя Фольклориадаһын ҡабул итәсәк. Ер шарындағы телдәр күплеген, халыҡтарҙың быуаттар дауамында туплап килгән рухи байлыҡтары төрлөлөгөн сағылдырған байрам алтынсы тапҡыр уҙғарыла.**

Ошондай оло тантананы ойошторо урыны итеп нәҡ Башҡортостан һайланыуы ла юҡҡа түгел - беҙҙә барыһы ла татыулыҡта донъя көтә. Был дуҫлыҡ, әлбиттә, быуындарҙан күсә килгән бер-береңә ҡарата ихтирамдан хасил булған. Ә билдәле булыуынса, башҡаға ихтирам тойғоһо ни бары үҙ туған телен, үҙ мәҙәниәтен, үҙ халҡын хөрмәт иткән шәхестә генә тыуыуы мөмкин. Бына шуны иҫәпкә алып, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме буйынса республикала Мәктәп фольклориадалары уҙғарыла башланы. Һәм шуның сиктәрендә ошо көндәрҙә Өфөнөң М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында Балалар фольклориадаһын асыу тантанаһы үтте.

Сара Өфөлә эшләп килгән украин, мари, сыуаш, йәһүд, поляк, татар, немец, әрмән, башҡорт йәкшәмбе мәктәптәренең сағыу күргәҙмәһе менән асылып китте. Һәр белем усағы уҡыусылары милли аш-һыуҙарын, уйынсыҡтарын, музыка ҡоралдарын алып килгәйне. Был күргәҙмә сәскәле аҡланды хәтерләтте - балалар барыһы ла үҙ милли кейемендә сағыу кейенгәйне. Йәкшәмбе мәктәптәренең эшендә ярҙам күрһәтергә әҙер торған башҡорт, татар, белорус, мари, рус, латыш тарихи-мәҙәни үҙәктәре коллективтары ла байрамдан ситтә ҡалмаған - зауыҡлы ҡул эштәре, ҡурсаҡтар, һауыт-һаба һәм башҡа көнкүреш әйберҙәрен балаларға күрһәтергә алып килде улар. Был балаларға бик оҡшаны, хатта байрам концерты башланырҙан алда ла, һуңынан да өҫтәлдәр эргәһенән китергә ашыҡманылар, ентекләп ҡарап, ҡыҙыҡтырған әйберҙәр тураһында һорашып йөрөнөләр. Ҡала Балалар фольклориадаһын асыу тантанаһының иң күңелгә ятҡан өлөшө, шулай ҙа, уҡыусыларҙың йыр-бейеүҙәренән торған концерт булғандыр. Сөнки уларҙың һәр кеме үҙ туған телендә үҙ йыр-моңон яңғыратты, үҙенсәлекле милли бейеүҙәрен сәхнәгә сығарҙы. Ошо рәүешле балаларҙың үҙ тамырҙарын белеп, рухи бәйләнеште тойоп үҫеүен күреүҙән дә өҫтөнөрәк бер ни ҙә юҡтыр.

Артабан уҡыусылар Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы хеҙмәткәрҙәре ойошторған квест уйынында ҡатнашты. Уның барышында 9 майҙансыҡта йәкшәмбе мәктәптәре уҡыусылары Башҡортостан һәм башҡорт халҡына ҡағылышлы викторина һорауҙарына яуап бирҙе, татар, сыуаш, мари, немец, украин, йәһүд, поляк, әрмән халҡының йырын, бейеүен, балалар уйындарын өйрәнде, ҡыҙыҡлы факттарҙы хәтеренә төшөрҙө. Мәғариф идаралығының әйҙәүсе белгесе Алһыу Ғәлимова әйтеүенсә, был матур башланғыс артабан да дауам итәсәк һәм Өфөнөң бөтә белем усаҡтарында ла ошондай саралар ойошторолоуы көтөлә.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк ауырыуҙарынан

❖ Тигеҙ нисбәттә ҡайын еләге япрағы һәм емештәрен, ҡыҙыл миләш, энәлек, балан емештәрен ваҡлап ҡушырға һәм термосҡа бер семтем һалып, бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Был сәй йөрәк аритмияһы булғанда ярҙам итә.

❖ Лимон, һарымһаҡ һәм бал ҡатышмаһы йөрәк ауыртҡанда ярҙам итә. Уны әҙерләү өсөн бер баш һарымһаҡ һәм лимонды ҡабығы менән ит үткәргестә ваҡлап, 1 литр ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға. Бүлмә температураһында 3 көн төнәтергә, һөҙөргә һәм бер ҡалаҡ бал ҡушырға. Иртәнсәк ас ҡарынға 50 миллилитр эсергә.

❖ Был төнәтмә бөтә төр йөрәк ауырыуҙарын дауалағанда файҙалы. Роза таж япраҡтары, ҡандала үләне, баҫыу ҡырҡбыуыны, мелисса, арыҫлан ҡойроғо үләндәре, йүкә сәскәһен 2-шәр өлөш, энәлек сәскәһе һәм емештәре, шиңмәҫгөл сәскәһен 4-әр өлөш итеп ҡушырға. Бер ҡалаҡ йыйымға ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ашарҙан 20 минут алда өс тапҡыр эсеп бөтөрөргә. Дауаланыу мөҙҙәте 1 ай.

❖ Инфаркт һәм инсультты иҫкәртеү, ҡан баҫымын түбәнәйтеү, коронар тамырҙарҙы таҙартыу өсөн һарымһаҡ төнәтмәһе ҡулланыу яҡшы. 40 грамм онтаҡланған һарымһаҡты үтә күренмәгән һауытҡа һалып, 100 грамм ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға. Һалҡын урында 10 көн төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 10-ар тамсы эсергә.

❖ Петрушка орлоғон ҡәһүә тартҡыста ваҡлап, көнөнә 3 тапҡыр бер семтем ашарға.

❖ 1 ҡалаҡ иҙелгән балан емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Йөрәк хәлһеҙлеген дауалағанда бер стакан төнәтмәне икегә бүлеп эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға, йылына 4 тапҡыр ҡабатлау файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

## ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Билдәләнгән территорияла нескә ҡайыулы киндер киҫәктәре - һарауыстар ҙа булған. XX быуатҡа уларҙың башланғыс төп тәғәйенләнеше онотолған.**

XX быуат уртаһында һарауыстар сиктәре трапеция формаһында билдәләнгән кәкерсәк биҙәкле сәтин йә ҡомас тауар киҫәге рәүешендә булған; күпселек осраҡта орнаменты ябай шыма нағыш менән сигелгән.



*Көньяҡ-көнсығыш төбәктең һарауысы. Хисаплы шыма нағыш һәм сатрашлап сигелгән. ВЭМ. XX б. башы.*

Түшелдерек, янсыҡ, еп баҫмаһы менән бергә һарауыс йола буйынса туй бүләге итеп бирелгән. Был әйберҙәрҙе кәләш ағы кейәү йортонда оло ҡатын-ҡыҙ туғандарға мал һәм аҡсаға һатҡан. Урал арьяғының көньяҡ-көнсығышында был йола XX быуат дауамында һаҡланып килгән. Туйға күп итеп нағышлы янсыҡ һәм һарауыстар әҙерләнгән. Унда алынған һарауыстарҙы бәхеткә юрап һаҡлағандар, ҡайһы берҙә түшелдерек эшләгәндә тотонғандар. Һарауыстарҙы күлдәк түшенә тегер булғандар, тип хәтерләй ололар.



*Туйҙа күрһәтеү һәм һатыу өсөн эленгән йола бүләктәре - түшелдерек, янсыҡ, һарауыс (БР, Әбйәлил районы, Буранғол ауылы). Автор фотоһы. 1971*

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының кейемендәге семәрҙәр тураһында айырым әйтеп китеү кәрәк. Башҡорт халҡы таралып ултырған ғәйәт ҙур территорияның бөтәһендә лә бер көньяҡ-көнсығыш төбәгендә генә өҫкө кейемде нағышлау ҡабул ителгән булған. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың еләндәре ҡупшы биҙәлгән.



*Ҡатын-ҡыҙҙарҙың нағыш, мәрйен һәм металл биҙәүесле байрам еләне. БХМ. XX быуаттың беренсе яртыһы.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## УЙЛЫҒА - УЙ

**"Каруанһарай" төркөмө егеттәренең электән үк йырлаған бер йыры йыш ҡына ҡолағымда сыңлай: "Ҡайҙа һеҙ, ҡайҙа һеҙ, һай, башҡорт егеттәре? Ҡайҙа һеҙ, ҡайҙа һеҙ, Уралым бөркөттәре?.." Был йырҙың һүҙҙәре лә, көйө лә йөрәктәргә үтеп, милләтен һөйгән күптәрҙе уйға һалырлыҡ! Ҡыҙҙарға ҡарағанда байтаҡҡа күберәк тыуып та, утыҙ-ҡырҡ йәштәрҙән һуң әҙәйә башлап, инде илле-алтмышҡа яҡынайғанда ике тапҡырға тиерлек кәмегән көслө зат хаҡында һүҙем.**

# ҠАЙҘА ҺЕҘ, МАЛАЙҘАР?

## йәки Ир-егеттең эскелек ҡорбаны булғаны тураһында



Элегерәк, беҙ йәш саҡта, илдә ираттың сағыштырмаса әҙерәк булыуын үткән ҙур һуғыш менән бәйләйҙәр ине. Донъя күләмендә унда-бында булып торған бер аҙ локаль конфликттарҙы иҫәпкә алмағанда, етмеш биш йыл элек үтеп киткән Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ир-аттарҙы "алып китерлек" әллә ни оло яуҙар ҙа булғаны юҡ, Аллаға шөкөр. Әммә... ирҙәр һаман күпләп кәмей бара. Ошо хаҡта йыш ҡына уйланып, уйҙарымды ҡағыҙға төшөргөләйем. Мәктәптә бергә тамамлаған синыфташтарымды ғына барлайым да, ана шул миҫалда башҡалар хаҡында фекер йөрөтәм. Ысынлап та, уйынмы ни! Беҙ, егермегә яҡын малай, уныңсы синыфты тамамлап, ҡулыбыҙға өлгөргәнлек аттестаты алып (ҡыҙҙарҙы әлегә һанамайым) сыҡҡайныҡ. Һәммәләребеҙҙең шат йөҙө әле булһа күҙ алдымда. Һәр кемебеҙҙең килә-сәккә ҙур өмөтө, ниәте бар ине. Барыбыҙ ҙа матур тормош ҡороп йәшәргә хыялландыҡ. Кемебеҙҙәр артабан юғары, урта уҡыу йорттарына ынтылды, икенселәребеҙ халыҡ хужалығына эшкә төштө. Мәле еткәс, илебеҙ ҡуйған бурысты - хәрби хеҙмәтебеҙҙе үтәп, имен-һау тыуған яғыбыҙға әйләнеп ҡайттыҡ. Мәктәпте тамамлауға егерме йыл тулғас, синыфташтар менән тәүге мәртәбә осрашыу кисәһе үткәргәнебеҙ хәтеремдә. Малайҙарыбыҙҙың өсөүһе юҡ ине инде. Күмәкләшеп уларҙы йәлләп иҫкә алдыҡ...

Бөгөн килеп, егеттәребеҙҙең алтыһы ғына иҫән! Һуғышта ла кеше улай ҡырылмайҙыр. Бала-сағаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең нисек үҫкәнен дә күрә алмай яҡты донъя менән хушлашҡан синыфташтарымды йәлләйем. Ҡасандыр типһә тимер өҙөрҙәй булған, арыҫландай егеттәребеҙҙең, сирләп вафат булған бер-икеүһен генә иҫәпкә алмағанда, күпселектең "йәшел йылан" арҡаһында китеүе айырыуса үкенесле. Хәмергә битараф булмаған, хатта бер аҙ ваҡыттан уның "коло" булып киткән егеттәребеҙ насар инеме һуң? Юҡ, әлбиттә! Барыһы ла эшһөйәр, яҡшы күңелле, аҡыллы малайҙар ине. Быны шул шайтан эсемлегенә ҡарата "мөхәббәт тойғоһо" ҡайһы арала күңелдәргә инеп оялаған һуң? Ошо һорауға яуапты һәр кемебеҙ белә торғандыр, моғайын, әммә хәҡиҡәтте таныҡлары килмәүселәр күберәк. Яуап эҙләп, әллә ҡайҙа барыһы юҡ. Эскелек арҡаһында ирҙәре күпләп үлмәгән берәй ауылыбыҙ бармы һуң хәҙер? Берәй танышыбыҙҙы, йә туғаныбыҙҙы ғына миҫал итеп килтерәйек әле: мәҫәлән, бер ғаиләлә бер ир эскелек арҡаһында үҙенә-үҙе ҡул һала. Уны "Яҡшы кеше ине..." тип йәлләй-йәлләй ерләйҙәр. Әммә шул көндә үк, йыназа уҡыған мулла, күршекүләндәр таралышып бөткәс, мәрхүмдең ағай-энеһе "ҡайғыһын йыуа" башлай - шул уҡ хәмер менән... Яратҡан, яҡын туғанының яҡты донъянан китеүенә төп сәбәпсе булған араҡы менән! Етмәһә, мәрхүмдең үлемендә башҡа сәбәптәрҙе эҙләргә тотоналар: йәнәһе, килен насар булған, "баш төҙәтергә" аҡса бирмәгән. Йәнәһе, йәндәй күреп йөрөгән Фәлән дуҫы уға "шулай-шулай" тип әйтеп гәрләндергән. Йәнәһе, эштәге нәшәлниге насар булған, ныҡ итеп әрләгән...

...Эскегә бирелгәндәрҙең тормош юлын яҡынса күҙҙән үткәрәйек әле. Бала тыуғас та күп ғаиләлә мотлаҡ иҫерткес эсемлектәр менән "тәпәй" йыуалар. Артабан был бала һәр бер байрамда, тыуған көндәрҙә йыйылып, табын ҡороп, өлкәндәрҙең рюмка сәкәштереүен күреп үҫә. Күреү генә түгел, хатта ул был шөғөлгә ҡыҙыға башлай. Нисек ҡыҙыҡмаҫһың: атайға ла, әсәйгә лә күңелле, улар көлә-шаяра, йырлай, бейей. Уларға ҡунаҡҡа килгән Фәлән ағай менән Фәләнбикә апайҙарға ла күңелле. Тимәк, бөтә кеше шулай йәшәргә тейеш, тик тағы бер аҙ ғына үҫәһе бар... Оҙаҡламай мәктәп йылдары үтеп, сығарылыш кисәһе лә етә. Был кисәнән һуң атай-әсәй балаһының иҫән-имен мәктәп тамамлауы, уҙаллы тормошҡа аяҡ баҫыуы хөрмәтенә тағы табын ҡора. Инде "үҫеп еткән" улдарына үҙҙәре үк "тылсымлы" шыйыҡсаны ҡойоп бирә. Егет, бер аҙ тартынған булып тора ла, төп ҡутәрә һуғып ебәрә. Сөнки был уның тәүге рюмкаһы түгел... Атай-әсәйҙең өлгөһөндә ул һигеҙенсе синыф тирәләрендә үк иптәштәре менән был эсемлекте татып ҡараған була. Ә әлегеһе уға ата-әсәһе тарафынан бирелгән рәсми рөхсәт... Шундай уҡ эске табындары ҡороп, "аҡ юл" теләп, баланы әрме сафына оҙаталар. Әрмелә хәмерҙән ял итеп, бер ҡарауҙа ҡыҙҙарҙың йөрөгән яуларҙы, кемдер әйтмешләй, "ыҙдарауай һалдат" булып ҡабаттан өйөнә ҡайтып төшә егетебеҙ. Уның уйында хәмер эсеү теләге, бәлки, бөтөнләй булмайҙыр ҙа. Әммә, оло үкенескә, уны өйҙә тағы ла шайтан эсемлеге ҡуйылған табын менән көтөп торалар...

Бер аҙҙан ҡайҙалыр эш башлап, егетебеҙ өйләнергә йыйына. Туйҙы ла ата-әсә "тейешенсә, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек" итеп үткәрә бит инде. Йәштәр айырым донъя көтә башлай. Инде иргә эйәләшеп өлгөргән "йәшел йылан" матур ғаиләнең йәмен ебәреп, иреш-талаш сәбәпсеһенә әйләнә. Ирҙең йыш ҡына өйгә "ҡырын тейәп" ҡайтыуын хәләл ефете, әлбиттә, өнәп етмәй. Ләкин алкоголизм тип аталған сирҙең ниндәйҙер бер стадияһына инеп алған ир ҡатынының иҫкәрмәләрен ҡабул итмәй. Ғаиләлә ығы-зығы дауам итә. Бер көн килеп, "тәрән бахмур" хәлендәге ирегет уҙ теләге менән яҡты донъяны ташлап китергә ҡарар итә...

Был - бөгөн берәүҙең донъянан тыйыу осрағы. Ә бит алкоголь менән нык ағыуланыу сәбәпле әле яҡты донъяның төмән татып та өлгөрмәгән йәш кешенең йөрәге кинәт кенә эшләүҙән туктап та ҡуя... "Үлеп барам бит, "Скорый" саҡырта һалығыҙ!" - тип яҡындарына тилмерә барып үлеп киткәндәр йәл. "Әсәкәйем, ҡотҡар!.." тип ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра үлә бәгзеләр. "Ошонан тере ҡалһам, башҡаса араҡыны ауыҙыма ла алмаясаҡмын!.." тип анттар биреүселәр хаҡында ла ишеткән бар. Иң үкенеслеһе: күп осраҡта кешене ҡотҡарып ҡалып та булмай, урыҫтар әйтмешләй, инде поезд киткән була... Иң һуңында судмедэксперт булып эшләгән табип был үлемдең сәбәбе хаҡындағы актта "Алкогольная кардиомиопатия" тип аталған диагноз ҡуя. Әлбиттә, аҙаҡтан мәрхүмдең туғандары, яҡындары араһында: "Тиҙ ярҙам" һуңлап килгән, йә иһә "Табип (фельдшер) дөрөҫ ярҙам күрһәтмәгән", тигән имеш-мимештәр йөрөмәй ҡалмай...

"Ни өсөн ир-егет был донъянан иртә китә?" тигән һорауға яуапты бына ҡайҙан эҙләргә кәрәк. Уның тамырынан. Илебеҙҙә, күпселек ғаиләлә "норма"ға һаналған хәмер эсеү тигән алама ғәҙәтте ҡуймай, йәғни эскелектең тамырын бөтөнләйгә ҡоротмай тороп, ир-егеттәребеҙҙең иртә үлемен кәметеп тә булмаҫтыр. Ә хәҙер модаға инеп киткән "мәҙәни эсеү" тигән термин - ул мәкерле шайтандың әҙәм балаһын хәйләләп кенә юлдан яҙҙырыуының сираттағы бер ысулы. Ир-егеттәребеҙҙе эскелектән азат итә алмаһаҡ, милләт имгенлеге хаҡында ла ныҡ хәүефләнергә урын бар, йәмәғәт. Шуға ла хөрмәтле ата-әсәләргә: "Киләсәктә балаларығыҙҙың хәмер арҡаһында харап булыуын теләмәһәгеҙ, хәҙерҙән үк үҙегеҙҙе тәрбиәләй башлағыҙ. Ҙур ҡунаҡмы, туй-муймы ул, мәжлес өҫтәлдәрегеҙҙән хәмерҙе бөтөнләйгә юҡ итегеҙ! Сабый бала ундай нәмәне күреп үҫергә тейеш түгел", - тип әйтәйем тигәйнем...

**Хөрмәт ҠЫУАНДЫҠОВ.**

✓ *"Мөйтән бейҙең атаһы Тоҡсаба бей булған; телдән телгә тапшырылған боронғо мәғлүмәт уның ҡаңлы ырыуынан булыуын һөйләй. Ҡаңлылар Уғыҙ хан тарихында арба уйлап табыусылар булараҡ танылдылар".*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН СЫҠҠАН ҮҪӘРГӘНДӘР БЕҘ!

Боронғо Хорезм тарихын С.П. Толстовтан алдараҡ ғилми яҡтан өйрәнеүсе бөгөн бер сит ил тикшеренеүселәре Хорезм хоронимының (территория атамаһының) килеп сығышын ике һүҙ ҡушылмаһы рәүешендә аңлата: фарсыса Xvar (ҡояш) һәм һинд-европаса zem (ер) һүҙҙәренән "Ҡояш ере" тигәнде белдәргән ул, тип фараз ҡылына. Әммә С.П. Толстов был аңлатманы ҡабул итмәйенсә, башҡасараҡ яңғыраған этимологик ҡарашты нигеҙлерәк, тип иҫәпләй. Унынса, был осраҡта Xurri+zem, йәғни Хурри ере, Хурри иле, тип фаразлау дөрөҫөрәк. Бында хуррит халҡы хаҡында һүҙ бара, уларҙың Митанни тип аталған ҙур дәүләте булған. Совет тарихсыһы Хорезмдың Джетыасар һәм Кердер ҡаласыҡтарына хас археологик мәҙәниәттәрҙең Алғы Азияла табылған ошондай уҡ объекттар менән оҡшашлығы сәбәптәрен ошо ике ареалда йәшәүсе ҡәүемдәр араһында ҡасандыр булған тығыҙ бәйләнештәр менән аңлата. Унан башҡа, Боронғо Хорезм халҡынын билдәле бер өлөшө менән Митанни һәм Урарту батшалыҡтарында йәшәүселәр араһында генетик бәйләнеш булыуын хорезмлыларҙың ошо ерҙәргә сит яҡтарҙан килеүен бәйән иткән легендалар ҙа раҫлай. Мәҫәлән, X быуатта йәшәгән ғәрәп географы Шәмс ад-Дин әл Мөҡәддәси яҙмаларында былай тип әйтелә: "Боронғо замандарҙа Көнсығыш батшаһы үҙенә яҡын булған хеҙмәтселәренән 400 кешегә ныҡ асыуланған, тип һөйләйҙәр, һәм ул уларҙы йәшәгән торлаҡтарынан 100 фарсах алыҫлыҡта булған урынға ебәрергә бойорған, был урын хәҙер Кас ҡалаһы булған ерҙә".

Ошо "Көнсығыш батшаһы" кем булғандыр - Мидия йә иһә Арал диңгеҙе буйындағы ерҙәрҙе буйһондорған Ахеменид Ираны хакимымы, билдәһеҙ. Нисек кенә булмаһын, Хорезм тәү башлап батша Дарий I (б.э. тиклем 522 - 486 йй.) тарафынан яҙҙырылған Бехистун яҙмаһында иҫкә алына. Шул уҡ ваҡытта "тарих атаһы" Геродот Ахеменидтар империяһының Кавказ аръяғындағы территорияһында матиен ҡәбиләһенә ҡараған кешеләр йәшәүен теркәп ҡалдыра. Былары хуррит сығышлы булып, Митанни исемендәге ҡеүәтле держава төҙөй алған (б.э. тиклем XVII - XII бб.)




С.П. Толстов Хорезм менән Митанни дәүләттәре араһындағы бәйләнештәрҙең ниндәй тарихи ерлектә барлыҡҡа килеүен, ошоға бәйле ниндәй ҡәүемдәрҙең ошо тарафтарҙа күсенеп йөрөүен аныҡ рәүештә билдәләп булмай, тип белдерә. Шулай ҙа Хорезмдың иң боронғо замандарынан бирле (шулай уҡ Урта Азия халыҡтары тарихынан) беҙҙең осорға тиклем һаҡланып ҡалған мөйтән (митан) этнонимын шул дәүерҙең бер ярсығы рәүешендә ҡабул итергә кәрәктер. Мөйтән исемле ырыуҙар ҡарағалпаҡтарҙа һәм Арал һәм Зеравшан үзбәктәрендә лә бар, шулай уҡ митан һүҙе ингән топонимдар ҙа байтаҡ унда. Урта быуат ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтарында Үргә Хорезмда Хош-Митан, Ардахошмитан, Мада-Митан тип аталған ерҙәр булһа, Зеравшан йылғаһы үҙәнендә Митан, Актепе-Митан, Урмитан һәм башҡа шундай атамалар йыш осрай. X быуатта йәшәгән Урта Азия тарихсыһы Мөхәмәт Наршахи Рамитан тип аталған ҡаласыҡтың Бохаранан да боронғораҡ булыуы хаҡында яҙа.

1740 йылда ҡарағалпаҡтар йәшәгән ерҙәргә Ырымбур драгун полкы поручигы Д.Гладышев етәкселегендә килгән рус миссияһы уларҙың түбәндә һанап үтелгән ырыуҙарын яҙып алған: китайский (ҡатай), кунрацкий (ҡонғрат), кинягаз-мангоцкий (кенегес-манғыт), кипчацкий (ҡыпсаҡ),усюнский (уйсын/уйшин), джабинский (джабы), киятский (кият), митонский (митан/мөйтән).

Икенсе бер тикшеренеүсе В.А. Шишкин Бохара һәм Урта Азияла киң таралған "митан" топонимын фарсы сығышлы, тип иҫәпләп, уның йәшәгән урын, йорт, фамилия мәғәнәләрендәге фарсы һүҙе мейханға тура килеүен фаразлай. Әммә Л.С. Толстова боронғо матиен һүҙенә тура килгән Мутиян (Хорезмда, Хазараспҡа яҡын ерҙәге ауыл исеме) һәм Мотиян (үзбәктәрҙә митан/мөйтән этнонимының бер варианты) атамаларын да үҙ фекеренә дәлил итеп килтерә. VII быуаттағы "Әрмән Географияһында" чечендар ҙа "нахча-матьян", тип атала, ә чечендарҙың үҙ атамалары - "нохчо". Күрәһең, чечендар составына ла ҡасандыр боронғо матиен/мутиян сығышлы ҡәүемдәр ингән булғандыр. Тарихсы Л.С. Толстов үҙе ошо боронғо этнонимдың фонетик яҡтан үҙгәрешен ошолай итеп күрһәтә: митанни - матиен - митан/мөйтән/мотиян/мутиян.

В.В. Вәлиханов Бохара әмирлегендәге үзбәктәр араһында митан ҡәбиләһе, ә Көмөш тип аталған урында мөйтән ырыуы булыуын теркәп ҡалдырған. Әммә XVI быуатта Көнбайыш Себерҙән күсеп китеп, Мөхәммәт Шейбани хан етәкселегендә Урта Азияны яулап алған үзбәктәр составында митан/мөйтән ҡәбиләһе иҫкә алынмай. Тимәк, Дәште Ҡыпсаҡтың күсмә үзбәктәре составында мөйтәндәр баштан уҡ булмаған, күрәһең, улар үзбәктәргә XVI быуаттан һуңыраҡ ҡушылып киткән. Ә митан/ мөйтәндәр Урта Азияла бер тарафтарға төрки ҡәүемдәре килгәнгәсә үк йәшәгән.

Тикшеренеүсе Т.А. Жданко мөйтәндәрҙең боронғо бер риүәйәтен яҙып алған: "Мөйтәндәрҙең генеалогик ғөрөф-ғәҙәттәрендә фантастика күп урын биләй. Уларҙың легендаларында ошо ҡәбилә башлығының ер сигенә - ике бөрөй ҡыҙы батшалығына сәйәхәт ҡылыуы хаҡында бәйән ителә. Бөрөй ҡыҙҙарҙың береһе мөслимә, икенсеһе кафыр була. Мөйтән кафыр бөрөйгә ҡаршы көрәшкән мөслимә бөрөйгә ярҙам итә, гүзәл бөрөй ҡыҙы дошманын еңгәс, Мөйтәнде ошо хеҙмәте өсөн үҙ биләмәләрендә йәшәргә ҡалдыра. Мөйтән мәктәптә балалар уҡыта, ә тыуған иленә ҡайтып китергә теләгәс, бөрөй ҡыҙы ултырып кире ҡайтыр өсөн уға болот бирә лә, күктән ергә ҡарарға ярамағанлығы хаҡында иҫкәртә. Әммә Мөйтән уның һүҙен тотмай, түбәнгә ҡарай ҙа, ергә йығылып төшә. Ул үтеп сыҡҡыһыҙ урманда йәшәргә мәжбүр булып, ҡырағай кешегә әүерелә, бөтөн тәнен йөн ҡаплай. Мөйтәндең исеме лә шунан килеп сыҡҡан икән, тип һөйләйҙәр - фарсы телендә "мөй" һүҙе йөндө аңлатҡас, ул "йөнлө тән" тигәнде белдерә икән". Ә бына үҫәргәндәрҙә быныҡ тап киреһе килеп сыға икән. Уларса, "мөй" һүҙе "шыма" мәғәнәһенән белдергәс, Мөйтән - "шыма тәнле" булып сыға. Үҫәргәндәрҙең шиғри шәжәрәһендә иһә "мейтан" варианты теркәлгән. Башҡорттарҙың урта быуаттарға ҡараған "Ҡысса-и Сыңғыҙ хан" әҫәрендә Мөйтән бейҙең исеме башланғыс вариантында - Мутиан бей, тип бирелә. Нисек кенә булмаһын, боронғо митан/мутиян атамаһы башҡорттарҙа мөйтән формаһында ҡулланыла башлай.

Үҫәргән ырыуының килеп сығышында, мөйтәндәрҙән башҡа урта быуат ҡаңлыларының, хатта ҡытай сығанаҡтарында иҫкә алынған кангюйҙарҙың да тарихи эҙҙәре булыуы ысынбарлыҡҡа тап килә. XIX быуатта тыуған яҡты өйрәнеүсе булып танылған Юлбарыҫ Бикбов үҫәргәндәрҙең боронғо риүәйәттәрен яҙып алған. "Мөйтән бейҙең атаһы Тоҡсаба бей булған; телдән телгә тапшырылған боронғо мәғлүмәт уның ҡаңлы ырыуынан булыуын һөйләй. Ҡаңлылар төрки ҡәүеменең айырым тармағынан булдылар һәм Уғыҙ хан тарихында арба уйлап табыусылар булараҡ танылдылар", - тип яҙып ҡалдырған ошо уҡымышлы зат. Күрәһең, ошондайыраҡ мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, билдәле тюрколог Ә.-З. Вәлиди Туған да шундай һығымтаға килә: "... бөгөн башҡорттарҙың иң күп һанлылары булып ҡыпсаҡтар һәм сығыштары буйынса ҡаңлыларҙан булған үҫәргәндәр иҫәпләнә".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

**17 февраль.** Миңә яңы ат бирҙеләр. Һары юрға, һомғол һынлы, етеҙ, уйнаҡлап тора. Тик башы ҡаты. Ҡайһы саҡта буй бирмәҫкә итә. Үҙе ҡайҙалыр өйрәтелгән - Ейәнсура районының Һаҡмармы, Инәкме совхозынан бугай. Исемен "Уҡ" тип атаныҡ. Коновод Сәлим Мөхәмәтйәнов уның һөнәрҙәрен күрһәтте. Ҡыҙыҡ инде: "Ят!" - тиһәң, ята, "Тор!" - тиһәң, тора... "Әйҙә, һынатма, - ти уға Сәлим, - башҡорт толпары! Париж урамы таштарында ут сәсрәтеп оскан оло быуындарығыҙҙың данын арттырыу бына һеҙҙең өлөшкә төшһөн әйҙә!

**19 февраль.** ...Ятаҡтарҙың береһендә дежурный итеп ҡалдырылған бер һалдат менән һөйләшеп киттек. Оло ғына. Кәшәф Шәрифуллин икән ул. Күпте кисергән, ут-һыуҙар үткән. 1900 йылғы. Туймазы яғынан. Граждандар һуғышында актив ҡатнашҡан. Врангелде ҡыйратыштым, ти. 1919 йылда Бәләбәйҙә ойошторолған татар-башҡорт бригадаһында булған. Сая рухлы күренә. Байтаҡ интервенттарҙың, аҡ бандаларҙың башын ҡыйған. Башҡорт ғәскәрҙәре сафында Петроградты яҡлауҙа ла ҡатнашҡан. "Унда беҙ Юденич эттәренең көлөн күккә осорҙоҡ!" - ти. Аҙаҡ янып йөрөп колхоз төҙөшкән, уны ныҒытыу юлында ла күп көс һалған.

- Колхоздар күтәрелеп, ил-көн нығынып, матурланып киткәйне лә бит, ти ул уфтанып, - бына фашист аяҡ салды. Ләкин бирешмәбеҙ. Иҙмәйен иҙербеҙ беҙ ул фашист эттәрҙең! - тине ул ярһып.

**22 март.** Дивизия тарихында был бик хәтирәле, гүзәл көндәрҙең береһе булып ҡалыр.

Дивизия һәр яҡтан тиерлек фронтҡа инергә әҙер. Полктар, дивизион һәм башҡа төркөмдәр штат буйынса тулы, формалашып бөткән. Һәр офицер, сержант һәм һалдат үҙ урынында, үҙ бурыстарын һәм вазифаларын яҡшы белә. Һәр эскадрон һәм дивизионда партия ойошмалары төҙәлдә. Ойошторолоу осоронда йөҙәрләгән һалдат, офицерҙар партия сафына алынды.

Күптән түгел Дәүләт Оборона Комитеты ағзаһы К.Е. Ворошилов етәкселегендәге комиссия ла дивизияның фронтҡа китергә әҙер икәнлеген раҫланы.

"Дивизия һәр яҡтан тиерлек әҙер", - тинем. "Тиерлек" тигәнем ҡорал ғына алынмағанды аңлата.

Бөгөн дивизияға Башҡортостан хөкүмәтенең байрағы һәм халыҡтың наказы тапшырыла.

Сәғәт иртәнге унда бөтә дивизия штаб алдына килеп тупланды.

Ойошҡанлыҡ, йыйнаҡлыҡ һәм тәртиплелек яғынан йөҙ ҡыҙартырлыҡ түгел ине. Һалдаттарҙың рухы күтәренке, кейемдәре ыҡсым; йырлайҙар, матур атлайҙар; алғы сафтарҙа ҡурайсылар, гармунсылар командаһы. Бейеүҙәр башланды.

Бер аҙҙан дивизияға сафҡа баҫырға команда бирелде. Сәғәт ун берҙә алдан әҙерләнгән урынға Башҡортостан Верховный Советы Президиумы Председателе Р.К. Ибраһимов һәм хөкүмәттең, партия өлкә комитетының бер нисә ағзаһы баҫты. Улар араһында партия өлкә комитетының секретарҙары Н.Д. Буренкин, Ә.Н. Усманов, БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателенең урынбаҫары А.Н. Маслин, Госплан председателе Ғ.В. Нигмәтйәнов, өлкә комитеттың хәрби бүлеге мөдире Мензелинцев һәм башҡалар бар ине.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡыҙҙар, үҙегеҙгә бер аҙ ситтән ҡарағыҙ: нишләп был саҡлы сыбар тауыҡҡа әйләндегеҙ ул, тиәһе килә. Ҡыҙғаныс һәм ҡурҡыныс бит ҡайһы берәүҙең "яңыртылған этнографик кейеме"!*



# ӨС ТАҒАНҒА

## тарихи дөрөҫлөк, художестволы зауыҡ

**Роза Рафиҡ ҡыҙы менән беҙ әленән-әле осрашып, һөйләшеп торабыҙ. Ул үҙе ғүмере буйы башҡорт милли кейеме өҫтөндә эшләгән билдәле рәссам. Сигеү һәм нағыш буйынса махсус Мәскәү художество училищеһы һәм институтында белем алған Роза Юлдашбаева бик күп йылдар Өфөлә "Дом моделей", "Ағиҙел" производство берекмәһе һәм "Салауат" күн-тире кейемдәр ательеһында баш рәссам хеҙмәтен атҡара. Ул ижад иткән кейем үрнәктәре Бөтә Союз, Бөтә Рәсәй халыҡ-ара кейем конкурстарында һәр ваҡыт еңеүсе була, гран-при һәм беренсе дәрәжә дипломдарҙы ала. Уның эшкә талапсанлығы һәм таланты хаҡында Башҡортостан Милли музейы фондына алынған, М. Нестеров исемендәге Художество музейында ҡуйылған күп эштәре асыҡ һөйләй, ул - башҡорт кейеме оҫталары араһында легендар шәхес. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо берҙән-бер оло мастерыбыҙ республиканың Рәссамдар союзы ағзаһы түгел, дәүләт тарафынан бирелгән атҡаҙанған исемдәре лә юҡ. Әммә ул бихисап төрлө яҡлы эшмәкәрлеге менән һаман да бөтә булған милли кейем күргәҙмәләре, фольколориадаға ҡарата яңы кейем моделдәре әҙерләү буйынса мәҙәни эштең уртаһында, төп баһаман һәм остаз булып ҡала. Балаҡатай районының "Тамбур" халыҡ клубы ҡайыусы оҫталары менән ул уникаль заманса башҡорт стилле кейемдәр ижад итә.**

**Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева менән башҡорт милли кейеменең сәнғәттә, көнкүрештә нисек йәшәүен, тергеҙелеүен, өйрәнелеүен күҙәтеү - үҙе бер мәктәп. Уҙған йыл аҙағында булғайны был әңгәмәбеҙ:**

"Сибай дәүләт концерт берләшмәһенең - "Сулпан" балалар театры менән филармонияһының "Аҫаба булған ата-бабам, аҫаба булыр балам!" тигән театрлаштырылған сығышы Өфө тамашаһына "Башҡортостан" дәүләт концерт залында күрһәтелде. Реклама арыу ғына йәнле барһа ла, залда буш урындар күп ине, бының өсөн баш ҡалала йәшәгән баймаҡтарҙы һис кенә лә маҡтап булмай - яҡташтарын күрергә ваҡыт табырға улар үҙҙәренең хаҡҡый бурыслы икәнен онотто! Ә мин кисәне ҡарағандан һуң әллә күпме онота алмай, төрлө уйға батып йөрөйөм. Һәм бына ни өсөн...

Мине ғәжәп иткәне - кейемдәре! Кем икән ул театрҙың рәссамы, кем шундай зауыҡлы художник, тип уйланым. Белдем: Роза Әхмәтшина икән. Бик оҡшаны. Беренсенән, кейемдәр өсөн һайланған тауарҙың төҫө килешле, был төҫ тау, далалар, болотло күктәр - иркенлек, ирек, йәшәү азатлығы төҫө. Минеңсә, башҡорт аҫабаһы рухын киңәйтә торған тәбиғи ябай һәм мәңгелек ныҡлы төҫ табылған. Икенсенән, кейемдәрҙә бер ниндәй ҙә тире-йөн юҡ! Башҡорттоң ҡышҡы туны-бүрке тиренән тегелһә лә, төп кейеме, әлбиттә, башлыса еңел туҡыманан, тула йәки киндерҙән тегелгән булған, шунһыҙ, тәбиғәттә иркенләп йөрөй аламы ни кеше? Өсөнсөнән, ҡатын-ҡыҙҙар кейемендәге таҫтар бик дөрөҫ алынған. Улар арҡаға төшөп айырылып китә, шунда орнаменталь биҙәк - нағыш та эшләнһә, ифрат күркәм булыр ине. Йырсыларҙың кейеме лә йыйнаҡ ҡына, төҫтәре күҙҙе тишеп бармай, биҙәкләү ҙә самалы, иң кәрәкле һәм мөһим биҙәктәр - тоноҡ төҫтәге ырыу тамғалары ғына беленер-беленмәҫ һиҙелә... Ҡарауы рәхәт бындай ир-егеттәр кейеменә, сөнки был сәхнә кейеме актер булған кешенең шәхесен ҡапламай, уның халыҡҡа әйтәһе һүҙен, еткерәһе уй-моңон үтә ҡырҡыу, йәғни ситей сағыу буяуҙар-һыҙыҡтар менән бутамай.

Бер нисә көндән кисәне Башҡортостан юлдаш телевидениеһы аша йәнә ултырып ҡараным. Һеҙ ҙә ҡарағыҙ, өйрәнегеҙ, йәштәр. Башҡорт милли кейемен үтә сыбарламағыҙ. Юғиһә, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тапшырыуына килгән һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙын бик аҡыллы, бик инсафлы тип хөрмәт итәм, тыңлап туймайым, ләкин ҡайһыларының, бигерәк тә ауылдарҙан килгән оло йәштәге апайҙарҙың, "тергеҙелгән" тип кейеп алған кейемен күрәм дә, "Ташҡа үлсәйем!.." тип әйтеп ысҡындырам. Ҡыҙҙар, үҙегеҙгә бер аҙ ситтән ҡарағыҙ: нишләп был саҡлы сыбар тауыҡҡа әйләндегеҙ ул, тиәһе килә. Ҡыҙғаныс һәм ҡурҡыныс бит ҡайһы берәүҙең "яңыртылған этнографик кейеме"! Ниңә кеше көлдөрәһегеҙ, әллә бөгөн халыҡтың төҫ, биҙәү зауҡы үҙгәргән, тиһегеҙме? Бер нәмә лә үҙгәрмәгән, кеше психологияһы һәм зауҡы бер ҡасан да үҙгәрмәй. Милли кейем кейгәндә милләттең эске фәлсәфәһе, тәртибе, холоҡ-фиғеле, донъяны художестволы, сәнғәти ҡабул итеү үҙенсәлеге сағыла! Африка саваннаһында тауис йә йыланды һүрәтләгән сағыу төҫтәргә буянған (улары ла йә кәләш күҙләгән кейәүҙәр йәки ажарлы һунарсылар!) аборигендар түгел бит беҙ. Башҡорттар һәр эштә һәм биҙәктә сама белгән. Шул арҡала һәр кемде һоҡландырған, иҫендә ҡалған, күпте күргән рус ғалимдары һәм сәйәхәтселәре "Бөтә төрки халыҡтар араһында иң бай, иң төрлө һәм иң мәғәнәлеһе - башҡорт халыҡ кейемдәре" (С.Руденко) тигән! Бер ҙә "иң сағыуы, иң ялтырап торғаны..." тимәгән улар.

Башҡортостан юлдаш телевидениеһы көн-төн һөйләп тора, уныһына Аллаға шөкөр. Мин "Байыҡ" тапшырыуын да гел ҡарайым. Абруйлы баһамандар бик төплө кәңәштәрен бирә, бейемәгән кеше бейеү сәнғәтен аңлап, тимәк, яратып (!) китә. Үҙе бер халыҡ мәктәбе, мәҙәниәт һабаҡтары, рәхмәт! Әммә ләкин шул баһалама төркөмө араһында кейемдәр буйынса махсус баһа ҡуйырлыҡ белгестәр ҙә ултырһын ине. Яҡшыһын яҡшы, тип, боҙолған кейемде шулай уҡ тәнҡитләп, ваҡытында кешенең күҙен асып ултырыусы кәрәк. Юғиһә, "милли кейемде тергеҙеү" тигән боҙ ҡуҙғалды. Һуң булмаҫ борон, әллә күпме "яр емереп, күпер ағыҙып" китмәҫ борон, уға дөрөҫ йүнәлеш, фәнни руль, тарихи йөк-бәҫ бирергә ваҡыт. Алға, милли сәнғәттә белемле йәштәр!"

**Роза Рафиҡ ҡыҙы менән һөйләшеү 2020 йыл башында дауам итте. Фольклориада йылында башҡорт милли кейемен әҙерләү, тергеҙеү, өйрәнеү темаһы айырыуса ҡырҡыуланыуы тураһында һөйләштек был юлы ла:**

"Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ ижады үҙәгенә ҡараған "Урал" галереяһында күптән көтөлгән күргәҙмә асылды. Башҡорт милли биҙәүестәренең иң күренеклеһе - селтәр, яға, һаҡал, түшелдерек, хәситә, дәүәт һәм башҡа һирәк осрай торған биҙәүестәргә арналғайны ул. Бындай яуаплы эште республика Халыҡ ижады үҙәгенең "Селтәр" башҡорт халыҡ кейемдәре студияһы үҙ өҫтөнә алған. Етәксеһе Гөлгөнә Баймырҙина үҙәктең фольклор бүлегендә әйҙәүсе белгес булараҡ, махсус программа буйынса эш алып бара. Йәғни, ул бөтә республика буйынса йөрөп, селтәр яһау серҙәрен-үҙенсәлектәрен оҫталарҙан өйрәнә һәм теләгәндәргә үҙе лә өйрәтә. Был хәрәкәт һуңғы осорҙа айырыуса йәнләнде, ҡатмарланды һәм хатта ауырлашты...

Ни өсөн милли кейемде һәм биҙәүесте тергеҙеү еңелдән түгел? Сөнки был эштең уйын түгеллеге, ифрат яуаплы һәм әһәмиәтле икәне һәр табылған экспонат, һәр фотодокумент, һәр яңы оҫтаның эше аша күренеп тора. Биш йылдан ашыу баш ҡалабыҙҙың ҡул эше оҫталары - "Селтәр" студияһы эшләне, ләкин әле эштең башы саҡ беленә. Сөнки милли башҡорт биҙәүесе уйынсыҡ түгел. Ул иң беренсе сиратта - тарихи дөрөҫлөк, зауыҡ һәм сама. Ошо өс таған бөтә кешегә лә аңлашылып етмәй һәм тиҙ генә сиселмәй торған бер сер икән.

Һәм тағы... Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһының төп ҡағиҙәләре менән дә танышмын: башҡорт ағинәйҙәренең аҡылы менән йәшәргә ынтылған һәр ҡатын-ҡыҙ, беренсенән, айыҡ һәм аңлы тормош алып барыр; икенсенән, ул милли ризыҡ, милли дауалау саралары менән үҙенең һәм яҡындарының сәләмәтлеген нығытыр; өсөнсөнән, тормошобоҙға милли йолаларҙың асылын ҡайтарыр; дүртенсенән, ул халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе алымдарын аяҡҡа баҫтырыр; бишенсенән, ул милли кейемле, тимәк, милли ҡул эшле булыр; алтынсынан... Һанай китһәң, күп уларҙың үҙ елкәһенә алған бурыстары. Әммә иң мөһимдәренең береһе, әлбиттә, милли кейемдәр буйынса әле алып барған Хаталар өҫтөндә эш...

Милли кейемдәрҙе тергеҙеүҙә ағинәйҙәр бөтә республиканы һәм унан ситтә ятҡан ҡәрҙәштәребеҙҙе лә ҡуҙғатты.



*Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары кейеме.*



*Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары кейеме.*



*Көньяҡ-көнбайыш (Дим) башҡорттары кейеме.*



*Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейеме.*

***✓ Миҫал өсөн Учалының көмөш биҙәүестәр оҫталарын әйтер инем. Уларҙың "башҡорт биҙәүесе" тигәне бөтә эшләнеше, пропорциялары, биҙәлеш таштары һ.б. менән зауыҡлы, сама менән һәм тарихи дөрөҫлөккә бик яҡын.***

# ТАЯН:

## һәм сама белеү

Һандыҡ төптәрендә йә иҫке альбомдарҙа ятҡан үрнәктәр ҡалҡып сыҡты, илгә таралды. Ғалимдар һәм этнографтар өсөн әҙер материал тулып ята кеүек. Ләкин... Эш һирәк осрай торған биҙәүестәр һәм кейемдәр табылыуҙа ғына түгел икән. Эш - беҙҙең башҡорт халыҡ биҙәүес-кейемдәрен тәфсирләп өйрәнеп, үҙенсәлектәрен донъя кимәленә сығарған ғалимдар һүҙендә! Ҡырҡ ырыулы башҡорт халыҡ этнографик хазинаһын фәнни системаға һалып өйрәнгән, уның музейҙарҙы һәм ҙур каталогтарҙы биләгән өлгөләрен һайлаған ғалимдар һәм милли сәнғәт белгестәре тап юғарыла һанап үтелгән өс тағанға таяна, өс талап буйынса барлай: тарихи дөрөҫлөк, художестволы зауыҡ һәм сама белеү. Шуға ла ағинәйҙәрҙең хаталар өҫтөндә эшкә тотоноуы бик кәрәкле, бик мөһим эш. Беҙ киләһе быуындарға бөгөнгө стилләштерелгән селтәр, яғаларҙы түгел, ә төп нөсхәһендә тапшырырға бурыслыбыҙ..."

**Ниндәй фекерҙә һуң беҙҙең абруйлы оҫта, башҡорт кейеме белгесе бөгөнгө милли кейем һәм биҙәүестәрҙе тергеҙеү эше хаҡында? Уның һәр фекере ихлас йөрәктән, дөйөм эш өсөн янып, проблемаларҙы үтә күреп, һәр кемде яҡшыға өйрәтеп һәм оҫталыҡ юлында хаталарҙы тиҙерәк йырып сығырға әйҙәп әйтелә, тип иҫәпләйем. Аңлағандарға - ишара, аңламағандарға - күҙең асыусы бер фәһем:**

"Маҡтанырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Бөтә тирә-яҡ республикалар араһында беҙ милли кейемдә тергеҙеүҙә иң артта ҡалған төбәк инек, һаман да шул кимәлдә ҡалабыҙ. Ниндәй генә вәғәҙәләр һәм шапырыныуҙар булмаһын, барыһы да нигеҙһеҙ, сөнки традицияны ҡабул итеү юҡ. Бөгөн башҡорт милли кейеме буйынса эшләгән оҫталар тураһында айырым шуны әйтәм: иң яҡшы эштәр Амантаевта, Кирдякинда. Ҡуптәр зауыҡһыҙ, ҡуптәр сама белмәй, бөтәһе лә тиерлек тарихи дөрөҫлөктө һанға һуҡмай. Башҡорт милли кейеме ҡайһы бер урында наҙандар һәм нахалдар ҡулына ҡалып бара. Йылғырлыҡ, башбаштаҡлыҡ, "минбеләм"дәр менән быйылғы Фольклориадаға килеп еттек, һәм кәмәбеҙ менән ҡомға төртөлдөк. Беҙҙең кешегә күрһәтер нәмәбеҙ юҡ тиерлек. Районҙарҙа үҙаллы ниҙер эшләгән кешеләр бар, ләкин мин уларға рәхмәт әйтеү урынына, үкенесемде белдерер инем. Нишләп үҙҙәренең өйрәнсек эштәрен ысын милли биҙәүес тип иғлан итергә ҡабалана улар? Кем уларҙы былдай ялған данға этәрә? Кем уларҙың телдәренән тартып, "башҡорт милли биҙәүесен яһаным", тип маҡтандыра, күрәләтә насар сифатлы ярты-йорто эштәрен уникаль боронголоҡ араһына килтереп ҡыҫылдыра?

"Селтәр" күргәҙмәһен ҡарағандар минең менән риза булыр: бөтә эштәр ҙә бер кимәлдә, барыһы ла өйрәнсектәрҙеке. Өйрәнсек булыу хилаф түгел, ләкин күргәҙмәлә уларға һан-дәрәжә башҡаса булһын. Әйтәм бит, үткер һәм сая кешеләр арҡаһында ошондай өйрәнсек нәмәләр хәҙер бөтә донъяны ҡаплап бара. Уларҙа дөрөҫлөк юҡ, зауыҡ (художестволы теүәллек) юҡ, сама белеү юҡ! Мин түшелдеректәр күргәҙмәһенә, исмаһам, өлгө булып торһон өсөн, сағыштырыр өсөн, мәҫәлән, Кирдякиндың художестволы селтәрһаҡалдарын, йә музейҙан, йә иң унышлы мастерҙарҙың эштәрен алып тороп ҡуйыр инем.

Бөтөнләй ыңғай күренештәр юҡмы ни, тигән һорауға яуабымда миҫал өсөн Учалының көмөш биҙәүестәр оҫталарын әйтер инем. Уларҙың "башҡорт биҙәүесе" тигәне бөтә эшләнеше, пропорциялары, биҙәлеш таштары һ.б. менән зауыҡлы, сама менән һәм тарихи дөрөҫлөккә бик яҡын.

Башҡорт биҙәүестәренә хас тәңкәләр һәм көмбәҙҙәр, аҡыҡтар, сулпылыр, гәрәбә, мәрйен, ҡортбаш һәм башҡа нәмәләр бөгөнгө оҫталарҙың әләгә-тәгәрәй эҙләгәне. Дим районындағы Вьетнам магазинында беҙҙең ҡыҙҙарҙы йыш күрәм, улар ҙа мине һәм бер-берейһен танып бөткән. Ләкин улар ҡайсаҡ кәрәкмәгән, яһалма, сифатһыҙ тауарҙар һатып алырға мәжбүр. Шунан уларҙың эшләгән биҙәүестәре нисек дөрөҫ һәм зауыҡлы булһын инде! Тимәк... Тимәк, республиканың Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡ ижады үҙәге башҡорт милли кейемен һәм биҙәүестәрҙе тейешле кимәлдә тергеҙеүҙе үҙ өҫтөнә алып, ошондай кәрәкле тауарҙар менән тәьмин итеүҙе, оҫтаханалар булдырыуҙы, артабан оҫталарҙан дөрөҫ өлгөләр талап итеүҙе кисекмәҫтән үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Милли башҡорт кейеме һәм биҙәүесен тергеҙеүселәр менән бик төплө, иғтибарлы, системалы эш алып барыу шарт. Бөгөн иң етди этнографик һәм милли мәсьәлә был! Хаталарҙы ваҡытында төҙәтергә, уларҙан арындырырға кәрәк. Мин бында тағы бер лайыҡлы юлды күрәм: кисекмәҫтән Башҡортостан Республикаһында Оҫталар мәктәбен (Школа мастеров) булдырыу. Әле республикаға еңел сәнғәтте үҫтереүгә Үҙәктән байтаҡ аҡса бүленгән, тигән хәбәр йөрөй. Өфө уртаһында 10-сы художество лицейы бар, унда бөтә шарттар (цех, машина һ.б.) етерлек. Әйтәйек, Япониядa өйрәнсектәр ун (!) йыл буйы халыҡ орнаменттарын, бөтә донъя халыҡ ижады эштәрен өйрәнә, шунан һуң ғына уларға үҙҙәренең эштәрен кешеләргә күрһәтергә рөхсәт ителә...

Беҙҙең республикала халыҡ оҫталарының эшенә сәнғәт белгестәренең яҡын да килмәүе бик борсой мине. Үҙҙәренең өлгө итеп күрһәтерлек эштәре лә юҡ, исмаһам. Бына ошо "Селтәр" студияһы кеүек тырышып, юҡты бар итеп, милли биҙәүестәрҙе тергеҙергә дәртләнгән кешеләр күбәйгәндән-күбәйә. Уларға дөрөҫ йүнәлеш, дөрөҫ кәңәш кәрәк. Альмира Ғәйнулла ҡыҙы Янбухтина, йәне йәннәттә, бик иғтибарлы булды былдай эштәргә, ул беҙҙең "Ағиҙел" производство берекмәһендә үткән худсоветтарҙа гел ҡатнашты. Уның дөйөм ил сәнғәте, бөтә донъя мәҙәниәте кимәленән сығып анализлауы беҙҙең художник-мастерҙарға бик ярҙам итте. Бөгөн дә ауылдарҙа, ҡалаларҙа ижад иткән рәссамоҫталар өсөн бик мөһим шундай белемдәр менән танышыу, донъя менән бергә тын алыу. Быны эшләргә мөмкин, Мәҙәниәт министрлығының махсус курстар, күргәҙмә-форумдар үткәрергә бөтә шарттары бар, теләк һәм яуаплылыҡ ҡына кәрәк".

**Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева бөгөн башҡорт сигеү сәнғәте буйынса иң тәжрибәле авторҙарҙың береһе. Уның был тәңгәлдәге фекерҙәре лә аныҡ һәм фәһем бирә:**

"Башҡорт сигеүе, нағышы, ҡайыуы һәм башҡа төрлө энәырғаҡ ярҙамында башҡарылған ҡул эштәре төрлө һәм ҡабатланмаҫ үрнәктәр менән бай. Республика Оҫталар мәктәбендә башҡорт халыҡ сигеү өлгөләре буйынса тотош бер курс уҡытырға тейешбеҙ. Ни өсөн тигәндә, был һөнәрҙе рәссамдарға, сигеү оҫталарына ентекләп өйрәтәһе бар: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тамбур менән генә сикмәгән, уны элмә, тиһәләр, йәнә төрҙәре бар: ҡуш элмә, тулы элмә, төҫлө епсүпләм (цветная перевить), ҡыя сәнсеп сигеү (косая стежка), ярым сата (полукрест), шыма сигеү (гладь) һәм башҡалар. Мәҫәлән, элекке һарауыстар һәм таҫтарҙар башлыса ярымсата (полукрест) менән сигелгән..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн Башҡортостандың ҡайһы бер райондарындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмалары ағзалары милли биҙәүестәр һәм кейемдәр буйынса хаталар өҫтөндә эш башланы. Үҙ ағышын эҙләгән шишмә кеүек, ваҡыт ҡатламы аҫтынан тәүбиҙәктәр, милли нағыштар, төҫтәр, биҙәүестәр халыҡҡа яңы заман төҙәтмәләре менән кире ҡайта. Оло быуын үҙ тыуған тамырҙарынан һәм ерҙәренән ситкә китеп төпләнгән балаларына һәм ейәндәренә үҙ биҙәген, тауышын, төҫөн, биҙәктәрен ҡалдырырға теләп, бурыс ауазын яңғырата. Был мәңгелек ағышты туҡтатыр һәм тыйыр көс юҡтыр. Бары тик быуыусылар, боҙоусылар, тауарға әйләндереүселәр бар, улары ла ваҡытлы күренештәр. Ләкин беҙҙең хаталарҙы ишәйтергә, аҙҙырырға, уларға абынырға ваҡытыбыҙ юҡ. Урамда егерме беренсе быуат. Илебеҙҙә һәр милләт, һәр халыҡ үҙ орнаменттары, биҙәктәре, кейеме менән киңәнеп йәшәргә ынтыла. Чебоксары ҡалаһында, мәҫәлән, сыуаш сигеү мәктәбе бик күптән эшләй һәм төбәктәге милли колорит, халыҡсан ижади бәҫ тыуҙырыусы бренд-ҡот дәрәжәһен алған. Мәҙәниәт министрлығы башҡорт милли кейемдәре һәм биҙәүестәрен дә ошондай уҡ бренд-ҡот итеп нығытырға йүнәлеш алһын ине, ти Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева. Уның әсенеп әйткән һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бар. Дошман көлдөрөп, дуҫ илатып әйтә, ти мәҡәл. Милли кейемдәребеҙҙәге хаталарҙы төҙәткән мәлдә һәр фекер кәрәкле һәм ваҡытлы.**

**Сәрүәр СУРИНА.**





*Көнсығыш (Урал аръяғы) башҡорттары кейеме.*



*Урта төбәк башҡорттары кейеме.*



*Һамар-Ырғыҙ башҡорттары кейеме.*

*Һүрәттәр Айгөл Камалиева китабынан алынды.*

КӨЛКӨФӨ

**Ҡасан ағайҙың ысын исеме әллә Хәсән ағай, әллә Әҡсән ағай булды. Бәләкәйҙән ошо исемгә өйрәнгәс, ысын исеме лә онотола төшкән. Әлбиттә, халыҡ уға былдай исемде бушҡа бирмәгән. Эш шунда, ул үҙ хәбәрен һөйләй башлаһа, кемдер уға һорау бирергә мәжбүр була. Бына шул һорауҙарға яуап бирә-бирә һөйләй Ҡасан ағай үҙ хәбәрен. Иң ҡыҙығы шунда: Ҡасан ағай йылап-майлап "Ҡасан?" һорауына алып килеп еткерә. Ошо һорау бирелеү менән ул һорау биреүсене баштан-аяҡ күҙҙән үткәрә (йәнәһе, йәшен самалай) һәм лаҡапҡа әйләнгән һүҙҙәрен әйтеп ҡуя: "Һин иҫләмәйендер ул. Был хәл ҡырҡ (утыҙ биш, утыҙ) йыл элек булғайны. Ул ваҡытта һиңә ни бары өс-дүрт йәш булғандыр". Һорау биреүсе отолғанын шул мәлдә генә аңлап ҡала һәм бер аҙ көрһөнөп ҡуя. Ә башҡа тыңлаусыларға шул ғына кәрәк. Улар, әлбиттә, рәхәтләнеп көлөп ебәрә. Бына хәҙер мин уның ҡапылда ғына иҫкә төшкән ике мәҙәген һөйләйем әле. Ә һеҙ һорауҙар бирмәҫкә (бигерәк тә "Ҡасан?" тигән һорауҙы) тырышып ҡарағыҙ. Ышаныс менән әйтә алам, йәш тыңлаусыларҙың береһе барыбер Ҡасан ағайҙың ошо тоҙағына эләгәсәк. Һөйләү-яҙыуға уңайлы булһын өсөн йәш кешенең исемен Исмәғил тип алайыҡ.**



# ҮӘТ СУРЫТА ҠАСАН АҒАЙ!

### Оят миңә, гәрлек миңә!

Ҡасан ағай моңһоу ғына һөйләй башлай.

- Оят миңә *(апаруҡ өндәшмәй тора)*. Гәрлек миңә *(әсенеп ҡулдарын һелкеп ебәрә)*. Ошо хәл иҫкә төшкән һайын йән көйә *(башын аҫҡа әйеп күҙҙәрен йәшерә)*. Гәрлеге генә ней тора *(ҡулдарын һелкеп ҡуя)*. Ошо хәл иҫкә төштө икән, көнөм көн түгел, ашым аш түгел *(тәрән көрһөнөп ҡуя, ҡыҫҡаһы, унын бар һөйләүе ошондай йүнәлештә бара)*. Нишләп ундай хәлгә төштөм икән мин, тигән уйҙар әҙ килмәй миңә. Мәләндә бит әҙ генә башты эшләтергә була ине. Ғүмерлеккә үкенес булып ҡалды был хәл. Ошо хәл булмаһа, бәлки, тормошом да бөтөнләй икенсе булыр ине. Хәҙер эш үткән, бер нәмәне лә төҙәтеп булмай, ә барыбер йән көйә. Оят инде. Шул хәлгә төшөрмөн тип кем уйлаған. Ваҡыты менән шул хәтлем ҡыйын, хатта, Аллам һаҡлаһын, үлгеләр килеп китә. Ошондай гәрлекте күтәреп һаман нисек тере йөрөйөмдәр, нисек мине ер йотмайҙыр. Шул мәлдә үлгән булһам, бәлки, мең артыҡ булыр ине. Нисәмә йыл инде ошо гәрлек мине эстән кимерә...

Ҡасан ағайҙың бына ошолай һөйләүе оҙаҡ ҡына дауам итеүе бар. Ә нимә булғаны тураһында һорамаһаң, һүҙ "оят миңә, гәрлек миңә, үлһәм, һәйбәтерәк булыр ине" тигәндән ары китмәй. Ә нимә булғанын белге килә бит, әй. Шуға күрә Исмәғил уның ҡора бушлаған тоҙағына эләгә һәм һорай ҡуя.

- Ә нимә булды һуң?

Ҡасан ағай йылмая биреп Исмәғилгә борола төшә, уға ҡарап, тәрән итеп көрһөнә *(әлбиттә, эстән генә ҡыуана)* һәм һүҙен дауам итә:

- Тукманылар мине, Исмәғил ҡустым, тукманылар *(баш әйелә, ҡулдар һәленеп төшә)*. Эт урынына йөрөтөп типкесләнеләр *(тауышы иламһырап сыға)*. Бер ерем имен ҡалманы *(тәнен тотҡолап һыйпаштырып ала)*. Тибәйем микән, әллә һуғайым микән, тип уйлап тора инем былай *(күҙҙәрендә дәртле осҡондар ялтлап ҡала, аҙаҡ көрһөнөп ҡуя)*. Ней тибеп өлгөрөп булманы, ней һуғып өлгөрөп булманы *(ҡулдарын бер-береһенә шапылдатып һуғып ебәрә)*. Үҙемде тәкмәстерә һуҡты ла ҡуйҙылар. Ялп итеп ҡалдым *(ҡулдары осар ҡоштай ялпылдап ала)*. Ырғып торайым микән, әллә тик кенә ятайым микән, тип уйлап ята инем былай *(ике ҡулын бергә ҡуйып, ҡолаҡ тирәһенә тигеҙеп ала)*. Ней тороп булманы, ней тик кенә ятып булманы *(тағы көрһөнөп ҡуя)*. Күмәкләшеп йүгерешеп килделәр ҙә типкесләй ҙә башланылар *(аяҡтары менән ерҙе типкесләп-типкесләп ала)*. Эй, типкесләйҙәр, эй, типкесләйҙәр. Нисек аяҡтары талмағандыр, нисек аяҡтары сыҙағандыр. Типкесләй-типкесләй арып бөттө үҙҙәре *(маңлайындағы тирҙе һөртөп ала)*. Алмашлап типкесләйҙәр, малай. Арығандарын ял иткәндәре алыштырып ҡына тора. Һынмаған ҡабырға ҡалмағандыр, тип уйлағайным, барыбер икәүһе имен ҡалған икән. Врач ағай аҙаҡ үҙе аптырап һөйләп торған...

Был йүнәлештә лә Ҡасан ағайҙың һүҙе оҙаҡҡа һуҙылыуы бар. Үҙең һорамаһаң, һүҙ "тукманылар, типкесләнеләр, арып бөттөләр, врач ағай аптыраған" тигән урында өйөрөлөп йөрөйәсәк. Шуға күрә Исмәғил тағы һорай ҡуя.

- Ә кемдәр тукманы?

Ҡасан ағай башын бер аҙ әйә бирәп *(йәнәһе, ояла)* тауышын саҡ сығарып әйтеп ҡуя:

- Күрше ауыл егеттәре тукманы, Исмәғил ҡустым. Бына шуныһы оят, бына шуныһы гәрлек. Бына хәҙер үҙебеҙҙең ауыл егеттәре алдында оят!

Ошо урында Исмәғил аптырап ҡала. Яңыраҡ ҡына алтмыш йәшен тултырған, нисә балаға олатай булып өлгөргән Ҡасан ағай ҡасан һуғышып йөрөнө икән? Күрше ауыл егеттәре үҙҙәренең атайҙарынан оло кешене нишләп тукманылар икән? Нисек ҡулдары күтәрелде икән? Ҡасан ағайҙың тукмалып ҡайтыуы тураһында ул-был хәбәр ҙә ишетелмәгәйне бит әле. Ауылда бит былдай хәбәр шәп йөрөй. Әллә мин үҙем ишетмәнем микән был хәбәрҙе, тип уйлап ҡуя Исмәғил. Аптырағас, үҙе лә һиҙмәҫтән һорай ҡуя:

- Ә ҡасан тукманылар?

Бына ошо мәлдә Ҡасан ағайҙың йондоҙло сәғәте һуғып ебәрә:

- Һин иҫләмәйендер ул. Был хәл ҡырҡ йыл элек булғайны. Ул ваҡытта һиңә ни бары өс-дүрт йәш булғандыр.

Тыңлаусылар ихлас көлөп ебәрә. Исмәғил үҙенең отолғанын ошо мәлдә генә аңлап ҡала һәм көрһөнөп ҡуя. Нишләһен, башҡаларға эйәреп ул да көлгән була инде...

### Ай-һай, бигерәк дыуамал булынған!

Ҡулдарын һелтәй-һелтәй Ҡасан ағай үҙ хәбәрен һөйләй:

- Бер көндө сабынлыҡты ҡарарға тип сығып киттем. Ул йылды үлән шәп булды. Урыны менән муйындан, урыны менән ҡолаҡҡа етә яҙа. Быйыл, насип итһә, бесәнде мул итеп эшләйәсәкбеҙ, тип ҡыуанып бер булына. Күптәр белә инде, беҙ сапҡан яландың уртаһында бер йыуан ялбыр ҡарағай үҫеп ултыра. Шул ҡарағай эргәһендә сәй эсәбеҙ, салғы сүкейбеҙ, ял итәбеҙ. Гәләмәт уңайлы урын. Сабынлыҡҡа барып еткәс, бына шул ҡарағайға күҙ ташлап аптырап кителде. Ҡарағай олонона бер ҡулы менән һөйәлеп, берәү миңә ҡарап тора! Кем тора икән, тип оҙаҡ текләнем. Алыҫтан танып булманы барыбер. Бигерәк таҙа кәүҙәле. Беҙҙең ауыл тирәһендә былдай дәү кәүҙәле кеше лә юҡ, буғай. Был бигерәк елле. Ул миңә тексәйгән, мин уға, тигәндәй. Нишләп, мәйтәм, алыҫтан былайтып бер-берәбеҙгә тексәйешеп торабыҙ әле. Барайым әле эргәһенә. Танышайыҡ, һаулыҡ һорашайыҡ, хәлдәрҙе белешәйек. Үҫкән үләнде йыра-йыра уға ҡарай атлап киттем. Нишләптер, барып еткәнсе күтәрелеп ҡараманым. Ә ҡарарға кәрәк булған икән. Уға ни бары ике-өс аҙым ҡалғас, башты күтәреп ебәрһәм... бына бит теге тора. Саҡ артҡа ҡолап кителмәне. Ҡаттым да ҡалдым. Ней ҡасып булмай, ней алға атлап булмай, ней ҡысҡырып булмай. Торам инде шунда баҕана һымаҡ ҡатып *(Ҡасан ағай ауыр тын алған булып, тыңлаусыларҙы күҙәтә. Һорау биреүсе тойолмағас, һүҙен дауам итә)*. Ну ул йылды үлән шәп булды. Урыны менән муйындан, урыны менән унан да бейегерәк. Ун күбә сығырлыҡ урындан уйламай ҙа ун биш күбә сығырлыҡ урындар бар. Ну үҫкән, малай. Нисәмә йыл йәшәп, ундай үҫкән үләнде күргән юҡ ине. Шул бейек үлән арҡаһында тегене ваҡытында таный алмағанмын. Ҡот китерлек шул, бигерәк елле. Кеше һымаҡ бер ҡулын ағасҡа һөйәгән дә тора инде миңә ҡарап. Ул да елле, бесән дә елле. Ул йылды үлән бигерәк шәп булды бит...

Әлеге лә баяғы Исмәғил сыҙамай һәм һорай ҡуя:

- Ә кем тора ине?

Шуны ғына көткән Ҡасан ағай уға борола төшә һәм шомло тауыш менән яуап бирә.

- Айыу тора ине, Исмәғил ҡустым! Минән ике генә түгел, хатта биш башҡа бейек айыу тора ине *(айыуҙың үтә елле икәнен тыңлаусылар тулыһынса һеңдергәс, һүҙен дауам итә)*. Ай-һай, бигерәк дыуамал булынған. Шундай алйот аҙымға барылған бит, әй. Бына бөгөн миңә берәй бәләкәйерәк айыу осраһа, мин улайта алмаҫ инем. Нисек былдай аҙымға бара алғанмындыр, һаман аңлай алмайым. Ну был айыу елле ине. Нисәмә йыл йәшәп ундай ҙур айыуҙы күргән юҡ ине. Минән ике генә түгел, хатта биш башҡа бейек бит, әй. Ул йылды үлән дә шәп булды. Ну айыу ҙа елле. Нисек ҡурҡылмағандыр. Һаман да баяғы шул дыуамаллыҡ инде...

Ҡасан ағай күберәҡ Исмәғилгә ҡарап һөйләй. Уны бер тоҙаҡҡа эләктергәс, хәҙер ҡулынан ысҡындырмаясаҡ бит инде. Быныһы көн кеүек асыҡ. Ә Исмәғилдең ошондай һорау бирәсәге лә көн кеүек асыҡ.

- Ҡасан ағай, ә һин нимә эшләнең?

Ҡасан ағай ҡулдарын ике яҡҡа һуҙып күрһәтә:

- Ҡулымда бына ошондай оҙонлоҡта бысаҡ бар ине, Исмәғил ҡустым. Уны бысаҡ тиһәң дә була, хәнйәр тиһәң дә була. Ҡылыс тип әйтеп булмайҙыр, уға әҙ генә етеңкерәмәй. Атай мәрхүмдән мираҫ булып ҡалғайны. Яман үткер. Бына шул бысаҡ менән айыуға сәнстем дә ҡуйҙым бит, әй! Алға табан бар көсөмә ырғыным һәм бар көсөмә йөрәгенә ҡаҙаным! Йөрәк тапҡырына тоҫмалламағайным былай. Ну, насип иткәс, шул тирәгә эләккән инде. Унылын аҙаҡ ҡарап аптыраныҡ. Сәнскән ыңғайы айыу бер генә әйләнде лә ергә ҡоланы. "Дөрҫ" итеп ҡалды. Ә мин менеп тә киттем. Ул ваҡытта аяҡ-ҡулдар бигерәк шәп эшләй икән. Тейгән урынына тейҙе, теймәгән урынына теймәне, тигәндәй...

Исмәғил аптырай төшә һәм түҙемһеҙләнеп Ҡасан ағайҙы бүлдерә:

- Ҡайҙа менеп киттең, Ҡасан ағай? Айыуғамы?

Ҡасан ағай бер килке уға аптырап ҡарап тора *(йәнәһе, шуны ла аңламайһың икән, ҡустым)*. Шунан асыуланған булып, һүҙен дауам итә.

- Атаң башына менеп киттем! *(Бер аҙ өндәшмәй тора, йәнәһе лә тыныслана)*. Нишләп айыуға булһын инде, Исмәғил ҡустым. Уға нишләп мин менәйем? Айыуға менеп барырға мин һиңә һунар этә түгел дә инде. Ул һөйәлеп торған ҡарағайға менеп киттем! Зинһар өсөн "Нишләп?" тип кенә һорап ҡуйма инде. Ярай, йәшһең бит, белмәһәң, белмәйһеңдер ҙә. Айыуҙың бит миңә ташланыуы бар ине. Шуға ҡарағайға менеп киттем мин. Айыу бит мылтыҡ менән тәрәп атһаң да шунда уҡ үлмәй. Әҙерәк ваҡыт кәрәк. Ә мин сәнскән айыу тик ята бит, әй. Өҫтән ҡарап, оҙаҡ ултырҙым. Апаруҡ ваҡыт үтте, ә айыу тик ята. Ҡыбырламай ҙа. Нисек етте, шулай сыҙап, өс-дүрт сәғәт самаһы ялангас ултырырға тура килде ҡарағай башында. Үҙемде күгәүен-серәкәйҙәр талап бөттө. Ул йылды күгәүендәр бигерәк елле булды. Баш бармаҡ һымаҡтар. Килеп әсе тешләйҙәр. Арҡаға ултырғанына һуғам тип саҡ үҙем ҡарағайҙан осоп китмәнем. Көнә, етмәһә, әсе килеп тороп. Эргә-тирәләге барлыҡ күгәүендәр йыйылғандыр ул....

Исмәғил тамам аптырай һәм иплап кенә һорай ҡуя:

- Ҡасан ағай, урманға әллә кейенмәй барғайнынмы?

Ҡасан ағай уға аптырап ҡарап, бер килке һүҙһеҙ ҡала. Бер аҙ торғас, үсеккәнерәк тауыш менән һүҙен дауам итә.

- Нишләп мин урманға ялангас барайым? Кем урманға ялангас барһын инде? Ауыл урамынан мин нисек ялангас үтәйем, ә? Кейемдәрҙе ҡарағай башында сисеп бөттөм. Үлгең килмәһә, йәшәгең килһә, сисәһең инде. Ну, малай, күгәүендәр рәхәтләнде. Үҙҙәре килеп тороп эре. Ҡанды эстеләр генә...

Исмәғил Ҡасан ағайҙы ҡыуандырып, сираттағы һорауы менән уны бүлдерә.

- Ә нишләп кейемдәреңде систең?

Шуны ла аңламайһыңмы, тигән кеүек бер килке уға ҡарап тора Ҡасан ағай.

- Кейемдәрҙе, Исмәғил ҡустым, айыуға ташлап бөттөм!

Былдай яуаптан Исмәғил тамам аптырай.

- Ә нишләп ташланың?

Ҡасан ағай бер аҙ көрһөнөп һүҙен дауам итә:

✓ *Тын да алмайынса тамашаны ҡараған балағыҙ ошо һорауға үҙе яуап табасаҡ. Артабан һеҙгә яуған һорауҙарына ла тулы яуап бирергә әҙер булығыҙ, сөнки спектакль уның аңында яңы юл - донъяны ҡәҙерләү, һаҡлау тойғоһон аса.*



- Эх, Исмәғил ҡустым, һунарға йөрөмәгәнең күренеп тора. Шуға аңлатып үтергә тура килә инде. Айыу бит бик хәйләкәр була. Уның юрый ғына, ҡыланып ҡына үлгән булып ятыуы бар. Шуға кейемде уға өҫтән ташлайһың. Үлә алмай ятҡан айыу кейемде кеше тип уйлай һәм уны тотоп ала. Һәм шул ыңғайы уны йыртҡыслап-ботарлап ташлай. Мин ошолайтып әллә нисәмә тапҡыр үлемдән тороп ҡалдым. Ә был юлы ныҡ сәнскән булғанмын икән. Салбарҙы ташланым, тик ятты. Күлдәкте ташланым, ҡуҙғалманы. Түбәтәйҙе ташлағайным, һыңар ҡулы менән тотоп алды ла уны ҡосаҡлап йән бирҙе. Ярай түбәтәйгә хәтлем ташлағанмын, баш китә ине, малай. Ну айыу елле ине. Түбәтәйҙе шул хәтлем ныҡ йомарлаған, кейерлеге ҡалмағайны. Әрәм булды инде. Ҡоҙа бүләк иткәйне. Нишләйһең, бер ботон бирергә тура килде...

Һүҙҙең ҡапылдан ғына икенсе йүнәлеш алыуы Исмәғилде тағы аптырауға һала:

- Кемгә бер ботон бирергә тура килде?

Ҡасан ағай бер аҙ тынып ҡала һәм һүҙен дауам итә:

- Шул көндө күрше лә сабынлығын ҡарарға сыҡҡан булған икән. Бәхеткә ҡаршы, ул ат егеп сыҡҡан. Ҡарағай башынан ярай әле күреп ҡалдым мин уны. Ҡысҡырып, саҡ тегене туҡтаттым. Минең ҡарағай башында, етмәһә, ялан-ғас ултырғанды күреп, бер килке аптырап торҙо әле ул. Шул күрше менән бер арба итеп айыу тейәп ҡайттыҡ. Уға бер ботон бирергә тура килде. Нишләйһең, ярҙам итте бит. Ул булмаһа, айыуҙы алып ҡайтып булмаҫ ине, ите боҙолор ине. Көнө килеп тороп эҫе булды. Ул заманда хәҙерге һымаҡ холодильниге-морозильниге ҡайҙа әле. Ә мин айыуҙың бер итен әрәм итмәнем. Уның итенән тушенка эшләп алдым. Заманында бер урыҫ өйрәткәйне. Аш-һыуға уңғанлыҡ бар былай, ғәләмәт тәмле килеп сыҡты. Бер айыуҙы бер үҙем ашап ултыра алмайым бит инде. Күрше-күләнгә, туғандарға, ауылдаштарға таратып сыҡтым.

Ошо мәл Ҡасан ағай Исмәғилгә ҡарап ала һәм әйтеп ҡуя:

- Һеҙгә лә унлап банка индереп биргәйнем. Эй, ҡыуандығыҙ инде.

Исмәғил булмаған нәмәне, әлбиттә, иҫенә төшөрә алмай. Һәм һорай ҡуя:

- Ҡасан индергәйнегеҙ?

Бына ошо мәлдә Ҡасан ағайҙың йондоҙло сәғәте һуғып ебәрә.

- Һин иҫләмәйеңдер ул. Был хәл утыҙ биш йыл элек булғайны. Ул ваҡытта һиңә ни бары өс-дүрт йәш булғандыр...

Йәш кеше бына ошо мәлдә генә үҙенең отолғанын аңлап ҡала. Башҡа тыңлаусылар, әлбиттә, рәхәтләнеп көлөп ебәрә.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# КҮҘГӘ КҮРЕНМӘГӘН ҺАЛДАТ...

## һаман беҙҙең арала



**М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында өлкәндәр менән бергә театрға йөрөгән балалар өсөн яңы спектакль сәхнәгә сыҡты. Авторы - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, яҙыусы Ғәҙел Ҡотой Рөстәм атлы улы өсөн "Күҙгә күренмәҫ һалдат" тигән әкиәтен яҙа, ләкин тамамлап өлгөрмәй, яуҙа алған яраларынан һуң оҙаҡ йәшәй алмай вафат була...**

Ошо әҫәр буйынса ҡуйылған "Рөстәмдең сере" спектакле ғаилә менән барып ҡарар өсөн ғәләмәт шәп спектакль булып сыҡты. Ни өсөн ? Беренсенән, балалар өсөн ихлас яҙылған әҫәр үҙенең ябай телле һәм аңлайышлы сюжеты менән арбай. Тәүге күренештәрҙән үк тамашасы актерҙарға мөкиббән ышана: мөләйем ҡиәфәтле һәм бер аҙ фәстереп һөйләй белеүсе Оләсәй (Башҡортостандың халыҡ артисы Миңзәлә Хәйруллина), шаян һәм ғәжәп ҡыҙыҡһыныусан, тиктормаҫ малай Рөстәм (артист Зилиә Хәлилова, ул спектаклдең икенсе бүлегендә немец ҡыҙыҡайы Мартаны ла уйнай), артабан фантазер малай "Күҙгә күренмәҫ һалдат" булып әүерелә лә атаһы үткән һуғыш юлдары буйлап китә, ә бөтә залдағы халыҡ тын да алмайынса уның артынан "эйәрә".

Театрҙың художество-ҡуйылыш бүлегенең тырышлығы арҡаһында бөтә актерҙар спектаклдең төп "мөғжизәһен" ғәжәйеп оҫталыҡ һәм үҙ-ара яҡшы көйләнгән теүәллек менән башҡарып сыға (рәссам Альберт Нестеров, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре). Башҡорт сәхнәһе өсөн сираттағы һөйөнсө бүләген - был спектаклдең биҙәлеш серҙәрен театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов Рәсәй кимәлендәге ижади лабораторияларҙың береһендә күреп ҡайта, авансценаны тултырып теҙелгән ҡатырға һалдаттар - гүйә, ҡотолғоһоҙ һуғыш тирмәне алдында илде әрсәләп ятҡан ил улдары... Һуғыш хаҡында балаға, гүйә, уйынсыҡтар һөйләй: бына карикатуранан төшкәндәй немец офицеры Фогель, китап иллюстрацияларынан күскәндәй партизан һәм совет армияһы һалдаты Иван - уларҙың ҡиәфәте элекке китаптар һәм мультиктар аша таныш һымаҡ, әммә бөгөн дә ниндәй сағыу һәм героик тәрбиә бирә был "уйынсыҡтар"! Гитлерға оҡшаш Фогель - айырыуса гротесклы образ, бик теремек һәм көслө булыуы менән күҙ алдында торасаҡ, әйтерһең дә, бала кешенең йән-фарман төшөргән рәсеме кинәт йәнләнгәндәй (Артур Ҡунаҡбаев, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы). Иван роле иһә уға ҡапма-ҡаршы, үҙенә ни хәтле ауыр булһа ла, ҡаты яралы килеш, үҙ ихтыярын юғалтмай, һаман көрәшә, дошманды барыбер еңеп сыға (Ирек Булатов, Башҡортостандың халыҡ артисы). Немец һалдатының зомби хәлендәге карикатурик хәрәкәтсәнлеге һәм сәбәләнеп сабыуы (актер Урал Әминев), Әбей менән Бабайҙың (Гүзәл Маликова, Башҡортостандың халыҡ артисы менән Илсур Байымов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы) дошманға теҙ сүкмәй торған ҡаты заттан булыуы - һәммәһе лә ил халҡын Бөйөк Еңеүгә илтә торған төп мөғжизә.

Спектакль руссанан "Рөстәмдең сере" тип тәржемә ителгән. Сер нимәлә? Бала өсөн барыһы ла яңылыҡ һәм шулай булырға тейеш. Һәр бала үҙе асҡан серҙе яҡын күрә. Һуғыш нимә ул? Ҡорал менән ут һиптереп дошманды ҡырыу, яндырыу, емереү түгел. Уйын түгел! Һуғыш - һәләкәт. Тын да алмайынса тамашаны ҡараған балағыҙ ошо һорауға үҙе яуап табасаҡ. Артабан һеҙгә яуған һорауҙарына ла тулы яуап бирергә әҙер булығыҙ, сөнки спектакль уның аңында яңы юл - донъяны ҡәҙерләү, һаҡлау тойғоһон аса. Был юлды һеҙ ҙә үҙегеҙҙең фатиха, белем, мораль менән тултыра алаһығыҙ.

"Күҙгә күренмәгән һалдат" образын башҡорт сәхнәһенә күсергән режиссер Радион Букаев тамаша һуңындағы матбуғат конференцияһында бик фәһемле һүҙҙәр әйтте: "Сәхнәлә төп героиня - тыныслыҡ алиһәһе. Уның теңкәһенә тейгән, йәнен көйҙөргән һуғыш суҡмарҙары һәр заманда ла, һәр урында ла кәрәген аласаҡ. Һуғыш сығарған илдәр, талашғауға ҡуптарған кешеләр үҙҙәрен-үҙҙәре упҡынға этеп төшөрә. Уларҙың бер ғәйепһеҙ балалары, тарихи киләсәге ҡорбан ителә".

"Рөстәмдең сере"н айырыуса көсәйтә һәм серлеләндерә торған йәнә бер мөғжизә яһаусы - спектаклдә ут ҡуйыусы оҫта Евгений Ганзбург, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. Ваҡыты тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, Евгений Леонидович бер аҙна эсендә әкиәти сәхнә әҫәренә яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ уйыны аша "тылсым өрөргә" килгән. Ут ҡуйыу оҫталығы, ут рәссамы булыу таланты - бик һирәк осрай торған ҡиммәтле һәләт. Ут - донъя башланғанда Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәүләп тыуҙырылған нур, уның илаһи көсөн һәм тәьҫирен тойоу бик күп кешегә бирелмәй, әммә ут ҡөҙрәте бөтә йән эйәһенә иҫ киткес йоғонто яһай ала һәм аңлашыла. Шуғалыр ҙа "Рөстәмдең сере" олпат академия театрыбыҙҙың сәхнәһендә күптән булмағанса фокуслыҡ алымдары менән хәрәкәт итеп, ут уйнатыу мөмкинлектәрен күрһәтте. Сәхнәлә күҙ алдында яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ киҫешкән нөктәләрҙә "мөғжизә" барлыҡҡа килде: үҙе ҡырҡа торған бысаҡ, буш еңен болғаусы шинель, ҡуҙғалып китә алған өҫтәл, үҙе күреген йәйеп көй сығарған гармун һәм башҡа бик күп "иллюзион трюктар" тамашасыны арбай. "Ут ҡуйыусы рәссам оҫталығы - бары тик күп тапҡырҙар күнекмә, отҡорлоҡ, йылғырлыҡ һәм ижади уйын емеше", тип Евгений Ганзбург үҙ һөнәренең төп ҡағиҙәһен дә әйтеп ҡуя. "Башҡорт академия драма театрында бик тырыш, зирәк, уңған кешеләр эшләй, бындай талантлы актерҙарға әллә ниндәй фәнтәзи алымдар тәҡдим итһәң дә, улар тағы ла арттырып, һине аптыратып һәм һоҡландырып уйнап ҡуясаҡ", - ти бөтә Рәсәйҙе айҡап йөрөгән ут ҡуйыу оҫтаһы.

Башҡорт академия драма театры спектаклдәрен сағыу тән хәрәкәте уйыны менән байытыусы хореограф Алина Мостаева был юлы ла актерҙарҙың шәхси һәләтен иркенләп файҙалана, уларға иҫтә ҡалырлыҡ, теүәл мәғәнәле композициялар ҡорорға ярҙам итә. Композитор Илшат Яхиндың "ҡарары менән" бөтә тамашаны ялмап алған сихри гармун моңо "Рөстәмдең сере"н бер яҡтан тағы ла нескәртә, икенсе яҡтан тәрән мәғәнәгә сорнай: халыҡтың ажарлы көрәше, Еңеүгә ихлас ынтылыуы, бер ниндәй ауырлыҡ һәм юғалтыуҙарға ҡарамайынса, илбаҫарҙы илдән ҡыуа алыуы - тыуған моңдар ошо изге тойғоно сағылдыра.

Әҫәр рус теленән башҡортсаға тәржемә ителгән. Режиссер Радион Букаев әйтеүенсә, "башҡортса уйнау бигерәк тә ҡолаҡҡа яғымлы, һәм актерҙар ҙа иркен йөҙөп йөрөп уйнай", ләкин руссанан тура тәржемә ителгән калькалар, ағас теллелек билдәһе булған һүҙбәйләнештәр осрай. Уларҙы кисекмәҫтән төҙәтергә, яңынан ишеттерергә һәм башҡортса ауыҙ тултырып, ефәк-йомшаҡ тел менән теүәл мәғәнәһен һаҡлап әйтергә тырышырға кәрәк.

Күҙгә күренмәгән һалдат образы Бөйөк Ватан һуғышы яуҙарына рухи көсөн биреп, һуңғы икмәгенә хәтле оҙатып торған йәш балалар һәм ҡарт-ҡоро халыҡтың хыялый образы ул. Тиңһеҙ алышта ауған улын йә атаһын барып ҡотҡарыу, дошманға ҡаршы күтәрелеү, Бөйөк Еңеү көнөн күреү - бөтә ил өмөтләнеп ынтылған бер "мөғжизә" башҡорт сәхнәһенә лә йәнә бер шауҡым булып килеп ҡағыла.

**Сәрүәр СУРИНА.**

✓ **"Йомшаҡ" ергә 60 тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән 30 көн дауамында һуғырға кәрәк. Был ысулды тәҡдим итеүсе биология фәндәре докторы Сергей Сперанский үҙе ошо рәүешле депрессиянан һәм инфаркт эҙемтәләренән ҡотолған.**



ИНТЕРНЕТТАН



# СЫБЫҠ МЕНӘН ЯР

■ Бөгөн ауырыуҙарҙы нисек кенә дауаламайҙар. Мәҫәлән, Новосибирск ғилми-тикшеренеү институты ғалимдары алкоголизм, наркомания, депрессия менән яфаланған, үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыусыларҙы сыбыҡ менән ярырға тәҡдим итә. Былдай психосоматик ауырыуҙар йәшәү дәрте һүнгәндәрҙә барлыҡҡа килә. Әҙерәк "туҡмап" алғандан һуң кешелә эндорфин рецепторҙары әүҙемләшә һәм "бәхет гормоны" күпләп бүленә. Белгестәр нисек итеп һуғырға ла өйрәтә - "йомшаҡ" ергә 60 тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән 30 көн дауамында һуғырға кәрәк. Был ысулды тәҡдим итеүсе биология фәндәре докторы Сергей Сперанский үҙе ошо рәүешле депрессиянан һәм ике тапҡыр кисергән инфаркт эҙемтәләренән ҡотолған.

■ Һимеҙлек менән яфаланыусыларға солитер йоморҡаһы йоторға тәҡдим итәләр. Солитер эсәктә йәшәүсе оҙонлоғо 10 метрға еткән селәүсен. Ул кеше ашаған нәмәләр менән туҡлана.

■ Йылы нефть тултырылған ванналар быуындар һыҙлауынан ҡотҡара, ти. Артритты Әзербайжандың Нафталан ҡалаһы санаторийҙарында шулай дауалайҙар. Шулай уҡ АҠШ-та нефть ванналары составында канцероген бар тип иҫәпләйҙәр.

■ Көләү стресс булдырмай, йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшен, матдәләр алмашыныуҙы яҡшырта, ғүмерҙе оҙайта. Дарыуҙар һатып алып дауаланырға аҡсағыҙ булмаһа, ҡысҡырып көләгеҙ, һауыҡҡанығыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ.

■ Америка психологтары етештереүселәр сәләмәтлек өсөн файҙалы һәм түбән калориялы тип рекламалаған ризыҡтарҙы күп ҡулланмаҫҡа кәңәш итә. Тәжрибәләрҙә йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Фильм ҡараған мәлдә уларға "файҙалы" печенье тәҡдим итәләр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, әгәр ҙә үҙен дөрөҫ туҡланам тип уйлай икән, кеше күберәк ашай. Магазинда ла йышыраҡ "сәләмәт тукланыу" тигән яҙыуға иғтибар итәләр. Әммә ризыҡтың калорияһын бөрәү ҙә иҫәпләп тормай. Был иһә һимереүгә алып килеүе бар.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын АҠШ-та тикшереп ҡарағандар. Тәжрибә барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә.

■ Табиптар шәкәрҙе зарарлы тип иҫәпләй. Әммә Америка ғалимдары уның да файҙалы яғын асыҡлаған. Күптән билдәләнеүенсә, сабыйҙарға татлы һыу бирһәң, улар ауыртыуҙы яҡшыраҡ кисерә. Ғалимдар раҫлауынса, 5-10 йәшлек балаларға ла шәкәр ауыртыуҙы баҫыусы булараҡ тәьҫир итә. Был тәьҫир эндорфиндар менән бәйле, улар баш мейеһендә барлыҡҡа килә һәм ауыртыуҙы баҫыусы булып сығыш яһай.

ХӘТЕРКИТАП

**Мин 1937 йылдың 19 майында Муллаҡай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә бишенсе бала булып тыуғанмын. Бала ваҡыттан атты ныҡ яратҡанмын. Әсәйем һөйләүенсә, һарайҙа ат менән булышып тик йөрөй, тип, атайым мине хатта бикләп ҡуя торған булған. Мин 4 йәшемдә үк үҙаллы һыбай йөрөй алғанмын. Атайымдың ике аты булды - Малай һәм Егет ҡушаматлы. Улар шул тиклем аҡыллы ине, мин уларҙың аҫтынан үтә сығып йөрөгәнмен. Әсәйемдән урлап ҡына икмәк йә шәкәр ашатҡанмын. Улар райондағы, колхоздағы һабантуйҙарҙа, ат сабыштарында алдынғы урын биләй торғайны.**

# ЭТАШАМАҪ АТЛЫ АЙҒЫР



Беҙҙең атайыбыҙ Рамаҙан Шәһивәле улы Билалов 1939 йылдан 1942 йылдың 16 июненә тиклем "Октябрь" колхозының рәйесе булып эшләп, 2 атын алып һуғышҡа китте. Атайымды Баймаҡҡа хәтлем оҙатып мин дә барҙым. Серекҡүлдә аттарҙы ашатып, ял итеп алып, шунан Баймаҡҡа етеп барғанда туҡтап, ҡарауыл ҡуйып, шунда ятып йоҡланыҡ. Төндә урыҫтар килеп бәйләнеп, һуғышып бөттөләр. Икенсе көнөнә Баймаҡта аттарҙы машиналарға тейәнеләр, Малай менән Егет икеһе бер машинала ине. Мин уларҙы ҡысҡырып саҡырыуыма икеһе лә кешнәп яуап бирҙе. Машиналар ҡуҙғалып киткәс, уларҙың артынан илай-илай бик оҙаҡ йүгереп барҙым. Атайым минә: "Улар барып сабыша ла ҡайта", - тигән булды. Ҡайҙан ғына ҡайтһындар инде! Мин уларҙы бик һағына инем. Ҡойма башына менеп, күрше бабайҙың атына оҙаҡ итеп ҡарап ултыра торғайным. Ул минә атының янына барырға рөхсәт итмәне. Атайым: "Ул Герой бабай, Мәскәүҙә булып ҡайтҡан, уға орден биргәндәр", - тип әйтә торғайны. Мин һуңынан ғына белдем: күршебеҙ Заһретдин бабай Вәлиев йылҡы көтөп, һәр бейәнән берәр ҡолон алғаны өсөн оло баһаға - республикала беренселәрҙән булып Ленин орденына лайыҡ була, колхоз өй һалдырып бирә. Бына ошо Заһретдин бабай Эташамаҫ тигән айғырҙы бер бейәгә алмаштырып, Түбә ҡасабаһынан алып ҡайта. Был ваҡиға 1939 йылда була. Эташамаҫ ҡушаматлы айғырҙың батырлыҡтарын, аҡыллылығын, нисек итеп бүреләрҙе туҙҙырғанын беҙгә - беренсе класс балаларына легенда итеп Фатима исемле уҡытыусы апай һөйләй торғайны.

...Беҙҙең ҡарт олатай Билал ҡартның 5 балаһы була: Ғилман, Шаһивәле, Исмәғил, Бибиғәйшә һәм Зөһрә өләсәй. Шул Зөһрә өләсәй Иҫәнбәт ауылына, күренекле Сураш батыр нәҫеле Әхмәтшәрәф олатайға кейәүгә сыға. Бик күп мал аҫрап Иҫәнбәт ауылында йәшәйҙәр, уларҙың 8 балаһы була. Иң өлкән улдары Әширәф ағай данлыҡлы шахтер Социалистик Хеҙмәт Геройы ине. Сибай ҡалаһында йәшәнеләр, хәҙер мәрхүм инде. Илдә барған сыуалыштар, "кулактарҙы бөтөрөү" уларҙы ла урап үтмәгән. Ошо ваҡиғаларҙан ҡурҡып, Әхмәтшәрәф олатай ҡайһы малын һатып, күбеһен яңы төҙөлә башлаған колхозға бушлай биреп, ҡотолоп ҡала. Һуңынан Иҫке Сибайға күсеп бара. Элек мал ауырыуҙары күп булған, аттар сирләгән (һаҡау, ҡорсаңғы, шатун һ.б. сир). Ошо Эташамаҫ тигән ҡолондоң атамаһы ла ауырыу сәбәпле килеп сыҡҡан. Ул бик ауырыған, тәне эрен менән ҡапланған (тишелеп аҡҡан). Әхмәтшәрәф олатай был ҡолон мал булмай тип ҡыйлыҡҡа ташларға ҡушҡан һәм "уны эт тә ашамаҫ" тигән. Шул ауылдан бер кеше ҡолондо ҡыйлыҡтан алып ҡайтып, йыуып, укол эшләтеп, һыйыр һөтө эсереп, йүнәлтеп аяҡҡа баҫтыра. Ҡолонсаҡ матур булып үҫеп етә һәм уны 2,5 йәшендә Түбә ҡасабаһында йәшәгән Смирнов тигән урыҫҡа һаталар. Юғарыла телгә алған Заһретдин бабай үҫмер айғыр Эташамаҫты Түбәләге бына ошо урыҫтан бер баш быуаҙ бейәгә алмаштырып алған да инде.

...Атайым киткәс, мин шул тиклем ат һағышына бирелгәнмен. Әсәйем мине быныӊ өсөн ныҡ итеп әрләй ине. Атайым урынына колхоз рәйесе булып Вәләм Айытбаев тигән кеше килде. Беҙҙең өйҙә ике мәртәбә тентеү үткәрҙе. Атайымдың ҡыш кейгән толобон, ат ыңғырсағын, нуҡтаһын алып сығып киттеләр, хатта һунар этен дә, арттарынан һунарға эйәрмәгән өсөн ҡолағынан үтә картечь менән атып киттеләр. Кемдәр икәнен яҙып тормайым, сөнки йылдар үтә бара уларҙың һәр береһе үҙенең яҙаһын алды. Рәйестең күсере булып Яхия ағайым эшләне. 1943 йылдың көҙ айы ине. Ағайыма эйәреп Айытбаевтар йәшәгән өйгә аттарҙы ҡарайым тип барҙым. Унда һарай эсендә 4 ат тора ине. Шуларҙың 2-һе өйөр айғыры Эташамаҫ менән Күгайғыр, икеүһе рәйестең екке аттары булды. Яхия ағайым айғырҙарҙы ла ҡарай торғайны. Мин дә шунда буталып, ярҙамлашып йөрөнөм. Бер көн Айытбаевтар өйөнә ике санаға теймәлеп ҡумәк кеше килде. Ағайым: "Врачтар килде, ауырыған Күгайғырҙы ҡарарға", - тине. Мин ситтә гена тыңлап торҙом. Ыҫынлап та Күгайғырҙың бото нык шешкән ине. Берәүҙәре "ныуыҡ тейгән", икенселәре "бейә типкән" тине. Дауаларға тигән ҡарарға килделәр. Тик Күгайғыр йүнәлмәгәс, уны һуйҙылар. Айғырҙың нимә менән ауырығанын мин үҙем мал табибы булып эшләй башлағас ҡына аңланым. Тик ул ваҡытта дарыуҙар юҡ ине шул.

Күгайғырҙы ҡарарға килгән кешеләр араһынан бер өлкән генә ағай: "Бирегеҙ минең айғырымды. Йылҡы таралып бөттө, йыйып алып булмай", - тигәйне. Ул Зәйнетдин апа Дәүләтҡолов булған. Заһретдин апаның урынына йылҡы көтөргә ҡалған кеше. Көтөүсе Эташамаҫты ҡайтарыуҙы талап иткән икән. Сөнки ул айғырҙың иҫ китмәле һыҙаттары бар ине: үҙенең өйөрөнә ситтән бер баш малды ла индермәй, үҙенекен дә сығармай. Эташамаҫ Зәйнетдин апаның Ҡола атын ғына үҙенә яҡын килтергән. Ҡалғандар янына бара ла алмаған. Мал эҙләгән һыбайлылар: "Эташамаҫтың өйөрө ҡайһы тирәлә йөрөй икән?" - тип ҡурҡышып бербереһенән һорашып ҡына йөрөгән. Аҡыллы айғыр үҙенең өйөрөндә үҫмер айғырҙарҙы, өлкән һәм йәш бейәләрҙе айырып тотҡан. Зәйнетдин апа: "Мин йәш йылҡыны көтмәнем, уларҙы Эташамаҫ үҙе ҡараны. Уның бер кешнәүенән аттар бер урынға өймәкләшеп тороп ине", - тип һөйләй торғайны.

Эйе, Эташамаҫ бик ныҡ үҫал, аҡыллы, аңлы һәм ҡыйыу мал булды. Зәйнетдин апа һөйләп бөтөрә алмай ине уның мажараларын. Эташамаҫтың өйөрө торған ергә хатта эттәр ҙә барырға ҡурҡҡан, яҡынламаған.

...1943-1944 йыл. Ғинуар бөтөп барғанда Зәйнетдин апа йылҡыға барып ҡайтайым тип сығып китә. Аттары Туҡмаҡ йылғаһы, Оҙонкүл буйында тибендә йөрөгән. Зәйнетдин апа: "Аттарҙы ашатмай, өйөрөп ҡуйған", - тип Эташамаҫты әрләй-әрләй барһа, Эташамаҫ ҡанға батҡан, тиреһе ярпылдап бөткән, ти. Йылҡы Туҡмаҡ буйында йөрөгән була, айғыр уларҙы ауылға яҡынайтып ҡыуып алып килгән. Зәйнетдин апа был хәлгә хафаланып, "Берәй йылҡыны бүре йыҡманымы икән?" тип артабан сапҡан. Ни күҙе менән күрә - ике бүре үлеп ята икән. Эташамаҫ бер баш йылҡыны ла бүреләргә бирмәгән. Улар менән алышҡа сығып, йыртҡыстарҙы үлтергән. Ошо ваҡиғалар тураһында һөйләгәндә Зәйнетдин апаның күҙҙәренән йәштәр аға торғайны. Сөнки элек һәр юғалған баш мал өсөн көтөүсе үҙе яуап биргән. Эташамаҫты, йылҡылары менән алып ҡайтып, Теләстән табиптар саҡыртып,

айғырҙың бүреләр йыртҡыслаған тиреһен 3-4 урындан тегеп, дауалап алғандар.

...Борон-борондан башҡорттарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса ете быуын үтмәй тороп, үҙ туғандарына кейәүгә сығырға йәки кәләш алырға рөхсәт итмәгәндәр. Бына ошо туғанлыҡ сифаттары тип әйтәйемме, сафлыҡ, аңлылыҡ хайуандарҙа ла бар. Бының ҙур дәлилен килтерәйем. Эташамаҫ өйөр айғыры булып 3-4 йыл "эшләгәс" тә, ул өйөрҙә аһау (түлһеҙ) бейәләр йылдан-йыл күбәйә. Был аңлы, бер үк ваҡытта хаталы хәлдең сере низә тора һуң? Эташамаҫ өйөр айғыры булараҡ, үҙенең өйөрҙәге "ҡыҙҙарын" тороҡтормаған, һөҙөмтәлә, аһау бейәләр күбәйгән. Был хәлде һуңынан ғына белеп ҡалалар. Шуға күрә Баймаҡ совхозынан бер баш бейәгә алмаштырып, айғыр алып ҡайталар. Уны Кирайғыр тип йөрөттөләр (ҡыҙыл ҡола, сыҫҡан һыртлы, бик һылыу ине). Эташамаҫтың "ҡыҙҙарын" айырып, яңы өйөр булдырып, Кирайғырға бирәләр. Ул ваҡытта беҙҙең колхоз "Беренсе май" колхозы менән бергә ҡушылғайны. Тоҡом бейәләрен Иҙрис бригадаһына бирҙеләр. Үрге Иҙристә Мозафар ағай Мусин, Түбәнге Иҙристә Далха еҙнәй Йомағужин көтөүсе булды.

...Эташамаҫтың тағы бер якшы яғы булған. Ул бер ваҡытта ла йылҡыны иген баҫыуҙарына төшөрмәгән, ә ситләтеп кенә йөрөткән. Эташамаҫтың шул тиклем уҫаллығын аттар уның бер кешәнәп баш һелкеүенән дә аңлаған. Ул ҡолонсаҡтарҙы ысынында ла атайҙарса һаҡлаған, ел-ямғыр тейҙермәгән. Эташамаҫтың мажараларын Далха еҙнәй бик күп һөйләй торғайны: нисек итеп темәстәрҙең йылҡыһының өйөр айғырын талап, Ҡарағай моронға алып барып ташлағанын, Түбә халҡының аттарын да ауылдарына тиклем ҡыуалағанын һ.б.

Элек беҙҙең колхозда күп итеп ҡымыҙ етештерҙеләр, ошо шифалы эсемлектең иң тәмлеһе беҙҙә етештерелә ине. Был эштә Зөлхизә Мусина, Зөлхизә Йомағужина апайҙар эшләне. Майҙың аҙағы июнь башында бөтә һауын йылҡыһы менән йәйләүгә күсеп сыға торғайнылар. Иң тәүҙә Ҡараташ аҫтына, июль, август айҙарында Талҡаҫ аҫтында яттылар. Элек ҡымыҙ алыусылар күп булды, бөтә юлаусылар туҡтап үтә ине. Ял йортон да ҡымыҙ менән тәьмин иттеләр. Колхоз идараһының ҡарары буйынса ҡымыҙҙы үҙ халҡына, бигерәк тә бесән эшләгән осорҙа, бушлай тараттылар. Теләктәре булһа, үҙҙәре ҡымыҙ эшләп эсһен тип, 5-6 бейәне ҡолондары менән бригадалар ҡарамағына бирә торғайнылар. Шулай уҡ колхоз идараһы өлкән Күгат һәм Эташамаҫ буйынса, уларҙың хеҙмәтенә баһа итеп, "үҙҙәре үлгәнсе йәшәһендәр" тигән ҡарар сығарғандар. Эташамаҫты 12 бейәһе менән Үрге Иҙрис бригадаһы биләмәһендә, Бетерә йылғаһы буйында йөрөткәндәр. Уларҙың махсус көтөүсеһе булмаған, эре мөгөҙлө малдың көтөүселәре ҡарамағында булғандар. Эташамаҫ аттарын Бетерә йылғаһы буйында тотҡан, көтөүселәр уларҙы һирәк-һаяҡ ҡына килеп ҡарап киткән.

...1951 йылдың июне аҙаҡтарында Муллаҡай бригадалары бесәнселәре Бетерә буйындағы "Киндерле уй" тигән ергә бесән эшләргә барҙыҡ. Ҡыуышлап яттыҡ, ҡыҙыҡ ваҡиғалар күп була торғайны. Ат көтөүселәре Йосоп Әлибаев һәм Ғәйзулла Уразгилдиндар ине. Улар икеһе лә Эташамаҫты яратманы: "Көтөүҙә йөрөгән эш аттарын баҫтырып, туҙҙырып бөтә шул Эташамаҫ", -тип әйтә торғайнылар. Минең атайым Рамаҙан Билалов бригадир булып эшләне. Икенсе бригаданы Саттар ағай Бикйәнов етәкләне. Бер көн ошо бесәнселәр йәйләүенә Зәйнетдин апа Дәүләтҡолов бер улы менән килеп етте. Ул заманда бик көслө йәшенле, оҙайлы яуындар булып ала торғайны. Шул мәлдә Эташамаҫты 4 бейәһе менән йәшен атып үлтерә. Зәйнетдин апа яратҡан айғырын ерләү өсөн соҡор ҡаҙырға килгән икән. Ике бригаданың мыҡты кәүҙәле егеттәре Зәйнетдин апаға барып ярҙам иттеләр. Зәйнетдин апа Эташамаҫты соҡорға төшөрөр алдынан, айғырҙың башынан ҡосаҡлап, һөйләнә-һөйләнә оҙаҡ итеп илаған...

Бына шулай бик ҡәҙерле, батыр, уҫал, һөйкөмлө, һәр саҡ иғтибар үҙәгендә булған Эташамаҫ тураһында яҡты хәтирәләр әле лә күңелдәрҙә һаҡлана. Был айғыр колхоздың, бар тирә-яҡтың данын күтәрҙе. Беҙҙең быуын кешеләре Эташамаҫтың иҫ киткес аҡыллы булыуына әле лә һоҡланып бөтә алмай: йылҡысылыкта юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшкәне өсөн яҡташтарыбыҙ Заһретдин апа Вәлиев Ленин орденына лайыҡ була. Зәйнетдин апа, Мозафар ағай, Далха еҙнәй миҙалдар, Почет грамоталары менән бүләкләнә. Уларҙың ҡаҙаныштарында бар йылҡыны тотоп торған, күҙ ҡараһындай һаҡлаған Эташамаҫтың да өлөшө бар...

Шулай итеп, районыбыҙҙа матур легенда булып таралған Эташамаҫтың яҙмышы бәйән ителде һеҙгә. Бар халыҡ яратҡан аҡыллы айғырҙы йәшен һуғыуы ла осраҡлы түгелдер, бәлки. Кеше аҡылы, әҙәми сифаттар бирелгән Эташамаҫ кеүек йән эйәләре кешеләргә ауыр ваҡытта ебәрелә лә, тормош яйланып, үҙе өлкән йәшкә еткәс, ҡапыл йәшен уты менән кире алына, тиҙәр бит. Ошо үҙе мөғжизә түгелме ни?..

**Марат БИЛАЛОВ,**
**БР ветеринария хеҙмәтенең почетлы ветераны.**
**Баймаҡ районы Ҡуянтау ауылы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 11-се идея: Үткәнеңдән ҡотол

Барк һәм Хэйр фамилияларын ишеткәнегеҙ бармы? Ҡасандыр улар бик "данлыҡлы", дөрөҫөрәге, киң билдәле персонаждар булған. Был икәү яңы ғына ерләнгән мәйеттәрҙең ҡәберҙәрен асып, унан уларҙың кәүҙәләрен ҡаҙып алып һәм медицина мәктәптәренә һатып, яҡшы ғына табыш алырға мөмкин булыуын асыҡлаған. Был хәл бик күптән, 1827 йылдар тирәһендә булған. Әйтерлек тә түгел, ҡот осҡос хәл бит!

Тик үҙеңдән һора әле: һин үҙең дә ҡайһы берҙә ҡәберҙән мәйеттәр урламайһыңмы? Мин һине шаҡ ҡатырырға йәки мыҫҡыл итергә йыйынмайым, ләкин, ысынлап та, күптәребеҙ, үҙҙәре лә аңламайынса, шуның менән шөғөлләнә бит. Йәғни тормошоңдағы элекке хаталарыңды йәки күңелһеҙ ваҡиғаларҙы ҡабат-ҡабат иҫкә төшөрөп, ә иң насары - улар хаҡында башҡаларға һөйләп, һин бының менән иҫке "ҡәберҙе" соҡойһоң. Нимә табырыңды аңлап тораһың бит...

Хәҙерге менән йәшә, үҙеңде ағымдағы проблемаларға көйлә, киләсәккә пландар төҙө һәм үткәнде тыныслыҡта ҡалдыр. Ҡалдыр. Бөйөк Уҡытыусы: "Үлектәр генә үҙ мәйеттәрен күмһен", - тип әйтеп, тап ошоно күҙ уңында тотҡан. Үткән тураһында уйлау һәм үткән менән йәшәү үлемгә бәрәбәр. Бының менән шөғөлләнеп, һин һәр юлы Ваҡытҡа һәм ул һалған сикләүҙәргә ышанысыңды күпмелер кимәлдә арттыраһың. Һин үҙеңде өлкәнәйтәһең һәм көсһөҙләндерәһең, үҙ ҡартлығыңды яҡынайтаһың. Аллаһы Тәғәлә: "Сарсағанға сығанаҡтан тере һыуҙы бушлай бирермен", - тигән, ә Ул беҙҙән яҡшыраҡ белә.

Әлеге мәлгә тиклем үҙең менән булған бөтә насар иҫтәлектәргә әйләнеп ҡайтмауҙы ҡағиҙә итеп ал һәм шунан ситкә тайпылма. Ғүмер бит ул - үтә ҡиммәт, уны "зыяратта" урлашыу кеүек шөғөлдәргә әрәм итмә. Үткән ғүмер артта ҡалған, ул юҡ, унан арын. Тормошобоҙҙа булған бөтә ҡайғы-хәсрәттәр, төңөлөүҙәр һәм уңышһыҙлыҡтар менән мөғәмәлә итеүҙең бөйөк сере - уларҙан ҡотолоуҙа. Уларҙы үҙеңдең аңыңдан һыҙып ташла, хәҙерге заманда уларҙың барлығы тураһындағы уйҙан баш тарт. Күрәһеңме, улар бер генә урында булыуы мөмкин - һинең аңыңда.

Әлеге мәл шул тиклем ҡыҙыҡлы һәм ғәжәйеп нәмәләр менән тулы: һәр кем өсөн был - мөһабәт эшмәкәрлек яланы. Үҙ рухи көсөңдө һәм булмышыңды үлгәнгә сарыф итеү - ул ахмаҡлыҡ. Ҡалдыр үткәнде. Арын унан. Үҙеңде ирекә сығар. Иҫке хаталар, уңышһыҙлыҡтар кеүек ваҡиғаларҙың "һөйәктәрен" әйләндереп-тулғандырып, ҡәбер аҡтарып йөрөмә. Яңы көн бар. Шуға шатлан һәм шунда бәхетле бул. Үткәнде үткәндә ҡалдыр.

Һин бөгөн өсөн тыуғанһың. Был һинең тормошоңдағы ИҢ БӘХЕТЛЕ, ИҢ УҢЫШЛЫ, ИҢ СӘЛӘМӘТ КӨН. Бел, үткәндән ҡотолоу - хәҡиҡәт ул!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# ЯҢЫСА ФЕКЕРЛӘ!



**Табиптар фекеренсә, сир туранан-тура кешенең холҡона һәм тормош рәүешенә бәйле. Бәғзе берәү тормошта дөрөҫ юл һайламағаны, теләгән һөнәренә эйә булмағаны, үҙен шәхес булараҡ таныта алмағаны өсөн үҙ-үҙен битәрләй. Һөҙөмтәлә улар күберәк аяҡ сирҙәренә дусар була.**

Үҙҙәре һәм тирә-яғындағылар менән ҡәнәғәт була алмағандар, донъяны гел ҡара төҫтә күреүселәрҙең, ғәҙәттә, күҙ, күреү һәләте менән проблемалар була, улар даими рәүештә киләсәктәре өсөн хәүефләнеп йәшәй. Үҙбаһаһы түбән булған, үҙгәрештәрҙән ҡурҡып йәшәгәндәрҙең үпкәтын юлдары системаһы ҡаҡшай. Гастрит иһә тынғыһыҙ, үҙ көсөнә, һәләтенә ышанысы булмаған, юҡ өсөн борсолоп, йоҡоһонан яҙған кешеләрҙе "үҙ итә". Тартышып ауырыу шулай уҡ ҡурҡаҡ, ҡыйыуһыҙ, киләсәктән ҡурҡҡан кешеләрҙә күҙәтелә. Уҫал, агрессив һәм тиҙ тоҡаныусандар ҡурылдай астмаһы менән яфалана. "Асыуынан тыны ҡыҫылды" тип юҡҡа әйтмәйҙәр, күрәһең. Үҙен яратҡан, уҫал, бөтә ерҙә лә беренсе булырға тырышҡан һәм уңышһыҙлыҡтарҙы ауыр кисереүселәр йөрәк-ҡан тамырҙары сиренә юлығыусан. Әйткәндәй, Колумбия университеты ғалимдары фекеренсә, тап ана шул асыу тойғоһо һәм ярһыу йөрәк сиренә килтереүсе төп сәбәптәрҙең береһе булып тора ла инде. Ашҡаҙан һәм бөйән эсәк сей яраһы йыш ҡына хис-тойғоло, тиҙ ҡуҙғыусан кешеләрҙе яфалай. Тәжрибәле белгестәр ашҡаҙан сей яралы кешеләрҙе уларҙың холоҡ-ҡылығына, ҡуҙғыусанлығына ҡарап та билдәләй. Ғәфү итә, кисерә белмәгән ҡаты бәғерле кешеләрҙе бауыр, үт юлдары сире ыҙалата. Тиҙ ярһыусан, тиҫкәре, башҡаларҙың арт һабағын уҡытырға яратыусыларҙың ҡан баҫымы юғары була. Башҡалар фекерен һанламаусы, бәләкәй генә хаталарҙы ла ғәфү итә белмәүселәрҙе иһә мигрень (баш ауырыуы) яфалай. Өҫтәүенә, ундайҙар үпкәсел, бәйләнсек тә булалар. Күп һөйләргә яратҡан, тиҙ ҡуҙғыусан, сәғәт һайын кәйефтәре үҙгәреп торғандарҙы иһә шәкәр диабеты "ярата".

Был мәкерле сирҙәрҙе мәңгелеккә онотоу өсөн нисек итеп оптимист булырға? Берәй күңелһеҙ хәлгә эләккәндә, бер минутҡа ғына һеҙҙең урында бәхетле кешенең үҙен нисек тотасағын күҙ алдығыҙға килтереп ҡарағыҙсы: хәлегеҙ шундуҡ бер аҙға ғына булһа ла яҡшыра төшкәндәй булыр, һәр хәлдә, шуға өмөт осҡоно ҡабыныр. Үҙегеҙҙе яратҡан кешеләрҙе күҙ алдына килтерегеҙ, күңелегеҙҙән генә улар менән һөйләшегеҙ.

Традицион психология буйынса беҙҙең рухи өлкәләге проблемаларҙың сығанағы - бала саҡта алған күңел яралары. Әлбиттә, былай тип әйтеү артыҡ ныҡ дөйөмләштереү булыр ине. Дөрөҫөн әйткәндә, психик травмалар кисермәгән кеше юҡтыр ҙа әле ул. Тик бына тыумыштан оптимистарҙың психикаһы шундай итеп "төҙөлгән": бөтөн насар нәмә автоматик рәүештә ситкә ырғытыла бара; ә пессимистар, киреһенсә, быларҙың бөтәһен дә иҫендә тота һәм шулай итеп уңышһыҙлыҡтар, ғәфү ителмәгән ғәйеп-үпкә тойғоларынан тотош бер йөк хасил була бара. Бындай йөктән арыныу өсөн психологтар ҡыҙыҡлы бер ысул уйлап сығарған, уның асылы шунда: әгәр берәй насар хәл-ваҡиға иҫегеҙгә килеп төшә икән, шунда уҡ уға ҡағылышлы эске монологты туҡтата һалығыҙ - уға артабан йәйелергә ирек бирмәгеҙ һәм иғтибарығыҙҙы икенсе берәй темаға йә әйбергә (телевизор, мәҫәлән) йә музыкаға йүнәлтегеҙ. Һәр "ысҡыныу" осрағын билдәләп барығыҙ һәм көн аҙағында ошо билдәләрҙе, йәғни үҙегеҙҙең күңелһеҙ уйҙарығыҙҙы - иҫәпләгеҙ һәм икенсе көнөнә ошо билдәләрҙе кәметергә тырышығыҙ. Насар һәм күңелһеҙ уйҙарҙы контролгә алырға көсөгөҙ етеүенә инанығыҙ: уларҙы бит һеҙ үҙегеҙ тыуҙыраһығыҙ, тимәк, үҙегеҙ үк уларҙы юҡҡа сығара ла алаһығыҙ. Психологтарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, яңыса фекерләү кешелә ай буйына формалаша. Бер ай түҙергә тырышығыҙ, ә һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәйәсәк.



### 16 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "В шаге от рая". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Шаманка". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45, 21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.45 Интервью.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Теге өсәү. [12+]**
**23.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ларго Винч: начало". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**

### 17 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Сергей Юрский. Против правил". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "В шаге от рая". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Шаманка". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 Детей много не бывает. [6+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Земляки. [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [16+]**
**0.00 Х/ф "Ларго Винч 2: Заговор в Бирме". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**

### 18 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Лора Гуэрра. Среди великих итальянцев". [12+]
3.35 "Наедине со всеми". [16+]
4.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "В шаге от рая". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Шаманка". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15, 18.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "АйТекә!" [6+]**
**15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.30 "Настоящий полковник". К юбилею главного госавтоинспектора РБ Динара Гильмутдинова. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Паранормальное". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Белый пароход". [12+]**

### 19 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Пары. Короткая программа. Женщины. Короткая программа. Трансляция из Канады. [0+]
12.45 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
1.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Пары. Короткая программа. Женщины. Короткая программа. [0+]
3.35 "Наедине со всеми". [16+]
4.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "В шаге от рая". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Шаманка". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30, 23.45 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Учим башкирский язык. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15, 20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сердцеед". [16+]**
**2.15 Д/ф "Инсан". [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**

### 20 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Мужчины. Короткая программа. Пары. Произвольная программа. Трансляция из Канады. [0+]
13.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Съесть слона". [12+]
1.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Мужчины. Короткая программа. Пары. Произвольная программа. [0+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.25 Х/ф "Одиночество". [12+]
03.00 Х/ф "Белое платье". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Д/ф "Самые крупные катастрофы". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30, 4.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Детей много не бывает. [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Х/ф "Титан". [16+]**
**2.30 Спектакль "Тайны, унесенные Чингисханом". "Крах и отчаяние". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 21 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Женщины. Произвольная программа. Трансляция из Канады. [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Модный приговор". К юбилею Надежды Бабкиной. Специальный выпуск. [6+]
13.15 Д/ф Премьера. "Надежда Бабкина. "Если в омут, то с головой!" [12+]
14.15 Премьера. Юбилейный концерт Надежды Бабкиной. [12+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.20 Большая игра. [16+]
0.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Танцы. Женщины. Произвольная программа. [0+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
09.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.45 Х/ф "Долги совести". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "Ради твоего счастья". [12+]
00.50 Х/ф "Даша". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Яңылыҡтар.**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Надо знать! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Аҙна яңылыҡтары.**
**23.15 Юлдаш-хит. [12+]**
**1.00 Х/ф "Я хочу видеть". [12+]**
**3.00 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**5.30 Д/ф "Самые крупные катастрофы". [12+]**

### 22 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00, 12.00 Новости.
6.10, 4.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.55 Д/ф Премьера. "Великие битвы России". [12+]
16.45 Точь-в-точь. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.45 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Танцы. Произвольная программа. Мужчины. Произвольная программа. [0+]
0.40 На самом деле. [16+]
1.40 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат мира-2020. Показательные выступления. Прямой эфир из Канады.
3.40 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

04.20 Х/ф "Одиночество". [12+]
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
09.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.15 "Цена красивой жизни". [12+]
13.20 Х/ф "Женщина с прошлым". [12+]
17.40 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.30 Х/ф "Всё, что ты любишь..." [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Яңылыҡтар.**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.30 Моя вершина. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 Детей много не бывает. [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 "Йырлы көрәҙ". [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Аҙна яңылыҡтары. [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Д/ф "Инсан". [12+]**
**17.45 Полезные новости. [12+]**
**18.00 Лидеры региона. [12+]**
**18.30 Т/с "Бирешмә!" [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Х/ф "На берегу мечты". [12+]**
**2.15 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХӘТЕРҘӘ ҺӘМ ЙӨРӘКТӘРҘӘ!




**Быйыл бөтә донъя оло байрамға - 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығын үткәрергә әҙерләнә. СССР тигән ҡеүәтле державаны тәшкил иткән, үҙгәртеп ҡороу елдәре башланып, бөгөн һәр ҡайһыһы айырым дәүләт статусына эйә элекке союздаш республикаларҙың ҡайһы берҙәрендә был датаға ҡараш та, Еңеүгә мөнәсәбәт тә төрлөсә булһа ла, Рәсәй халҡы өсөн ул - иң изге байрамдарҙың береһе. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе А. Сидякин байрам концепцияһын раҫланы.**

Башҡортостан халҡы ла Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләй. 1941-1945 йылдарҙа СССР Ҡораллы Көстәре сафында республиканан 700 мең кеше (шул иҫәптән, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм хәрби училищелар курсанттары) була, уларҙың 575 меңе һуғыш йылдары барышында мобилизациялана. 322 меңдән ашыуы яу яландарында ятып ҡала, 50 мең самаһы һуғыш йылдарында инвалидлыҡ буйынса ҡайтарыла. Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн 291 яҡташыбыҙ Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, 46 яугир - Дан орденының тулы кавалеры.

Илдең оборона-сәнәғәт ҡеүәтен нығытыуға ла республика ҙур өлөш индерә: һуғыш йылдарында бында 100 сәнәғәт предприятиеһы, тиҫтәләрсә госпиталь, үҙәк дәүләт органдарының бер нисәһе күсерелә, ошо осорҙа Башҡортостанда 60 хәрби подразделение төҙөлә. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының даны йылдар үткән һайын сағыуыраҡ балҡыған һымаҡ, ләкин йылдар үткән һайын ветерандар сафы ла кәмей, изге тарих онотолоуға дусар була бара, яңы быуындар өсөн ил кисергән афәт бары тик заманса гаджеттарҙан ҡараған фантастик киноға әүерелә барғандай. Сөнки тарихты үҙгәртеп, совет халҡының нацизмды еңеүҙәге ролен түбәнәйтеп күрһәтергә маташыусылар ҙа юҡ түгел. Бындай шарттарҙа беҙгә тарихи хәҡиҡәтте һаҡлап ҡалыу һәм уны киләсәк быуындарға еткереү мөһим. Шуға ла Рәсәйҙә иғлан ителгән Хәтер һәм дан йылын үткәргәндә төрлө саралар аша тыуған ил, ҡаһарман халыҡ өсөн ғорурлыҡ тойғоһон уятыу, йәштәрҙә илһөйәрлек тәрбиәләү маҡсаты ҡуйыла ла инде. Киң мәғлүмәт сараларына һуғыш йылдары тураһында материалдар баҫтырыу һәм бөйөк датаның әһәмиәтен йәштәргә аңлатыу бурысы йөкмәтелә. Йылдағыса "Георгий таҫмаһы"н таратыу акцияһы ла дауам итәсәк. "Иҫлә мине!" акцияһы һуғыш яланында һәм тылда Еңеү көнө яҡынлаштырған кешеләрҙең мәғлүмәттәре ҡуйылған стендтарҙы тәшкил итәсәк. Ул һәр ерҙә 9 Май көнөндә урынлаштырыласаҡ. Белем биреү учреждениелары араһында үткәреләсәк "Ватан улдарын үҫтерәбеҙ" тип аталған республика конкурсы уҡыусыларҙа гражданлыҡ-патриотлыҡ тәрбиәләүгә йүнәлтелә һәм ошо йүнәлештә эшләгән иң актив 75 мәктәпкә Советтар Союзы Геройҙары исеме менән аталыу хоҡуғы бирелә. Байрам тантаналарына Өфөгә һәр муниципаль районда 2 ветеранды, уларҙы оҙатып йөрөүсе яуаплы кешене һәм ветерандар активын (барлығы 288 кеше) саҡырыу, уларҙы Республика Башлығының ҡабул итеүен ойоштороу һәм байрам парадында ҡатнашыуҙарын тәьмин итеү планлаштырыла.

Төп байрам саралары 2 майҙа башлана. Һәр урында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының ҡәберҙәрен, туғандар ҡәберлеген тәртипкә килтереү эштәре башҡарыласаҡ. 8 майҙа - "Хәтер вахтаһы", "Исемләп иҫкә алайыҡ...", байрам концерты һәм БР Башлығының ҡабул итеүе, 9 Майҙа - һәйкәлдәргә һәм обелискыларға сәскәләр һалыу, тантаналы парад, "Үлемһеҙ полк" хәрәкәте, байрам салюты планлаштырыла. Байрам саралары менән бер рәттән "Һалдат бутҡаһы" акцияһы ла үтәсәк.

Былар - концепцияға индерелгән мөһим дөйөм саралар. Бынан тыш көндәлек һәм һәр муниципалитет, белем биреү учреждениеһы, мәҙәниәт һәм башҡа ойошмалар үҙаллы уҙғара торған тағы ла бик күп саралар бар был документта. "Беҙҙең өсөн иң мөһиме - ветерандар тураһында хәстәрлек, - тиелә Концепцияның төп идеологик бүлегендә. - Улар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн лайыҡлы йәшәү шарттары булдырыу - изге бурысыбыҙ. Беҙ дәүләт йөкләмәләренең үтәлешен ҡәтғи контролдә тотабыҙ һәм өҫтөнлөклө итеп ҡуябыҙ. Еңеү көнө саралары һәм акциялар "исем өсөн" генә үткәрелеүенә юл ҡуйырға ярамай, бында формаль ҡараш булырға тейеш түгел. Ул - халыҡ байрамы. Һәм ул "тыныс тормош байрамы, һуғыш тураһында хәтер", "үткәндәрҙе онотма, бөгөнгө менән йәшә" тигән идеяны күҙ уңында тоторға тейеш".

Бөйөк Еңеү хаҡы нисә миллион кеше ғүмере торғанын бөгөн дә аныҡ ҡына әйтеп булмай. Совет осоронда был һан 20 миллион булһа, хәҙер 70 миллион тиҙәр. Беҙ уларҙың кемдәр икәнен бер ваҡытта ла асыҡлап бөтә алмабыҙ, моғайын. Әммә уларҙың һәр ҡайһыһы беҙҙең, киләсәк быуындарҙың хәтерендә һәм йөрәгендә йәшәргә хаҡлы.

ӘЙТӘГҮР!

# ҠАР ТАҘАРТЫУ ЕҢЕЛ ТҮГЕЛ

**Тәбиғәттең көйһөҙлөгө алдында коммуналь, ҡала хужалыҡтары көсһөҙ булып ҡала килә. Яуаплылар ҡар менән көрәшә, халыҡ ғәйепләне эҙләй. Ә шулай ҙа ҡар таҙартыу буйынса эште нисек ойошторорға? Ошо һорауға гәзит уҡыусылар менән бергәләп яуап эҙләнек.**

***Вил ТӨХВӘТУЛЛИН, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы:*** Үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ, ҡалалағы төп юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу буйынса ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек бар тип әйтмәйем, унда ҙур техника даими эшләй, магистралдәр таҙартылып тора. Ҡала хеҙмәттәре тәүлек әйләнәһенә сменалап, график буйынса өҫтөнлөклө булған участкаларҙы - төп урамдарҙы, социаль объекттарға барыу юлдарын, туҡталыштарҙы тәртиптә тоторға бурыслы. Улар тәү сиратта таҙартылырға һәм транспорт хәрәкәтенә тотҡарлыҡ тыуҙырырға тейеш түгел. Ҡалған участкалар инде икенсе сиратта, шуға күрә ҡалала ихаталар, кварталдар араһын таҙартыуҙа проблемалар бар. Әлбиттә, ҙур техника ихаталарға, квартал араларына инеп, унда төрлө маневрҙар эшләй алмай, был ҡатмарлы һәм уңайһыҙ, сөнки урынтар. Шуға күрә, идара итеүсе компанияларға күберәк бәләкәй габаритлы техника алыуға иғтибар итергә кәрәк, тип уйлайым.

***Фәймә ХӘЙРУЛЛИНА, урам һепереүсе булып эшләп алыусы:*** Күп осраҡта бындай ҡара эшкә ҡала халҡы түгел, ә ауылдарҙа эшһеҙлектән йонсоғандар, ауыл гастарбайтерҙары килә. Бер нисә йыл мин дә шулай эшләп ҡараным. Эйе, эш еңел түгел, бик ауыр. Тәүге көндәрҙә көсөргәнештән шешенеп бөтә инем. Яйлап организм ауыр эшкә лә өйрәнеп китте. Әммә ҡул көсө менән генә йырып сығыуы - ай-һай.... Уйлап ҡарағыҙ - бер кешегә бер генә йорт алды бирелмәй бит, ул бер нисә йорт өсөн яуаплы. Шундағы ҡарҙы ҡул менән генә нисек таҙалап бөтәһең? Яҙҙан-көҙгә тиклем, ярай, урам һеперергә мөмкин, шуға күрә ҡышҡылыҡҡа хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә күберәк алһындар һәм лайыҡлы эш хаҡы түләһендәр ине. Юҡһа, килешеүҙә бер төрлө сумма яҙыла, уның бер өлөшөн картаға күсереп, бер өлөшөн ҡулаҡса менән иҫәпләшкән осраҡтар булды. Ҡайһы бер ваҡыттарҙа аҡсаны тулыһынса бирмәйҙәр ҙә.

***Айҙар ҒӘЛИМУЛЛИН, хеҙмәткәр:*** Быйыл ҡар мул булды, хатта ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәре ҡулдарына көрәк алып, ҡар көрәргә сыҡты. Әммә һәр кем эш ваҡытында ҡулына көрәк тотоп сығып, ихата, туҡталыш һәм башҡа территорияны таҙартып йөрөй алмай бит. Йәки кемдер иртән тороп, үҙе йәшәгән ихата территорияһын бер аҙ булһа ла көрәп ҡуйырға теләр, әммә уға ваҡытында эшенә барып өлгөрөргә кәрәк.

Минеңсә, бөгөнгө заманда эштең күп өлөшө механизацияланырға, уны техника башҡарырға, ә кеше аҡыллы техника менән идара итә белергә тейеш. Ә ул техниканы нисек алырға, ҡайҙан аҡса табырға - уның өсөн яуаплы вазифалы кешеләр бар, улар уйлаһын.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (21) дүшәмбе | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 17 (22) шишәмбе | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 18 (23) шаршамбы | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (24) кесе йома | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 20 (25) йома | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 21 (26) шәмбе | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |
| 22 (27) йәкшәмбе | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 март "Шәмсетдин һәм Шәмсүрә"** (Т. Ғиниәтуллин әҫәре буйынса), новелла. 12+

**18 март "Рөстәмдең сере"** (С. Баженова, Ғ. Ҡотойҙоң "Рөстәм мажаралары" әҫәре буйынса). 6+

**19 март "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+

**20 март "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+

**21 март "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бәпәй-театр. 12.00 0+

**Премьера! "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 18.00 12+

**22 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 март "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 12+

**18 март "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00 0+

**19 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00, 12.00 0+

**20 март "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 16+

**22 март "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 март "Онота алмайым..."** БР-ҙың халыҡ артисы Р. Аҡкучукованың юбилей концерты. 6+

**21 март "Баян-шоу"** (режиссеры С. Аҫҡарова), ҙур концерт. 18.00 6+

**22 март "Маленький принц"** (А. де Сент-Экзюпери) музыкаль тамаша. 18.00 6+

АФАРИН!

# БУЛЫР ИЛДЕҢ БАЛАЛАРЫ...

## Рәми мәктәбендә



**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡығандарҙы бер һүҙ менән "Беренселәр" тип тә атап йөрөтәләр. Беренселек данын йөкмәргә урыны бар гимназияның - уҡыусылары белем буйынса Рәсәй һәм Башҡортостан бәйгеләрендә алдынғылыҡҡа ынтыла, йыр-бейеү, ҡурай уйнау, сәхнәүи тамашалар ҡороу буйынса ла ҡалышмай. Һәр йылдың февраль айы кисәһендә оло залды шығырым тултырып алҡышлай улар сәхнәләге дуҫтарын: "Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуған көнө - беренселәр өсөн байрам!" - тиҙәр. Рәми Ғариповтың һынаулы йылмайып торған һүрәте был тамашаға хайран булып, "Һаумы, киләсәк!" тип сәләмләгәндәй.**

Быйылғы шиғри-музыкаль композиция ифрат тәрән йөкмәткеле булды (режиссер-ҡуйыусыһы һәм сценарий авторы- башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлсәсәк Салауат ҡыҙы Ҡылысова, техник операторҙар Урал Тимеров менән Батырхан Хәмиҙуллин). Сәхнә түрендәге экранда тоҡанған видеоклип гимназияның тарихына байҡау яһай. "Аҡйондоҙ" бейеү ансамбле (етәксеһе А.Такалов) "Гөлнәзирә" не бейеп, бөтә халыҡ иғтибарын бергә туплай һәм... Сәхнәлә бербер артлы "хәтирә-һөйләмдәр тереләэ": өҫтәл артында шәм яҡтыһында үҫмер малай ҡулына ҡәләм ала. Шулай итеп, Рәми Ғарипов 1948 йылда көндәлек яҙа башлай, нисек итеп Салауат районы Арҡауыл ауылынан Өфөгә, фронтта һәләк булған башҡорт яугирҙарының балалары өсөн махсус ҡарар менән асылған 9-сы мәктәп-интернатҡа оҙон юл үтеп килеп етеүе, баш ҡалала яңы тормош менән йәшәй башлауы, ләкин үҙенең һәр тын алышында атаһының уй-хыялдарына барып тотоноуы, тыуған илдә йыр тулы балалар менән яңғыҙ ҡалған әсәһе иҫенән сыҡмаһа ла, уҡып белем алырға тырышыуы. Шулай атай васыяты ғүмере буйы уны алға әйҙәй: "Балам уҡыһын, кеше булһын, илебеҙ имен торһон".

Шағирҙың тыуған көнө... Асыҡ һәм баҙыҡ тауышлы егеттәр һәм ҡыҙҙар сәхнәне шиғри шәлкемдәргә күмә. Йәштәр сығышы, гүйә, киләсәк тауышы булып яңғырай. Рәми Ғариповтың һүҙҙәренә "Аманат" ҡобайыры (Гүзәл Үмәргәлина көйө), "Сыңрау торна" (башҡорт халыҡ көйө) яңғырай (Айназ Низаметдинов етәкселегендә "Аманат" этнофольклор төркөмө). "Тансулпан" драма түңәрәге (етәксеһе Рима Нәбиева), "Дәүер" этномондар төркөмө - улар гимназияның һөйкөмлө һөйәктәре, береһенән-береһе һылыу егет-ҡыҙҙары, күтәп алынған танһыҡ шиғри тауыштары.

Рәми Ғарипов исемен йөрөткән гимназия башҡорт халҡы өсөн һәм гимназия өсөн хеҙмәт һалған замандаштарҙы 1990 йылдан алып, һәр йыл һайын Шағир исемендәге премия лауреаттары тип иғлан итә. Иҫән сағында ла фекерҙәштәр һәм дуҫтар уратаһында ҡайнап йәшәгән Шәхес бөгөн дә үҙ исеме һәм рухы артынан йәштәрҙе, ил тип янған фиҙаҡәр йәндәрҙе әйҙәй. Гимназия тарихын, мәктәптең төп эш һөҙөмтәһен - милли кадрҙар тәрбиәләүҙең нисек үтәлгәне, киләсәктә ниндәй традиция һәм рух менән йәшәйәсәктәре - барыһын барлап китаптарға туплаған егәрле уҙаман Марат Мөхәмәтйән улы Хафизов быйылғы премия лауреаты тип иғлан ителә. Ул 1991-1994 йылдарҙа гимназия-интернат директоры вазифаһын башҡарған Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, билдәле йәмәғәт эшмәкәре.

Шағир исемендәге премия быйыл Сәрүәр Рәшит ҡыҙы Суринаға ла тапшырыла. Ул Башҡортостан телевидениеһы өсөн утыҙҙан артыҡ видеофильмдарҙа 1-се мәктәп-интернаттың тарихын, тәрбиәләнеүселәре яҙмышын, легендар уҡытыусыларын бөтә республикаға күрһәтә, мәктәп-интернаттың тантаналы юбилейҙары айҡанлы уҙған кисәләргә сценарийҙар иҗад итә.

Бик тырышып уҡыусы, гимназия тормошонда актив ҡатнашыусы өс йәш кешегә - быйыл 11-се синыфты тамамлаясаҡ балаларға шулай уҡ Шағир фатиһаһы булып "премия лауреаты" исеме бирелде. Документаль кадрҙар һәм фотоларҙан бик сағыу видеоклиптар ҡораусы Батырхан Хәмиҙуллин, сәхнәүи тамашаларҙы өҫтә алып барыусылар - мәҙәни байрамдарҙа йөҙөп йөрөп ҡатнашыусы Вилена Колеганова менән Нур Собханғолов улар. Бөтә гимназия балалары улар өсөн шатланып гөр килде. Лауреаттарға гимназия-интернат директоры Илнур Рифат улы Сәлихов иҫтәлекле бүләктәр тапшыра, Яҙыусылар ойошмаһы рәйесе Зәки Арыҫлан улы Әлибаев ҡотлау һүҙҙәре әйтә.

Шулай итеп, Рәми Ғарипов исемендәге премияны тапшырыу Башҡортостан әҙәбиәте һәм бөтә йәмәғәтселек өсөн мөһим ваҡиға: дауҡар шағирҙы иҫкә алыу ғына аҙ, уның эшен бер генә көнгә лә туҡтатырға тейеш түгелбеҙ, сөнки тыуған башҡорт телебеҙ бөгөн айырыуса яҡлауға һәм хәстәрләүгә мохтаж, тигәнгә лә ишара был.

**Кинйә МӘЗИТ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҺӘЙБӘТ ЯҢЫЛЫҠ

Башҡортостанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса диссертация советы тергеҙелә. "Быға тиклем республикабыҙҙа тап башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса диссертация советының булмауы ҙур етешһеҙлек ине, - тине Башҡорт дәүләт университеты проекторы Азат Ғәлимханов. - Бөгөн ошо диссертация советы эшләй башланы. Бында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың ярҙамы бик ҙур булды. Сөнки ул фән һәм юғары белем министрлығына Башҡорт дәүләт университетының диссертация советын булдырыу тураһында үтенесен хуплауҙы һорап яҙма мөрәжәғәт ебәрҙе. Был үтенес хәл иткес роль уйнаны. Эш шунда: әлеге ваҡытта РФ Мәғариф һәм фән министрлығы диссертация советтары асыуҙы бик хупламай. Күп юғары уҡыу йорттары ошондай үтенестәр менән мөрәжәғәт итә, ләкин кире ҡағыуҙар күп. Хәҙер Башҡорт дәүләт университетында фән, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ғилми хеҙмәттәр, диссертациялар яҡларға була. Был квалификациялы кадрҙар, яңы фән кандидаттары, яңы фән докторҙары әҙерләргә мөмкинлек бирәсәк".

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИШЕТКЕҢ КИЛМӘГӘНДЕ...

## кешегә һөйләмә

Кире инер ишегенде...ҡаты япма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтөн донъя алданғанды ярата, шулай булғас, алдаһындар, әйҙә.

**(Карло Караффа).**

Белемле кеше генә өйрәнергә ынтыла, ә белемһеҙ өйрәтеүҙе өҫтөн күрә.

**(Эдуар Ле Беркье).**

Әгәр ҙә кешөләгөндәге аҡсаны башыңа һалһаң, уны һинән берәү ҙә тартып ала алмаясаҡ.

**(Бенджамин Франклин).**

Әгәр ҙә кешеләр ғашиҡ булыу арҡаһында ғына ғаилә ҡорһа, күбеһе ғүмер буйы тормош иптәшһеҙ йәшәп донъя ҡуйыр ине.

**(Роберт Льюис Стивенсон).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

Һәр бала - ул рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.

**(Пабло Пикассо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер билдәле психолог семинарҙағы сығышын ҡулына тотҡан 500 һумлыҡ аҡсаны өҫкә күтәреп күрһәтеп, кемгә кәрәк, тигән һорау менән башлаған ти. Ике йөҙләп тыңларға йыйылыусының барыһы ла теләген белдереп ҡулын күтәргән. Быны күргән психолог: "Һеҙгә бирерҙән алда аҡсаны ошолайтам, - тип, аҡсаны бөгәрләп ташлаған. Шунан: "Бынан һуң да уны алырға теләүселәр булырмы?" - тип ҡыҙыҡһынған. Бөтәһе лә ҡул күтәргән. Психолог аҡсаны иҙәнгә ташлап, бер аҙ тапағыслап, кире күтәргән. "Ошондай аҡса кемгә кәрәк?" - тийеүенә лә быҫраҡ һәм бөгәрләнгән һумлыҡты алырға теләүселәр һаны кәмемәгән. "Ҡәҙерле дуҫтар, - тигән шул саҡ психолог. - Әле генә үҙ күҙегеҙ менән күреп, бик хикмәтле дәрес алдығыҙ. Мин был һумлыҡты нимә генә эшләтһәм дә, һеҙ уны үҙегеҙгә алырға теләк белдерҙегеҙ. Сөнки ул үҙкиммәтен юғалтманы, һаман да 500 һумлыҡ аҡса булып ҡалды. Тормошта төрлө хәлдәр була, иңгә көс еткеһеҙ ауырлыҡтар ишелгән мәлдәрҙә һәм сараһыҙлыҡтан ҡулдар һәленгәндә ошо миҫалды хәтергә төшөрөгөҙ. Ниндәй генә хәлдәр булмаһын, һин бер ваҡытта ла үҙкиммәтеңде юғалтмайһың. Быҫраҡмы йә таҙамы, бөтәрләнгәнме йә бөхтәме - һине яратҡандар өсөн һәр саҡ ҡиммәтле, ҡәҙерле булып ҡалаһың. Кеше ҡәҙере уның нимә эшләүенә ҡарап түгел, ә ниндәй булыуына ҡарап билдәләнә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 13 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 227/03